بسم الله الرحمن الرحيم

SAD GRAPHICS

тел. 8 (499) 9066717, 8 (495) 7074666, 8 (905) 7347083
izdatelstvo-sad@yandex.ru - http://www.sadpress.com

Әҙәм Өҙдәмир дизайны

Мөршиҙә Уйсал

ХАҠ ДИНЕМДӘ БЕРЕНСЕ АҘЫМДАРЫМ

Әңгәмә һәм хикәйәттәр аша

Аллаһҡа ышаныу
Фәрештәләргә ышаныу
Изге китаптарға ышаныу
Бәйғәмбәрҙәргә ышаныу
Ахырызаманға ышаныу
Тәҡдиргә ышаныу

Издательская группа САД

Мәскәү 2010

Зәкиә Ураҙбаева тәржемәһе

Дини мөхәррире Айҙар Хәбибуллин

Баҫма төрөк телендәге материалдан әҙерләнде:
«Soru - Cevap ve Hikayelerle Dinimi Öğreniyorum»
Mürşide Uysal - İstanbul.

Мөршиҙә Уйсал.

Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым. Икенсе баҫма. М.: “САД” нәшриәт төркөмө, 2010 йыл, 136 бит.

Был китапта әңгәмә һәм хикәйәттәр аша Имандың нигеҙҙәре аңлатыла. Балалар һәм ололар өсөн тәғәйенләнә.

Бөтә хоҡуҡтары һаҡлана.

Муршида Уйсал. Мои первые шаги по пути истины. 2-е издание. Перевод с турецкого на башкирский язык. М.: ООО «Издательская группа «САД», 2010. – 136 с., 3.000 экз.

ISBN 978-5-902855-68-2

© Издательская группа «САД», Москва, 2010 г.

Тел: 8 (499) 9066717, 8 (495) 7074666, 8 (905) 7347083
www.sadpress.com / izdatelstvo-sad@yandex.ru
Почтовый адрес: 125412 г. Москва, а/я 28
Офис: г. Москва, ул. Ангарская, 21

“САД” ЯСЙ нәшриәт төркөмөнөң Өфө ҡалаһындағы вәкиллеге:
Өфө ҡалаһы, Зенцов урамы, 81 а.
Тел: 8 (3472) 516368, 8 (904) 2528707.

“Әғүҙү билләһи минә – шшайтани-рраджим”

“Аллаһ Тәғәләлә ҡыуылған шайтан яуызлығынан һыйыныу эҙләйем”.

“Бисмилләһи-ррахмәни-ррахим”

“Был донъяла бөтәһенә лә Мәрхәмәтле Аллаһ Тәғәләнең һәм Ҡиәмәт көнөнөң булыуына ышаныусыларға ғына Мәрхәмәтле исеме менән” башлайым.

БИСМИЛЛӘҺИ

“Аллаһ” – беҙҙең баш һүҙебеҙ
Иман менән тултыра беҙҙең күңелдәрҙе.
Тәмле йоҡоға талғанда
Һәм уянғанда таң менән,
***“Бисмилләһи”**, – тимен мин.*

Мин ашағанда ла, эскәндә лә,
Китап уҡығанда ла,
Мәктәпкә дәрескә барғанда ла,
Дуҫтар менән уйнағанда ла
***“Бисмилләһи”,** – тип ҡабатлайым тағы ла.*

*Мин **“Бисмилләһи”** тип шыбырлағанда,*
Ҡабатлауҙан арымаҫ минең телем.
Аллаһ Тәғәләгә өндәшәм мин,
Һәм йөрәгемдә тоямын көс-ҡөҙрәт.
Илтсе мине, Аллаһ, Тура юлдан…

Беҙҙең яратҡан Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм – һәм уны Аллаһ данлаһын) беҙҙе өйрәтә: **“Әгәр ҙә берәйһе ниндәй ҙә булһа эште Аллаһ Тәғәләне маҡтауҙан (данлауҙан) башлаһа, уның эше мотлаҡ хаҡ һәм уңышлы булыр. Аллаһ фатихаһынан тыш башланған һәр төрлө эш бәрәкәтһеҙ һәм осланмаған булыр”**. Шуның өсөн дә гонаһ һаналмаған һәм тыйылмаған эште “Бисмилләһи” һүҙе менән башлау күркәм эш булып тора.

Ҡәҙерле балалар! Һеҙ беләһегеҙме: беҙ мосолмандар. Беҙҙең динебеҙ – Ислам, беҙҙең китабыбыҙ – Изге Ҡөрьән. Беҙҙең беренсе бурысыбыҙ – Аллаһ Тәғәләгә ышаныу һәм Уны һәр ваҡыт иҫтә тотоу. Шуға ла һәр эште **“Бисмилләһи”** һүҙе, йәғни **“Аллаһтың исеме менән”** башларға кәрәк. Беҙ ашағанда ла, һыу эскәндә лә, һәр ваҡыт башта “Бисмилләһи”ҙе әйтәбеҙ.

Ашағандан һәм эскәндән һуң беҙ **“Әл-хәмдү-лилләһ”** тибеҙ. Беҙ быны менән беҙҙе ризыҡ һәм эсемлек менән бүләкләгән Аллаһ Тәғәләгә рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

Мосолман ниндәй генә эш башлаһа ла, ул һәр ваҡыт иң тәүҙә ошо ҡыҫҡа “Бисмилләһи” һүҙен әйтә.

Һәм был күркәм һүҙ шуны белдерә: “Эй, минең Аллаһым, һинең исемең менән башлайым! Минең эштәремде бик яҡшы итеп яйға һал! Мине Үҙеңдең ярҙамыңдан ташлама! Мине үҙеңдән айырма, хаҡ булмаған эште миңә ҡушма! Миңә аҡыл бир! Минең йөрәгемде тыныслыҡ һәм шатлыҡ менән тултыр. Миңә хаҡ ғилем насип ит. Миңә һинең ҡөҙрәтеңде белергә, һиңә тоғро булырға һәм үҙемдең ғүмеремде һинең ҡушҡандарыңды үтәп йәшәргә насип ҡыл”.

* * *

Әкиәт:

Раузалар принцессаһы

Булғанмылыр был, юҡтырмы, бер Аллаһ Тәғәлә генә белә. Алыҫ, бик алыҫ илдә бер бик матур бәләкәй Принцесса йәшәгән, ти. Ул шул тиклем матур булған, һәм уның йөрәге шундай изге, шәфҡәтле булған, уны бөтәһе лә яратҡан һәм Раузалар Принцессаһы тип атағандар, ти.

Был илдә яуыз сихырсы ла йәшәгән, ти. Раузалар Принцессаһы тураһында ишеткәс, ул йоҡоһонан яҙған һәм тыныслығын юғалтҡан. Тирә-яҡта бөтәһенең дә Принцессаның яҡшылығы һәм матурлығы тураһында ғына һөйләүҙәренә, сихырсының өҫтөнлөгөн бөтөнләй күрмәүҙәренә уның көнсөллөгө һәм асыуы килгән. Сихырсы Принцесса менән иҫәпләшергә хыялланған, ти.

Шулай берҙән бер көндө Аллаһ Тәғәләнең бөтә мәхлүктәре: кешеләр, ҡоштар, күбәләктәр, бал ҡорттары яңы иҫ киткес матур яҙғы бер көндөң тыуыуына, Хоҙай Тәғәләне маҡтап шатланғанда, яуыз Сихырсы ла үҙ өйөнән сыҡҡан. Был дөйөм ҡыуанышыу, сырҡылдашыу һәм гөжләү уның кәйефен тағы ла нығыраҡ боҙған, ти.

Сихырсы үҙенең тоғро хеҙмәтсеһен саҡырып алған да, уға сихырланған “яуызлыҡ орлоҡтары” һалынған тоҡсайҙы биргән. Убырлы ҡарсыҡ уға Принцессаға баҡсасы булып ялланырға ҡушҡан, һәм һарайҙа баҡсалар сәскә атҡас, был орлоҡтарҙан сәй әҙерләп, ошоноң менән Принцессаны һыйларға ҡушҡан.

Хеҙмәтсе бөтә әйтелгәндәрҙе теүәл үтәгән. Орлоҡтарҙан ерәнгес еҫ килгән, сөнки улар “яуызлыҡ орлоҡтары” булған. Әммә баҡсалағы раузаларҙан аңҡыусы хуш еҫ сәйҙең яман еҫен баҫҡан. Раузалар Принцессаһы **“Бисмилләһи-ррахмәни-ррахим”** тип шыбырлаған да сихырланған сәйҙе эскән, ти.

Был сәйҙе эскән кеше дөйә сәнскәгенә әйләнергә тейеш була. Хеҙмәтсе, ҡулдарын ыуғылап, яуыз сихырсының сихыр тылсымының тәьҫир итеүенә һәм Раузалар Принцессаһының сәнскәккә әйләнә башлаясағына көн элгәре ҡыуанған.

Әммә бының урынына, Раузалар Принцессаһының муйынына бик матур лилиәләрҙән үрелгән сәскә бәйләме килеп төшкән һәм уның сәстәре алтын тулҡын булып елберләгән, күҙҙәре зөбәржәт япраҡтарына, устары – аҡ ләләләргә, ә тиреһе – баҡсала сәскә атыусы раузаларҙың нәфис таждарына оҡшап киткән. Принцесса көлгән саҡта уның тирәһендә ҡыҙыл мәктәр, һары күҙле ромашкалар, төрлө төҫтәге маргаритқалар сәскә атҡан. Ул һөйләгәндә уның ирендәрендә зәңгәр, күк миләүшәләр күҙҙәрен асҡан.

Ә шул ваҡытта хеҙмәтсе үҙе сәнскәккә әйләнеп ҡарайған һәм кипкән, ти.

Кешеләр, Раузалар Принцессаһын күреп, хайран ҡалып ҡыуанғандар:

– Уның исеме Раузалар Принцессаһы, хәҙер үҙе лә хас та сәскә кеүек.

Раузалар Принцессаһы һәр ваҡытта ла һәр бер эш алдынан “Бисмилләһи”, тип әйткән, шуға ла уға килгән бөтә бәләләр изгелеккә әйләнгәндәр. Аллаһ Тәғәлә уны яуызлыҡтан һаҡлаған.

Яуыз Сихырсы, үҙенең сихыры нимә менән

тамамланғанын белгәс, асыуынан шартлаған. Уның йәшелсә баҡсаһында үҫкән бөтә яуызлыҡ сәнскәктәре бөтәһе бер юлы һулыған.

Бәләкәй Раузалар Принцессаһы “Бисмилләһи” һүҙе уны Сихырсының сихырынан һаҡлағанын аңлаған һәм Аллаһ Тәғәләгә рәхмәт әйткән.

Ул һәр ваҡытта ла: үҫеп еткәс һәм йәш кәләш булғас та, һуңынан әсәй булып ҡартайғас та, Аллаһ Тәғәлә уны һаҡлаһын өсөн доға уҡыған. Һәм Аллаһ Тәғәлә гел уның үтенесен үтәгән.

Бына әкиәт тә бөттө.



АЛЛАҺҠА ЫШАНЫУ

Беҙҙең тирә-яғыбыҙҙа булған бөтә тере һәм йәнһеҙ нәмәләрҙе кем барлыҡҡа килтергән?

Был донъялағы бөтә нәмәләрҙең: ер-һыу, йылға, тау, урмандарҙың, кеше, хайуан, ҡош, бөжәктәрҙең, Ҡояш, Ай, йондоҙҙарҙың барлыҡҡа килтереүсеһе – Аллаһ Тәғәлә.

Әлегә һеҙ бәләкәйһегеҙ. Әммә оҙаҡламай үҫеп етерһегеҙ. Ҙурайып бәлиғ булырһығыҙ. Һеҙ, әлбиттә, белеп тораһығыҙ, донъяла бөтәһе лә хәрәкәт итә һәм үҙгәрә, һәм бөтәһе лә үҙ юлынан бара. Бөтәһе лә ҡәтғи һәм тәртипкә һалынған система менән башҡарыла.

Быларҙың бөтәһенең дә хужаһы бар. Ул Аллаһ Тәғәлә. Ул – ҡар һәм ямғыр яуҙырыусы, Ул – үле ерҙе терелтеүсе, Ул – ялан һәм урмандарҙы йәшелләндереүсе, Ул – аҡ һөт биреүсе һыйырҙы йәшел үлән менән туйындырыусы, Ул берәүҙәре – диңгеҙҙә, икенселәре – күктә, һәм күпселеге – ерҙә тереклек итеүселәргә йәшәү биреүсе.

Кем яралтҡан был донъяны, Ай, йондоҙ һәм Ҡояшты?
Кем барлыҡҡа килтергән Ер, һыу, тауҙар, күк һәм һауаны?

Кем тотоп тора күктә йондоҙҙарҙы?
Кем яуҙыра ергә ямғырҙы?
Кем кешене юҡтан бар иткән?
Кем мине һәм һине барлыҡҡа килтергән?
Кем тыуҙырған һинең ата-әсәңде?
Кем яралтҡан хайуандарҙы?
Кем барлыҡҡа килтергән үҫемлектәрҙе?
Кем барлыҡҡа килтергән йәшелсә һәм емештәрҙе?
Кем бирә беҙгә һәм хайуандарға бөтә кәрәкле нәмәләрҙе?
Кем үҫтерә үле ерҙән тере үҫемлекте?
Кем бер үк ерҙә төрлө емештәр үҫтергән?
Кем туҡтата һәр кемдең йәшәүен?
Кемгә ҡарай бөтә Йыһан?
Кем бөтәһен дә барлыҡҡа килтергән, күрә, ишетә һәм бөтәһен дә белә?
Кем бөтәһен дә туйындыра?
Кем бөтәһен дә булдыра?
Кемдең ихтыяры бөтә ерҙә?
Кем бар башланғысһыҙ һәм сикһеҙ?
Кемдең юҡ тиңдәше һәм оҡшашы?
Кем бер кемгә лә мохтаж түгел?
Кем үлемһеҙ?
Кем көсөнөң сиге юҡ?
Кем тыумаған да тыуҙырмаған да?
Кем һаҡлай һәм ғәфү итә беҙҙе?
Кем беҙгә ғүмер бирә?
Һин кемдең ҡоло?
Кем иң бөйөк һәм иң матур?
Кем бөтәһенән дә һөйөклө?
Кемгә һыйынабыҙ беҙгә ҡурҡыныс булғанда?
Кем беҙҙе тәрбиәләй һәм үҫтерә?
Кем беҙҙе ҡурҡыныстарҙан ҡурсалай?
Кем һинең Хоҙайың?

Был һорауҙарҙың бөтәһенә лә беҙ шулай яуап бирәбеҙ - Аллаһ.

“Аллаһ – ул күктәрҙе һәм Ерҙе бар ҡылды һәм күктән һыуҙы төшөрҙө, һәм уның менән емештәрҙе һеҙгә ризыҡ итеп сығарҙы, һәм Үҙенең бойороғо менән диңгеҙҙә йөрөһөндәр өсөн көймәләрҙе һеҙгә буйһондорҙо, һәм һеҙгә йылғаларҙы буйһондорҙо, һәм һеҙгә төн менән көндө буйһондорҙо, һәм тырыш хеҙмәтсәндәр итеп Ҡояш менән Айҙы буйһондорҙо”

Ҡөрьән “Ибраһим, 32–33”

“Ул төндө һәм көндө, Ҡояшты һәм Айҙы барлыҡҡа килтереүсе”

Ҡөрьән “Әл-Әнбиә, 33”

“Теләгән нәмәһенә Уның әмере: “Бул!” – тип әйтеүгенә етә, һәм ул нәмә барлыҡҡа килә”

Ҡөрьән “Йа Син, 82”

Кем иртә һайын күктәргә сығара
Беҙҙең донъябыҙҙы яҡтыртыусы Ҡояшты?
Төнгө диңгеҙҙә сағылып,
Ай тыуа, кем быны Тыуҙырыусы?

Ағастар ҡороған кеүек ҡышҡыһын
Кем бүләк итә уларға яҙын йәшел кейем?
Оя ҡороп, урманда һайрай һандуғас,
Кем Ул, уға нәфис тауыш биреүсе?

Әсәйебеҙгә булған беҙҙең мөхәббәтте,
Хәстәр менән тулған уның тауышын,
Йөрәктәрҙең асыҡ хаҡлыҡ менән балҡыуын

Кем Ул, бүләк итеүсе был ләззәтте?

Әле Тыуған илде белмәгән йөрәктә,
Кем тыуған ергә мөхәббәтте үҫтереүсе?
Атайыңдан ишетергә теләгәндә яҡшылыҡты
Өмөтөңдө һинең кем һаҡлай?

Кемдәр күңелендә Уға мөхәббәт һаҡлай,
Улар – бәхеткә эйә булыусыларҙан.

(И.Ә. Гәүсә)

ИМАН

Һин ниндәй диндән?

Минең динем – Ислам.

Һин мосолманмы?

Әл-хәмдү-лилләһ.

Әл-хәмдү-лилләһ нимәне аңлата?

Аллаһ Тәғәләне маҡтауҙы, Уға рәхмәтле булыуҙы белдерә.

Ҡайһы ваҡыттан һин мосолман?

Әл-хәмдү-лилләһ, Әл-Мисак заманынан.

“Әл-Мисак” нимәне аңлата?

Аллаһ Тәғәлә ерҙе барлыҡҡа килтерер алдынан бөтә кешеләрҙең (беҙгә тиклем булған һәм беҙҙән һуң буласаҡ) йәндәрен яратҡан, Үҙенең эргәһенә саҡырған һәм уларҙан һораған:

– Ә ләстү бираббикум? (Минме һеҙҙең Аллаһығыҙ?)

– Эйе, Һин беҙҙең Аллаһыбыҙ! – тип яуап биргәндәр. – Һәм Һиңә беҙ буйһонасаҡбыҙ, һәм Һинән ярҙам һораясаҡбыҙ.

Был ваҡыт – Әл-Мисак заманы.

Һәр бер бала мосолман булып тыуа. Тик һуңынан ул үҫкәс, ата-әсәләренең йәки башҡа өлкән кешеләрҙең йоғонтоһо аша ул икенсе динде ҡабул итергә мөмкин.

Нисек итеп мосолман булырға?

Мосолман булыу өсөн “Кәлимәи Тәүхид һәм Кәлимәи Шәһәдәт”те тел менән әйтеп, күңел менән дә инанырға кәрәк.

“Кәлимәи Тәүхид”те аңлата алаһыңмы?

Лә иләһә иллә Аллаһ, Мөхәммәду-ррасүлүллаһ. Мәғәнәһе: “Аллаһтан һәм уның Рәсүле Мөхәммәдтән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) башҡа илаһ юҡ”.

Лә иләһә: Илаһ юҡ. Мәғәнәһе: “Һүҙ бирәм, бер ниндәй ҙә башҡа илаһты ҡабул итмәйем, һәм үҙемдең күңелемде уларҙы ҡабул итеүҙән таҙартам. Төрлө илаһтарҙан таҙарған үҙемдең күңелемде тик Бер генә Аллаһҡа һәм Уның диненә әҙерләнем. Өйҙө һаҙлыҡта төҙөп булмаған кеүек, иман да ауырыу күңелдә көсәйә алмай”.

Иллә Аллаһ: Тик Аллаһ Тәғәләгә генә ышанам. Мәғәнәһе: “Бөтә ялған илаһтарҙы кире ҡағып, тик Бер Аллаһты ҡабул итәм”.

Мөхәммәду-ррасүлүллаһ: Мөхәммәд (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) – Аллаһ Тәғәләнең Рәсүле һәм Бәйғәмбәре. Ул шуны аңлата: “Һүҙ бирәм, бөтә яңылыҡтарҙы инҡар итеп, үҙемдең Хоҙайыма нисек итеп Изге Ҡөрьән аша Аллаһ Рәсүлде (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өйрәткән һәм нисек Рәсүл (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙҙе өйрәтте, шулай ғибәҙәт ҡыласаҡмын.

Аллаһ исеме менән Аллаһтан башҡа бер кем дә һәм бер нәмә лә аталырға тейеш түгел. Һәм Аллаһтан башҡа

бер нәмәгә лә һәм бер кемгә лә ғибәҙәт ҡылырға ярамай.

“Кәлимәи шәһәдәт”те аңлатып бирә алаһыңмы?

“Әшһәдү әлլә иләһә иллә-Аллаһ үә әшһәдү әннә Мөхәммәдән ғәбдүһү үә расүлүһ”.

Мәғәнәһе: “Мин таныҡлыҡ ҡылам, бер Аллаһтан башҡа ғибәҙәт ҡылырлыҡ илаһ юҡ, һәм Мөхәммәд (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Уның Ҡоло һәм Рәсүле икәнлегенә таныҡлыҡ бирәм”.

Дингә ҡарата мөнәсәбәттәренә ҡарап кешеләр өс төркөмгә бүленә:

1 – Мөьмин: Үҙенең дине итеп Исламды һайлаған, иманын тел менән иҡрар иткән һәм уның нигеҙҙәрен йөрәк менән дә таныған кеше;

2 – Кафыр: Асыҡтан-асыҡ Ислам динен ҡабул итмәүсе;

3 – Монафиҡ: Теле менән ул мосолманмын тиеүсе, ә йөрәге менән Исламды ҡабул итмәгән кеше. Ул ялғансы.

Һин Имандың нигеҙҙәрен һанап бирә алаһыңмы?

Әмәнтү билләһи үә мәләикәтиһи үә күтүбиһи үә рүсүлиһи үәл-йәүмил-ахири үә биль ҡадәри хәйриһи үә шәрриһи мин – Аллаһи Тәғәлә үәл бәғсу бәғдәл мәүт — хаҡкун. Әшһәдү әллә иләһә иллә Аллаһ үә әшһәдү әннә Мөхәммәдән ғәбдүһү үә расүлүһү.

Улар нимәне аңлата?

1 – Аллаһҡа ышаныу.
2 – Фәрештәләргә ышаныу.
3 – Уның Изге Китаптарына ышаныу.
4 – Уның Рәсүлдәренә ышаныу.

5 – Ҡиәмәт көнөнә һәм үлгәндән һуң яңынан терелеүгә ышаныу.

6 – Изгелек һәм яуызлыҡтың тәҡдир булып инеүенә ышаныу.

Аллаһтың барлығын беҙ нисек белә алабыҙ?

Бер генә Барлыҡҡа Килтереүсенең барлығы тураһында фекер йөрөтөп, тирә-яҡ донъяны күҙәтеп, үҫемлектәр, хайуандар, ер һәм күктең нисек яратылыуын төшөнөп, һәм Изге Ҡөрьәнде уҡып, беҙ Аллаһтың барлығы тураһында белә алабыҙ.

Беҙ уҡыған китаптың һәр береһенең авторы бар. Һәр бер бинаның уны төҙөгән төҙөүсеһе бар. Матур һүрәт уны төшөргән һәйбәт рәссам тураһында һөйләй. Әгәр ҙә һеҙҙең дуҫтарығыҙҙың береһе, мәктәп үҙенән үҙе төҙөлгән тиһә, һеҙ уға нимә тип яуап бирерһегеҙ? Ул бит һеҙҙә йылмайыу ғына уята.

ТӨПТӘН УЙЛАП ҠАРАЙЫҠ ӘЛЕ

Элек шыршы бәләкәй генә орлоҡ булған…

Орлоҡ ергә төшкән һәм шытым ебәргән,

Ул ваҡыт үтеү менән үҫеп еткән һәм ҙур ағас булған.

Тимәк, бәләкәй орлоҡ үҙендә шыршының яралтылыу программаһын, планын йөрөткән.

Ә кем орлоҡҡа шул программаны һалған?

Диңгеҙ моллюскыһы, дошмандарынан йәшенгәндә, ҡара буяу менән һыуҙы болғансыҡландыра.

Кем өйрәткән уны быға?

Диңгеҙ моллюскыһы ҡайҙан ҡара буяуҙы ала?

Кеше лампочканы уйлап тапҡан, атомды асҡан, компьютерҙы уйлап сығарған һәм эшләгән.

Кем кешенең үҙен уйлап тапҡан һәм яратҡан.

Н. Беренджи

Хикәйәт:

Аллаһтың барлығын кире ҡаҡҡан һауалы кеше тураһында, һәм уға Имам Әғзәм Әбү Хәнифәнең нимә тип яуап биреүе тураһында:

Элекке заманда Багдадта бер бик танылған кеше йәшәгән. Уны Имам Әғзәм Әбү Хәнифә тип атағандар. Ул бик бөйөк ғалим булған, һәм уның бик күп уҡыусылары булған. Кешеләр уға бик ҙур хөрмәт күрһәткәндәр.

Ошо уҡ ваҡытта үҙен бөтә һораүҙар буйынса ла ғилемсе тип иҫәпләгән бер бик һауалы, ҡупым кеше йәшәгән. Ул Аллаһ юҡ тип иҫбатлаған, һәм ҡайҙа ғына булһа ла был турала бәхәс ҡуҙғатҡан.

Был ҡупым кеше Әбү Хәнифә тураһында белеп ҡалған һәм уның менән бәхәсләшергә теләгән. Ул Багдадҡа килгән, Әбү Хәнифәне эҙләп тапҡан һәм үҙенең шул бер үк һорауын биргән: “Аллаһ бармы, әллә Ул юҡмы?”

Әбү Хәнифә яуап бирмәгән, тик иртәгә килешелгән ваҡытҡа, күрһәтелгән урынға килергә ҡушҡан һәм унда был кеше үҙ һорауына яуап аласағын әйткән.

Билдәле булыуынса, Багдадты ике өлөшкә бүлеп Тигр йылғаһы аға.

Иртәгәһенә һөйләшелгән ваҡытҡа Әбү Хәнифә килмәгән. Ҡупым кеше уны оҙаҡ көткән, һәм ул ҡайтырға

йыйынғас ҡына, Әбү Хәнифә килеп еткән. Ҡупым кеше уны күреп ҡысҡырған: “Нишләп һин һуңланың? Һин, моғайын, минең менән бәхәсләшергә ҡурҡаһыңдыр?”

Әбү Хәнифә уға ошолай яуап биргән:

– Юҡ, ҡурҡмайым. Һин бит беләһең, мин йылғаның теге ярында йәшәйем. Ә төндә дауыл йылғаның күперен алып киткән. Һәм мин йылғаға яҡын килеп, күперҙең эшселәрһеҙ, төҙөүселәрһеҙ үҙенән-үҙе тергеҙелеүен теләнем. Ағастарға, таштарға күпер булып ятырға ҡуштым. Дөрөҫ, был күпмелер ваҡытты алды, һәм мин һуңлаһам да, шулай ҙа бында килеп еттем.

Ҡупым кеше ҡысҡырып ебәргән:

– Һин алдайһың! Күпер эшселәрһеҙ, төҙөүселәрһеҙ һәм инженерҙарһыҙ үҙе төҙөлә аламы ни! Быға ышаныусы тиле булыр.

Әбү Хәнифә әйткән:

– Эй, әҙәм балаһы, уян! Һин күпер үҙенән-үҙе төҙөлә алмай тип иҫбат итәһең. Ә ул сағында, һинеңсә, Йыһан үҙенән-үҙе нисек барлыҡҡа килгән? Бит үҙенән-үҙе ағас та, япраҡтар ҙа һелкенмәй. Һин һаман үҙенән-үҙе сәбәпһеҙ бер нәмә лә барлыҡҡа килмәүен аңлай алмайһың! – һәм бының менән ул динһеҙ ҡупым кешене аптырашта ҡалдырған.

Әммә тегеһе һаман үҙһүҙләнгән:

– Бының менән мин килешәм, әммә һин миңә Аллаһты күрһәт, һәм ул сағында беҙ ышанырбыҙ.

Әбү Хәнифә ҡулына бер стакан һөт алған һәм ҡупым кешенән һораған:

– Әйт әле, һин, май менән сырҙы нимәнән яһайҙар?

– Нисек нимәнән? Әлбиттә, һөттән.

– Ул сағында һин һөттә булған май менән сырҙы

күрһәтә алаһыңмы?

– Әлбиттә, был һөттә май һәм сыр бар, тик беҙ уларҙы күрмәйбеҙ.

– Был һөттә май һәм сыр булыуына һин ышанаһың. Шулай булғас, нишләп һин Уны күрмәйенсә лә Аллаһтың барлығына ышанмайһың. Был һөттә май һәм сыр булған кеүек үк Хоҙай Тәғәлә лә бар.

Шул саҡта был кеше үҙенең хатаһын таныған. Был донъяны Булдырыусының барлығын аңлаған, үҙенең хаталаныуынан баш тартҡан. Шул көндән алып Аллаһ Тәғәләнең Булыуына һәм Берлегенә ышанған ул.

Аллаһ беҙҙе нимәгә саҡыра?

Аллаһ беҙҙе фекер йөрөтөргә, был донъяны күҙәтеп һәм өйрәнеп, үҙебеҙҙең аҡылыбыҙҙы файҙаланырға саҡыра. "Һеҙ уйланмайһығыҙмы ни?", "Һеҙ фекер йөрөтмәйһегеҙме ни?" – шулай мөрәжәғәт итә беҙгә Изге Ҡөрьән.

Бөтә барлыҡҡа килтерелгән нәмәләрҙең Ижадсыһы бар; һәм бер нәмә лә үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәй; булыусы Берәү аҡылдарҙы хәҡиҡәт менән яҡтырта һәм бөтәһен дә ҡәтғи тәртиптә тота; Йыһандың Хужаһы һәм Барлыҡҡа килтереүсеһе бар.

"Мәғлүмәтһеҙҙәр белемлеләр менән тиңләшә алалармы?" – тип һорай беҙҙән Аллаһ Тәғәлә һәм беҙҙе ғилемгә саҡыра, беҙҙе хаҡ һәм изге эштәргә йүнәлтә, был ғилемде аңлау – Уға ғибәҙәт ҡылыуға килтерә.

Беҙгә хаҡ юлды күрһәтеп, беҙҙе мәңгелек донъяға – ожмахҡа саҡыра.

Аллаһ булғас, беҙ нишләп уны күрмәйбеҙ?

Эйе, Аллаһ Тәғәләнең барлығына һәм Берлегенә

шигебеҙ юҡ. Әммә беҙ Уны күрмәйбеҙ. Ләкин Уның барлығын аңлайбыҙ. Был донъяла күп нәмәләр бар, уларҙың барлығын беҙ беләбеҙ, әммә күҙҙәребеҙ менән күрмәйбеҙ. Миҫал өсөн, электрҙы беҙ күрмәйбеҙ. Әммә уның барлығын инҡар итә алмайбыҙ. Шулай уҡ һөттә май һәм сырҙы күрмәйбеҙ, әммә уларҙы һөттән эшләйбеҙ. Беҙ ауыртыуҙы, мөхәббәт, шатлыҡ, аҡылды күрмәйбеҙ. Беҙ уларҙы тоябыҙ. Әммә уларҙың барлығы тураһында бер кемдең дә шиге юҡ.

Аллаһтың барлығы ла ошоға оҡшаш. Беҙ Уны күрмәйбеҙ, әммә Ул бар, һәм Ул беҙҙе күрә. Ул күрә, белә һәм беҙҙе ишетә. Уның белеүенең сиге юҡ. Ул беҙ нимә күрәбеҙ, нимәне күрә алмайбыҙ, нимә аңлайбыҙ, нимәне төшөнөп етә алмайбыҙ – бөтәһен дә белә.

“Ул – Аллаһ күктәрҙә һәм ерҙә; һеҙҙең йәшерен һәм асыҡ нәмәләрегеҙҙе лә белә; һеҙ нимәгә эйә булаһығыҙ, шуны белә”

Ҡөрьән “Әл-Әнғәм, 3”

“Ул ҡоро ерҙә һәм диңгеҙҙә булған нәмәләрҙе белә; япраҡ Уның белеүе менән генә төшә һәм ер ҡараңғылығында йәш тә, ҡоро ла орлоҡ юҡ, ул асыҡ китапта ла булмаған булыр ине”

Ҡөрьән “Әл-Әнғәм, 59”

“Ысынлап та, Аллаһ һеҙ нимә эшләгәнде күрә”

Ҡөрьән “Әл-Баҡара, 110”

“Аллаһ – Ишетеүсе, Күреүсе”

Ҡөрьән “Әл-Муджәдәлә, 1”

Ул ябай күҙ менән күреп булмаған нәмәне – атомда нимә йәшеренгән икәнен белә. Аллаһтан башҡа кем электрондар, протондар, нейтрондар һәм фотондарҙан торған нәмәне барлыҡҡа килтерә һәм уларҙы туҡтауһыҙ хәрәкәт иттерә ала?

Аллаһ Тәғәләнең барлығын һәм ҡөҙрәтле икәнен иҫбатлау йөҙөндә бер үк ҡояшта йылынып, бер үк һыу менән һуғарылып, бер үк ерҙә үҫеп һәм бер үк һауаны һулап, сикһеҙ күп төрлө төҫтәге сәскә, емеш, йәшелсә һәм үҫемлектәрҙең төрлө тәм, еҫ, төҫ һәм хуш еҫле булып кеше алдына килеп баҫыуын нисек күрмәҫкә мөмкин.

Хикәйәт:

Йәш ҡыҙ, уны тыңлап Ғүмәр Хәлифтең (радыйаллаһу ғәнһү) илауы тураһында

Хәлиф булғандан һуң, изге Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) йыш ҡына ябай кейемдә, ҡалаға ябай халыҡтың нисек йәшәүен белеү өсөн сығыр булған.

Шулай бер ваҡыт төндә Ул Мәҙинәнең урамдары буйлап йөрөгәндән һуң, таңға табан арыған һәм бер өйҙөң эргәһенә ял итергә ултырған. Өйҙә һөйләшкәндәре ишетелеп торған. Ҡатын үҙенең ҡыҙын уята икән: “Ҡыҙым, тор, һөт һатыусы килмәҫ элек һөткә һыу ҡушып өлгөрөргә кәрәк”.

Ҡыҙы әсәһенә: “Әсәй, нисек ундай нәмәне эшләргә мөмкин. Һин ишетмәнеңме ни, Ғүмәр Хәлиф һөткә һыу ҡушыуҙы тыйҙы бит?”

– Булһа ни, ҡыҙым! Ғүмәр Хәлиф хәҙер үҙенең

түшәгендә бик тәмле итеп йоҡлай. Ул нисек күрһен, ти, беҙ ҡайһылай һөткә һыу ҡушҡанды?

– Әсәй, Ғүмәр Хәлиф әле йоҡлаһа ла, Аллаһ Тәғәлә лә йоҡлаймы? Аллаһ беҙҙе күрмәйме икән ни? Ул беҙ әле нимә эшләгәнде күрмәйме ни? – тигән ҡыҙы әсәһенә мөрәжәғәт итеп. Әсәһе нимә тип әйтергә лә белмәй аптырап ҡалған. Ул үҙенең хатаһын аңлаған һәм үҙенең һүҙҙәренә үкенгән.

Ғүмәр Хәлиф (радыйаллаһу ғәнһү) был һөйләшеүҙе тыңлап, шым ғына үҙ алдына илаған. Ысын күңелдән ышаныусы йәш быуын үсеп килә, уларҙы Аллаһ ҡаршыһында Уға булған һөйөү һәм ҡурҡыу яуызлыҡтан һәм гонаһтан туҡтатҡан, арындырған. Ғүмәр Хәлифтең (радыйаллаһу ғәнһү) күҙ йәштәре шундай быуынды үстергән Аллаһ Тәғәләгә рәхмәт күҙ йәштәре булған.

Ғүмәр Хәлиф (радыйаллаһу ғәнһү) өйөнә ҡайтҡан.

Иртәнсәк уның иң элек эшләгән нәмәһе – улы Асымды, Аллаһтың күреп торғанын белеп, һөткә һыу ҡушмаған ҡыҙ менән йәрәштереү булған.

Күп йылдарҙан һуң был ҡыҙ Ғүмәр Икенсе тип аталған Ғүмәр бин Ғабдул-Ғәзиздең өләсәһе булған. Хаҡ һәм ғәҙел Ғүмәр бин Ғабдул-Ғәзиздең идара итеү дәүерендә дәүләт тағы ла нығыраҡ үсешкән һәм байыған. Илдә хатта байҙарҙың ярҙамына мохтаж ярлылар ҙа булмаған.

АЛЛАҺ, ҺИН БӨТӘҺЕН ДӘ БЕЛӘҺЕҢ

Минең Ҡөҙрәтле Аллаһым, һин беләһең
Күктә кәйелеп осоусы ҡоштар тураһында,
Беҙҙең төшөбөҙҙә нимә күреүебеҙ хаҡында,
Беҙ башҡарған эштәр хаҡында

Бөтәһен дә беләһең, Ҡөҙрәтле Хоҙай!
Күк йөҙөн, диңгеҙ һәм тауҙарҙы,
Ергә төшкән япраҡты,
Нимә булған һәм нимә буласаҡ,
Бөтәһен дә беләһең, Ҡөҙрәтле Аллаһ!

Иртәгә нимә була?
Кем беҙҙең менән булмаясаҡ, кем әле йәшәйәсәк?
Кем илаясаҡ, кем көләсәк?
Бөтәһен дә беләһең, Ҡөҙрәтле Хоҙай!

М. Йәшәр Кандәмир

Хикәйәт:

Әхмәт нишләп тауыкты килтермәгән?

Әхмәт үҙенең синыфында иң яҡшы өлгәшеүсе уҡыусыларҙың береһе ине. Уҡытыусы ла уны яратҡан. Башҡа уҡыусылар, уны гел өлгө итеп ҡуйғанға, Әхмәткә көнләшкәндәр. Бер саҡ улар бөтәһе лә бергә уҡытыусы янына һорау менән килгәндәр: “Уҡытыусыбыҙ, беҙ ҙә тырышып уҡыйбыҙ, әммә һеҙ Әхмәтте ныҒыраҡ ярата һығыҙ. Ни өсөн уны ныҒыраҡ яратаһығыҙ?”

Уҡытыусы һорауға һуңыраҡ яуап бирергә вәғәҙә иткән. Ул шул уҡ көндө уҡыусыларға өйгә эш биргән: “Иртәгә һеҙҙең һәр ҡайһығыҙ бер кем дә күрмәгәндә миңә тауыҡ һуеп килтерһен”.

Бөтәһе лә өйҙәренә таралғандар. Уҡыусылар кем нисек булдыра алған шулай, кем ағас артында, кем тау артында, кем баҙға төшөп, кеше күрмәгәндә тауыҡты тотоп салғандар. Иртәгәһенә бөтә уҡыусылар ҙа мәктәпкә берәр

тауыҡ тотоп килгән. Тик Әхмәт кенә бер ни килтермәгән.

Уҡыусылар Әхмәттән көлә башлағандар, ә ҡайһы береһе: “Уҡытыусының яратҡан уҡыусыһы Әхмәт уның ҡушҡан эшен үтәй алмаған”, – тип ҡысҡырған.

Уҡытыусы синыфҡа килеп инеү менән һәр бер уҡыусы уға берәр тауыҡ килтереп тотторған.

Уҡытыусы: “Ә һин, Әхмәт, тауыҡ һуйып алып килмәнеңме ни?”

Әхмәт бик күңелһеҙ яуап биргән: “Уҡытыусы ағай, минең сәбәбем булды, һеҙ ҡушҡан эште үтәй алманым”.

– Әхмәт, ниндәй сәбәп?

– Уҡытыусы ағай, мин тауыҡты тоттом. Уны салырға урын эҙләй башланым. Һеҙ бит бер кем дә күрмәһен тип әйткәйнегеҙ. Ағас араһына индем, тау артына барҙым, баҙға төштөм. Хатта уны ҡараңғыла салырға уйланым. Әммә булдыра алманым, уҡытыусы ағай. Мин ҡайҙа ғына булһам да, мине Хоҙай Тәғәлә күреп торғанын беләинем. Шуға ла үтәй алманым.

Уҡытыусы был яуапҡа ныҡ шатланған, сөнки нимә ишетергә теләһә, шуны ишеткән. Һәм уҡыусыларға мөрәжәғәт итеп былай тигән: “Ҡәҙерле минең тәрбиәләнеүселәрем. Мин, әлбиттә, һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә яратам. Әммә Әхмәттең тәҡүәлелеге һәм ҡайҙа булһа ла Аллаһтың уны күреп тороуын аңлауы, уны үҙенә башҡа бер кеше яһай. Хәҙер һеҙ аңланығыҙмы, ни өсөн мин уны башҡаларҙан артығыраҡ яратам.

Һәм синыфташтары Әхмәткә, уның уйҙарының һәм тәртибенең таҙа һәм камил икәнен аңлап, икенсе төрлө ҡарай башлағандар.

* * *

Аллаһтың Берлеген беҙ нисек аңлай алабыҙ?

Аллаһ бар, һәм Ул Берәү. Уға тиңдәш, оҡшаш юҡ һәм Уның иптәше лә юҡ.

Ул бер нәмәгә лә оҡшаш түгел. Һәм бар булыусыларҙың береһенә лә оҡшаш түгел. Ул оҡшашһыҙ Бар.

Уның Ҡөҙрәтенең сиге юҡ. Уның ерҙә лә, күктә лә урыны юҡ. Ул көслөләрҙең иң Ҡөҙрәтлеһе, бөйөктәрҙең иң Бөйөгө.

“Әйт: Аллаһ Ул Берәү”

Ҡөрьән “ Әл-Ихлас, 1”

“Ул тыуҙырманы ла һәм Ул тыуҙырылманы ла”

Ҡөрьән “Әл-Ихлас, 3”

“Уға тиңдәш юҡ, һәм Уға оҡшаш та юҡ”

Ҡөрьән “Әл-Ихлас, 4”

Нимә булыр ине, әгәр ике Илаһ булһа?

“Әгәр ҙә унда (Ерҙә һәм Күктә) Аллаһтан башҡа илаһтар булһа, улар һәләк булырҙар ине” Ҡөрьән “Әл-Әнбиә, 22”

Миҫал өсөн илаһтарҙың береһе болоттарҙан ҡарҙы алырға теләһә, ә икенсеһе: “Юҡ, мин ҡояштың яҡтыртҡанын теләйем”, – тиһә. Ул сағында улар араһында көрәш китер ине, һәм был тәртипһеҙлек һәм буталсыҡлыҡта бөтә Йыһанда тәртип боҙолор ине. Планеталар бер-береһен ҡыуып уҙып китә алмай. Ҡояш, Ай һәм йондоҙҙар бер үк ваҡытта ҡалҡа алмайҙар.

Бер мәктәптә ике директор була алмай, һәм бер ҡалала ике мэр ҙа булмай, һәм шулай уҡ ике илаһ юҡ.

Бөтә булдырылған нәмә һәм Йыһан камиллыҡта

һәм ҡәтғи тәртиптә йәшәй. Ҡояш, Ай һәм йондоҙҙарҙың хәрәкәте билдәле система һәм эҙмә-эҙлелектә була. Был да Аллаһтың Берлеге менән билдәләнелгән.

Әгәр ҙә Аллаһ берәү булмай, ә бер нисә илаһ булһа, ул сағында бөтә нәмәләрҙең тәртибе юғалыр ине. Ҡояш һәр ваҡытта ла көнсығыштан калҡмаҫ, һәр ваҡытта ла көнбайышҡа байымаҫ, ә йыл миҙгелдәре бер-береһен алыштырмаҫ ине. Ут һәр ваҡытта ла йылытмаҫ, ҡояш йылыны ваҡыты-ваҡыты менән генә бирер ине.

Тирә-яҡҡа ҡарағыҙ әле, һеҙ ниндәй ҙә булһа етешһеҙлек, кәмселек күрәһегеҙме? Был аҡыл менән аңлап етә алмаҫлыҡ камиллыҡ һәм тәртипкә һалынғанлыҡ Аллаһтың Берлегенә дәлил булып тора.

ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ ӘЛЕ...

- Ер менән Ҡояштың араһы шундай алыҫлыҡта, был һүнмәй торған сығанаҡ беҙгә йылыны күпме кәрәк, шул тиклем ебәрә. Әгәр ҙә Ер Ҡояштан саҡ ҡына алыҫлашһа ла, беҙ туңып бөтөр, ә инде яҡынайһа – беҙ янған булыр инек.
- Ер күсәре Ҡояшҡа ҡарата 23 градусҡа ауышыу сәбәпле, йыл миҙгелдәре алышынып тора. Әгәр ҙә был ауышлыҡ булмаһа, океандарҙың һыу быуы ҡотоптарҙа тупланыр, ә материктар боҙ ҡатлауы менән ҡапланыр ине.
- Беҙҙең йөрәгебеҙ теләһә ниндәй двигателдән дә камилыраҡ һәм йылдар буйына ялһыҙ эшләй. Был камил мотор көнөнә 100000 тапҡыр һуға һәм Ижадсы тарафынан бирелгән көстө файҙаланып тәүлегенә 10 тонна ҡанды ҡыуа. 60 йәш ғүмер һуҙымында был күрһәткес 220000 тоннаға барып етә.

Бындай күләмдәге ҡан 7,5 метр радиуслы 100 этажлы өй бейеклегендәге цилиндрҙы тултыра ала. Ҡан йөрөп торған тамырҙарҙың оҙонлоғо 150000 километрға етә. Был ара Ер әйләнәһенән 4 тапҡырға ҙурыраҡ, ҡан тамырҙар буйлап тәнде 13 секундта урап сыға. Был Барлыҡҡа килтереүсенең Ҡөҙрәтен раҫлаусы йәнә бер дәлил.

• Фән тарафынан бер тамсы ҡанда 5 миллион тере күҙәнәк булыуы, ҡандың 50, бауырҙың 400 функция үтәүе, бөйөрҙәрҙең һәр 5 минут һайын ҡанды тулыһынса таҙартыуы, бер күҙәнәктә булған информацияның 46 том китапты тултыра алыуы, кеше мейеһенең иң яҡшы компьютерҙарҙан да йөҙ тапҡырға камилыраҡ булыуы иҫбатланған.

• Ер һауаһыҙ бушлыҡта 12 төрлө хәрәкәт яһай һәм үҙ күсерендә һәм Ҡояш тирәләй сәғәтенә 100000 километр тиҙлек менән әйләнә; Ҡояш системаһының бер сигенән икенсеһенә тиклем алыҫлыҡ – 10 миллиард километр; беҙҙең Галактикала 100 миллиард шундай Ҡояш системаһы һәм бөтә Йыһанда 200 миллиард шундай Галактика бар; иң яҡын йондоҙға булған ара самолетта 16 миллион йыл иҫәпләнә; шундай йондоҙҙар бар, улар Ҡояштан 10 миллиард тапҡыр ҙурыраҡ һәм 6 секунд эсендә Ҡояш 1 йыл буйы биргән тиклем яҡтылыҡ бирә. Был да ғалимдар тарафынан асылған.

Нисек итеп ҡар бөртөктәре Аллаһтың Барлығын һәм Ҡөҙрәтен иҫбат итәләр?

Һеҙ ҡар яуыуы тураһында уйланғанығыҙ бармы? Ҡар бөртөктәре яуғанда бер-береһенә йәбешәләрме? Эйе, ергә төшөп, улар ҙур көрттәр хасил итә. Йәки бына һеҙ ҡарҙан ҡыш бабай яһағанда, ҡарҙан йомарлаҡтар яһайһығыҙ. Ә әгәр ҙә бындай йомарлаҡтар күктән ергә яуһалар, нимә

булыр ине?

Аллаһ Тәғәлә ҡарҙы шулай итеп эшләгән, күктә ул йомарлаҡтарға йыйылмай, һәм яуып беҙгә зыян килтермәй. Ҡар бөртөктәре еңел һәм һалмаҡ ҡына итеп яуалар һәм ялтырауыҡ күбәләктәр кеүек беҙгә төшәләр.

Ҡар бөртөктәренең матурлығы һәм геометрик камиллығы күп кенә оҫта рәссамдарҙы һәм яҙыусыларҙы илһамландыра. Шул уҡ ваҡытта уларҙың береһе лә икенсеһенә оҡшаш түгел. Һәр ҡайһыһы үҙенсә нәфис һәм берҙән-бер.

Беҙҙең тауыштарыбыҙ, йөҙҙәребеҙ һәм бармаҡ битендәге тирееләребеҙ төрлө булған кеүек, һәр бер ҡар бөртөгө лә ҡабатланмаҫ төрҙә.

Бер-береһенә оҡшамаған ҡар бөртөктәрен Барлыҡҡа килтереүсенең Ҡөҙрәте һәм көсө кеше тауыштарының, йөҙ һәм бармаҡ һүрәттәренең күп төрлө варианттарының булыуында ла сағыла.

50 сантиметр ҡалынлыҡта һәм 1 квадрат метр майҙандағы көрттә 1 миллион ҡар бөртөгө бар. Әгәр ҙә ҡар ниндәй ҙә булһа бер илде тулыһынса ҡаплаһа, бөтә был массала бер-береһенә оҡшаған ике ҡар бөртөгө табылмаясаҡ.

Был 50 йыл буйы 6 меңдән артыҡ ҡар бөртөгөн фотоға төшөргән америкалы Вильсон Бентли тарафынан иҫбатланған. Һуңынан ҡар бөртөктәрен фотоға төшөрөү айырым сәнғәткә әйләнгән.

Был миҫалдар донъяла бер нәмәнең дә осраҡлы түгел икәненә дәлил булып хеҙмәт итә, бөтәһе лә билдәле бер тәртиптә бара. Һәм был Аллаһ Тәғәләнең Берлегенең сираттағы сағылышы.

Беҙ Аллаһ Тәғәләнең нисек булыуын күҙ алдына килтерә алабыҙмы?

Беҙ үҙ күҙҙәребеҙ менән Аллаһты күрә алмайбыҙ. Һәм үҙ аҡылыбыҙ менән Уны күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Беҙ Аллаһ Тәғәлә хаҡында Ул күпме теләй, шул тиклем генә белә алабыҙ. Киләһе хикәйәт быны аңларға ярҙам итер.

Хикәйәт:

Фил нимәгә оҡшаш?

Индустар ҡараңғы бинаға филде индергәндәр.

Һәм уны халыҡҡа күрһәтергә уйлағандар. Филде күрергә теләгән бер нисә кеше был бинаға ингән.

Унда дөм ҡараңғы булған, тыштан саҡ ҡына ла яҡтылыҡ төшмәгән. Инеүселәр филде ҡулдары менән ҡапшай башлаған.

Берәүһе филдең томшоғон ҡапшап, былай тигән:

– Фил йыланға оҡшаған, ти икән.

Ә икенсеһе филдең ҡолағын тотоп:

– Фил елпеүескә оҡшаған.

Ә өсөнсөһө уның аяғын ҡосаҡлап әйткән:

– Фил бағанаға оҡшаған.

Ә дүртенсеһе филде арҡаһынан һыйпап хәл иткән:

– Фил тәхеткә оҡшаған.

Һәр береһе филдең бер өлөшөн ҡулдары менән өйрәнеп, филдең нисек булыуын аңлатырға теләгән.

Һәм береһенең фекере икенсеһенекенән ныҡ

айырылған. Берәү филде йылан кеүек, икенсеһе елпеүес кеүек тип иҫбат иткән...

Һәм уларҙың һәр ҡайһыһы ҡулдарына май шәм тотоп яҡтыртып ҡараһалар ҙа, уларҙың хикәйәте шулай уҡ айырылыр ине.



АЛЛАҺТЫҢ СЫФАТТАРЫ

А – Заты Сыфаттары, Б – Субути Сыфаттары

А – Заты Сыфаттары (тик Уға ғына хас): Улар алты.

1 – Әл-Вүджүд: Барлығын белдерә. Аллаһ Тәғәлә һәр ваҡытта бар, һәм Уның Ихтыяры бөтә ерҙә лә бар.

2 – Әл-Ҡыдам: Башланғысһыҙ икәнен белдерә. Аллаһ Тәғәләнең булыуының башы юҡ. Ул һәр ваҡытта ла булған. Ул тыумаған да, тыуҙырылмаған да.

3 – Әл-Баҡа: Сикһеҙ булыуҙы белдерә. Аллаһ Тәғәләнең булыуының сиге юҡ. Ул үлемһеҙ.

4 – Әл-Вәхдәнийййәт: Берлеген белдерә. Аллаһҡа хас булған атрибуттар бер кемдә лә, бер нимәлә лә юҡ. Аллаһ Тәғәләгә тиңдәш һәм оҡшаш юҡ.

5 – Мөхәләфәтүл-лил-хаүәдис: Барлыҡҡа килтерелгәндәрҙән айырымлығын белдерә. Аллаһ Тәғәлә Үҙе барлыҡҡа килтергәндәрҙең бер нимәһенә лә оҡшаш түгел.

6 – Әл-Ҡыяму би Нәфсиһи (Ҡыяму би Затиһи): Үҙенән-үҙе булыуҙы белдерә. Аллаһ Тәғәлә Үҙе бар. Ул бер кемдә лә, бер нәмәлә лә мохтаж түгел. Тик бөтә барлыҡҡа килтерелгән нәмәләр Уға мохтаж.

Б – Субути Сыфаттары: Улар һигеҙ.

1 – Әл-Хәййәт: Тере булыуҙы аңлата. Аллаһ Тәғәлә тере һәм йәшәй.

2 – Әл-Ғилем: Белеүсе икәнен аңлата. Аллаһ Тәғәлә бөтәһен дә белә.

3 – Ас-Самиғ: Ишетеүсе икәнде аңлата. Аллаһ Тәғәлә бөтәһен дә ишетә.

4 – Әл-Басар: Күреүсе тигәнде аңлата. Аллаһ Тәғәлә бөтәһен дә күрә.

5 – Әл-Ирада: Нимәлер теләүҙе аңлата. Аллаһ Тәғәлә үҙенең теләктәрендә һәм ынтылыштарында ирекле.

6 – Әл-Ҡөҙрәт: Ҡөҙрәтте аңлата. Аллаһ Тәғәләнең Көсө һәм Ҡөҙрәте бөтә барлыҡҡа килтерелгәндәргә хакимлек итә.

7 – Әл-Кәләм: Телмәрҙе аңлата. Аллаһ Тәғәлә кем менән һәм нисек теләй, шулай һөйләшә.

8 – Ат Такуин: Барлыҡҡа килтереүсе тигәнде аңлата. Ерҙә һәм күктә булған бөтә нәмәләрҙе Аллаһ Тәғәлә барлыҡҡа килтергән.

Беҙ Аллаһты күрә алабыҙмы?

Инша Аллаһ, беҙ Аллаһты күрербеҙ. Тик Уны был донъяла күреү мөмкин түгел. Беҙҙең күреү мөмкинселегебеҙ сикле. Беҙҙең күҙҙәребеҙ бөтәһен дә күрергә һәләтле түгел. Миҫал өсөн, ҡайһы бер хайуандарҙың төндә күргән нәмәләрен беҙ күрә алмайбыҙ.

Беҙ нисек Ҡиәмәт Көнөндә Аллаһты күрәсәкбеҙ?

Мөхәммәд бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: “Ысынында һеҙ ай тыуғанда нисек айҙы күрәһегеҙ, шулай итеп үҙегеҙҙең Раббығыҙҙы күрәсәкһегеҙ”.

Хикәйәт:

Аллаһ беҙҙе күрә

Сәлих үҙенең олатаһынан һораған:

– Олатай, нишләп беҙ Аллаһты күрмәйбеҙ?

Олатаһы уға шулай яуап биргән:

– Сөнки беҙҙең күҙҙәребеҙ шулайтып барлыҡҡа килтерелгәндәр, улар Аллаһты күрә алмайҙар.

– Нишләп улай, олатай?

– Ә һин фотоаппарат менән бөтәһен дә төшөрә алаһыңмы?

– Эйе, төшөрә алам.

– Ә үҙеңдең үпкәң менән йөрәгеңде лә төшөрә алаһыңмы?

– Юҡ, уларҙы тик рентген аппараты менән генә мөмкин.

– Бына күрәһеңме, ике аппарат та төшөрөү өсөн тәғәйенләнһәләр ҙә, фотоаппарат рентген аппараты төшөргәнде төшөрә алмай. Сөнки уларҙың төҙөлөштәре төрлө. Беҙҙең күҙҙәребеҙ Аллаһ тарафынан барлыҡҡа килтерелһәләр ҙә, улар Уны күрә алмайҙар.

– Ә Ул беҙҙе күрәме?

– Әлбиттә, Ул беҙҙе ҡараңғы төндә яҡтыртылмаған бүлмәлә ҡара кейемдә лә күрә.

(М. Йәшәр Кандәмир)

“Аллаһ бабай” тип әйтергә яраймы?

Улай тип әйтергә ярамай. “Әл-Ихлас” сүрәһендә Аллаһ тыуҙырмаған да һәм тыуҙырылмаған да, һәм Уның атаһы ла һәм улы ла юҡ, тип әйтелә.

Аллаһтың Ҡөҙрәте бөтә ергә лә тарала, һәм Уның Ғилеме бөтәһен эсенә ала.

“Аллаһ ергә нимә ингәнен һәм унан нимә сыҡҡанын, күктән нимә төшкәнен һәм унда нимә күтәрелгәнен белә. Һеҙ ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа ул һеҙҙең менән. Аллаһ һеҙ нимә эшләгәнде күрә”

Ҡөрьән “Әл-Хәдид, 4”

“Беҙ кешегә муйынындағы ҡан тамырынан да яҡыныраҡ”

Ҡөрьән “Ҡаф, 16”

“Мәшриҡ тә, Мәғрип тә Аллаһтыҡы”

Ҡөрьән “Әл-Баҡара, 115”

“Аллаһ күктәрҙә тора” тип әйтеү дөрөҫмө?

Улай тип әйтергә ярамай. Был үрҙә килтерелгән аяттарҙан аңлашылды.

Изге Ҡөрьән башынан аҙағына тиклем – ул Аллаһ Тәғәләнең Һүҙҙәре.

Аллаһ Тәғәләнән Ябраил Фәрештә арҡылы беҙҙең яратҡан Бәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) вәхи килгән.

Ҡәҙерле балалар! Аллаһ Тәғәләнең һүҙҙәрен һәм әмерҙәрен ишетеү һәм аңлап төшөнөү өсөн Изге Ҡөрьәнде бик күп уҡырға кәрәк.

“Әгәр ҙә ер йөҙөндәге ағастар ҡауырһындар булып, ә диңгеҙ яҙыу ҡараһы булһа, һәм ул диңгеҙгә йәнә ете диңгеҙ ҡушылһа ла, Аллаһ Тәғәләнең бөтә һүҙҙәрен яҙырға улар етмәҫ ине”

Ҡөрьән “Лоҡман, 27”

Аллаһ Тәғәләнең Барлығын беҙ нисек белә алабыҙ?

Үҙебеҙгә, башҡа мәхлүктәргә һәм Йыһандағы бөтә йән эйәләренә ҡарап, беҙ бөтә камил, матур, төҙөк ижат ителеүҙең Бер Аҡыллы Барлыҡҡа килтереүсеһе булыуын аңлай алабыҙ.

Ибраһим бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) бик бәләкәй сағында атаһының нисек итеп боттарҙы яһауын, халыҡтың уларға табыныуҙарын күреп, оҙон-оҙаҡ ҡояшҡа, айға һәм йондоҙҙарға ҡарап торор булған. Һәм уларҙың ҡасан да булһа һүнеүен күреп, әйткән: “Һүнгән нәмә минең Раббым була алмай”. Һәм шунан һуң Аллаһты аңлап-төшөнгән: “Минең Раббым – Шул, кем уларҙың барыһын да барлыҡҡа килтергән”.

Кем бер ерҙән, бер һауанан һәм бер һыуҙан күп төрлө емештәрҙе булдыра, Уны һәм Уның Көсөн инҡар итеп булмай.

Был аяттар Аллаһ Тәғәләнең Барлығын һәм Ҡөҙрәтен иҫбат итә:

“Һәм уның аяттарынан һин Ерҙе кәмһетелгән, ҡороған итеп күрәһең, һәм, әгәр Беҙ уға һыу төшөрһәк, ул тулҡынлана, бүртенә-ҡабара. Ысынлап та, уны терелткән – үлектәрҙе лә терелтә. Ул, ысынлап та, һәр нәмәгә ҡөҙрәтле!

Ҡөрьән “Фуссыләт, 39”

“Улар үҙҙәре өҫтөндәге Күккә ҡараманылармы ни: нисек Беҙ уны төҙөнөк һәм матурланыҡ, һәм уның бер тишеге лә юҡ?

Һәм Беҙ Ерҙе йәйҙек һәм уның өҫтөнә тауҙарҙы һалдыҡ һәм уның өҫтөндә һәр төрлө матур ишлеләрҙе үҫтерҙек”

Ҡөрьән “Ҡаф, 6–7”

“Һәм Ул Ерҙе йәйҙе һәм уның өҫтөндә тауҙар һәм йылғалар яһаны һәм унда һәр төрлө емеште икешәрләп ишле яһаны. Ул көндө төн менән ҡаплай. Ысынлап та, бында – уйлаған кешеләргә аяттар бар.

Ер йөҙөндә бер-береһенә күрше булған ер бүлемдәре, һәм йөҙөм баҡсалары һәм сәсеүлектәр, һәм бер тамырҙан булған, һәм бер төрлө һыу менән һуғарыла торған хөрмә ағастары бар. Беҙ ашау өсөн уларҙың береһен икенсеһенән артыҡ итәбеҙ. Ысынлап та, бында аҡыллы кешеләр өсөн аяттар бар!”

Ҡөрьән “Әр-Рәғд, 3–4”

Был аяттарҙа бер үк ерҙә, бер үк һыу менән туҡланып, төрлө үҫемлектәрҙең үҫеп сығыуы, уларҙың төрлө емештәр биреүе хаҡында әйтелә. Был аяттар Аллаһтың Барлығын, Уның Ҡөҙрәтен һәм Көсөн асыҡ дәлилләй.

Аллаһ Тәғәлә алдында беҙҙең бурыстарыбыҙ:

1. Бер Аллаһҡа, уға ҡатнашсылар бирмәйенсә инанырға.

2. Бөтә күңелең менән һәм бөтәһенән дә ныҡыраҡ итеп Аллаһты яратырға.

3. Беҙҙең гонаһтарыбыҙҙан тик унан ғына ярлыҡау һорарға.

4. Уға ғына ышанып, тик Уның үҙенән генә ярҙам һорарға.

5. Һәр ваҡыт һәм тик Уның Бер үҙенә генә ғибәҙәт ҡылырға.

6. Уның бөтә биргәндәренә рәхмәтле булырға.

7. Уның яратҡандарын яратырға һәм ҡушмағандарынан баш тартырға.

8. Ул ҡушҡанды үтәргә һәм тыйғандарынан тыйылырға.

Беҙ көндәлек тормошта ҡасан Аллаһ Тәғәләнең исемен әйтәбеҙ?

Берәйһе менән айырылышҡанда: “Һине Аллаһҡа тапшырам”, “Аллаһҡа аманат бул”, – тибеҙ.

Кемделер оҙатҡанда: “Аллаһ Тәғәлә һине бәлә-ҡазаларҙан һаҡлаһын”, – тибеҙ.

Ҡайғы-хәсрәт, ауырлыҡтар килгәндә: “Аллаһ һаҡлаһын”, “Аллаһ ярҙам итһен”, – тибеҙ.

Берәр нәмә эшләргә булһаҡ: “Инша Аллаһ, Аллаһ бирһә, Аллаһ насип итһә”, – тибеҙ.

Берәйһенә асыуланғанда: “Аллаһ хөкөм итһен”, – тип әйтәбеҙ. Әгәр ҙә беҙҙең яҡындарыбыҙға асыуланған кеше ләғнәт яуҙырһа, беҙ: “Аллаһ Тәғәлә үҙе һаҡлап, яҡлап торһон инде”, – тибеҙ.

Хата яһағанда: “Әстәғәфируллаһ: Аллаһтан ғәфү үтенәм”, – тибеҙ.

Ашар алдынан йәки ниндәйҙер эште башлар алдынан “Бисмилләһи: Аллаһ Тәғәләнең исеме менән башлайым”, – тибеҙ.

Ашағандан һуң йәки берәй эште тамамлағандан һуң “*Әл-хәмдү-лилләһ*”, – тибеҙ.

Берәй яҡшылыҡ килеп сыҡһа, “Машаллаһ: был Аллаһ Ихтыяры менән килеп сыҡты”, – тибеҙ.

Аллаһ кемде ярата?

– Аллаһ, кем Уға буйһона һәм ғибәҙәт ҡыла, шуларҙы ярата.

– Аллаһ, кем Уға Уның ниғмәттәре өсөн рәхмәт әйтә һәм Уны маҡтай, шуны ярата.

– Аллаһ иманлы һәм тәҡүәле кешеләрҙе ярата.

– Аллаһ эш һөйөүселәрҙе һәм ғилемлеләрҙе ярата.

– Аллаһ тыйылғандарҙан тыйылып ҡушҡандарын үтәгән кешеләрҙе ярата.

– Аллаһ Уның ҡушҡандарын үтәп һәм беҙҙең ятраҡан Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өйрәткәнсә йәшәгәнде ярата.

– Аллаһ йәмәғәтенә, балаларына һәм ҡул аҫтындағы кешеләргә ғәҙел булғандарҙы ярата.

– Аллаһ, кем ата-әсәһенә хөрмәт итә, шуларҙы ярата.

– Аллаһ, кем үҙенең яҡындарына һәм таныштарына ярҙам итә, шуларҙы ярата.

– Аллаһ шундай мосолманды ярата, кем үҙенең аҡылын хаҡ, ғәҙел эштә файҙалана.

– Аллаһ теүәл һәм тәрбиәле кешене ярата.

Аллаһ кемде яратмай?

– Аллаһ, Кем Уға буйһонмай һәм ғибәҙәт ҡылмай, шуларҙы яратмай.

– Аллаһ уның ниғмәттәренә шөкөр итмәүселәрҙе яратмай.

– Аллаһ сит кешенең мөлкәтен ашаусыларҙы яратмай.

– Аллаһ тәрбиәһеҙ һәм тупаҫ кешеләрҙе яратмай.

– Аллаһ яуызлыҡ эшләүселәрҙе яратмай.

– Аллаһ алдаҡсыларҙы яратмай.

– Аллаһ кемдәр уның ҡанундарын үтәмәй һәм беҙҙең яратҡан Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нимәгә өндәгән шуны үтәмәүселәрҙе яратмай.

– Аллаһ тәкәбберҙәрҙе яратмай.

– Аллаһ бәрәшәндәрҙе яратмай.

– Аллаһ ялҡауҙарҙы һәм һәпрәләрҙе яратмай.

– Аллаһ золомлоҡ ҡылыусыларҙы һәм ғәҙел булмағанҙарҙы яратмай.

Хикәйәт:

Аллаһ яратҡан балалар

Ғилемле аҡһаҡал, намаҙлыҡ өҫтөндә ултырып, устарын юғары күтәреп Аллаһ Тәғәләгә мөрәжәғәт иткән:

“Эй, минең Аллаһым! Мин инде ҡарт һәм минең үлем сәғәтем яҡынлаша. Миңә һин биргән ғилемде мин кемгә биреп ҡалдырайым икән? Үҙемдең китапханамды кемгә ҡалдырырға, ул унда йыйылған китаптың ҡәҙерен белерлек кеше булһын ине. Ундағы ғилемде кем һаҡлай алыр икән?”

Шул уҡ төндә аҡһаҡал асыҡ ҡына төш күрә. Уға йәшел

ҡанатлы фәрештә килгән һәм һүҙ башлаған:

“Һин китапханала һаҡланыусы бик һәйбәт китаптарҙы кемгә бирергә мөмкин икәнлеген белергә теләгәйнең. Ҡайғырма. Аллаһ мине һиңә ебәрҙе, ул турала аңғартыу өсөн. Иртәнге намаҙҙан һуң күршеләге өс өйгә барырһың. Был өйҙәрҙәге өс малайҙы китапханаға саҡыр һәм ул китаптарҙы алыуҙарын һора. Был өсәү һинең китаптарыңды алырға лайыҡлылар“.

Был турала әйткәндән һуң фәрештә елпенгән дә осоп та киткән.

Уянғас, аҡһаҡал үҙенең төшөн иҫенә төшөргән. Ул фәрештә тарафынан әйтелгән һүҙҙәр тураһында уйланған һәм төш шайтан тарафынан бирелмәгәнен уйлап алғас, шулай эшләргә ҡарар иткән.

Иртәнге намаҙҙан һуң аҡһаҡал өс күрше малайын саҡырып алған һәм уларҙы үҙенең китапханаһына алып килгән һәм һораған:

– Ҡәҙерле балалар, Аллаһ һеҙҙе бик ярата, тик миңә билдәһеҙ: ниндәй сәбәп менән. Һеҙ буш ваҡытта нимә менән шөғөлләнеүегеҙҙе һөйләп бирә алмаҫһығыҙмы?

Беренсе малай һөйләй башлаған:

– Иртәнсәк уянғас, мин урман, ағастар йәшеллегенә, йөҙөм ағастарына һәм баҡсаларға ҡарайым. Улар бөтәһе лә ҡышҡыһын ҡоройҙар, япраҡтары ҡойолоп бөтә. Ә яҙ көнө улар яңынан йәшәрә, сәскә ата һәм һуңынан емеш бирә. Оҙаҡ уйланам. Был ағастарҙың эсендә быларҙың бөтәһен дә эшләүсе механизм юҡ. Кем уны эшләй икән?

Былар бөтәһе лә үҙенең ниғмәттәре менән беҙҙе шатландырырға теләүсе Аллаһ ихтыяры менән эшләнә. Быларҙы аңлап, мин Аллаһты тағы ныҡыраҡ яратам. Ошолар тураһында уйлап, йыш ҡына дини китаптар

уҡыйым, һәм минең Аллаһты яратыуым тағы ла арта.

Күпте белгән аҡһаҡал былай тип яуап биргән:

– Балаҡай, үҙеңдең һүҙҙәрең менән һин мине шатландырҙың. Аллаһ һине ярата. Әйләнә тирә-яҡ донъяны күҙәтеү һәм үҙ күҙәтеүҙәреңдән фәһем өсөн ғилем алыу, көн дә дини китаптар уҡыу – был бик һәйбәт.

Һуңынан икенсе малай һөйлгән:

– Мин төндә йондоҙҙар һибелгән күккә һәм тирә-яҡты яҡтыртыусы айға ҡарайым. Һуңынан беҙгә ямғыр килтереүсе болоттар һәм улар туйындырған үҫемлектәр тураһында уйлайым. Һәм быларҙың бөтәһен дә беҙҙең мәнфәғәтебеҙ өсөн барлыҡҡа килтергән Аллаһҡа минең яратыуым тағы ла нығыраҡ арта. Шуға ла мин дини китаптарҙы күп уҡыйым, мин бөтә буш ваҡытымда Ислам буйынса үҙемдең белемемде арттырырға тырышам.

Асыҡ сырайлы аҡһаҡал, уны тыңлап бөткәс, былай тигән:

– Балаҡайым, һин эшләгән нәмәләр Аллаһҡа ныҡ оҡшай. Буш ваҡытта тирә-яҡ донъяны өйрәнеү, унан һығымта яһау, һуңынан дини китаптар уҡыу һәм иманды нығытыу – ул Аллаһҡа оҡшаған эштәрҙең береһе.

Өсөнсө малай былай тип яуап биргән:

– Бабай, минең дуҫтарымдың береһе күкте, икенсеһе ерҙе өйрәнә. Ә мин бөтәһен дә, күктә һәм ерҙәге нәмәләрҙе, ҡоштар һәм хайуандарҙы күҙәтәм. Бит Аллаһ Тәғәлә күктә йәшәүсе ҡоштарға, ерҙә йәшәүсе һарыҡ һәм һыйырҙарға ашамлыҡ бирә. Ә хайуандар беҙгә аҙыҡ бирә. Улар ашаған үлән һөт һәм иткә әйләнә. Улар бер нәмәне ашай, ә беҙгә бөтөнләй икенсе нәмә бирәләр. Үләндең ит һәм һөткә әйләнеүенә ҡарап, һарыҡ һәм һыйырҙарҙың эсендә эшкәртеү фабрикаһы бар икән тип уйларға ярамай. Мин

быны төшөнгәс, минең Аллаһҡа ҡарата һөйөүем арта, һәм бөтә буш ваҡытымда мин дә минең дуҫтарым кеүек үк Ислам буйынса китаптар уҡыйым һәм мосолман булараҡ иманым нығый.

Аҡһаҡал, уның яуабын ишетеп, тағы ла шатланған. Ул үҙенең китаптарын бүлеп балаларға тараҡан һәм әйткән:

– Балалар, бөгөн төндә миңә йәшел ҡанатлы фәрештә килде. Һәм миңә минең китаптарымды Аллаһ яратҡан балаларға бирергә ҡушты. Мин ни өсөн Аллаһ һеҙҙе яратҡанын белергә теләгәйнем. Һәм хәҙер мин быны аңланым. Ҙур шатлыҡ һәм ҡәнәғәтлек менән үҙемдең китаптарымды һеҙгә бирәм. Уларҙы алығыҙ, уҡығыҙ, һеҙ ҙә шулай уҡ, ваҡыты еткәс, хөрмәтле ғалимдар булырһығыҙ.

Балалар шатланышып китаптарҙы үҙҙәренең өйөнә, ата-әсәләренә алып ҡайтып киткәндәр. Аллаһҡа һөйөү менән янған балалар, ошо көндән башлап Ислам буйынса күп уҡығандар. Һәм үҙҙәренә фәһем алып, әйләнә тирә-яҡты иғтибарлы өйрәнеүҙе дауам иткәндәр.

Бөтә барлыҡҡа килтерелгән нәмәләрҙе Аллаһ нимә өсөн яратҡан?

Бөтә тереклек нимә өсөн барлыҡҡа килтерелһә, шул функцияны башҡара. Бал ҡорто бал йыя, ебәк ҡорто ебәк үрә, тауыҡ күкәй һала. Ҡояш йылылыҡ һәм яҡтылыҡ сығара. Ер беҙгә ашамлыҡ бирә. Тәбиғәттә барлыҡҡа килтерелгән бөтә нәмәнең үҙенең функцияһы бар.

Беҙ тауыҡтың ите һәм күкәйе менән туҡланабыҙ. Бал ҡортоноң балын ашайбыҙ. Беҙ һыйырҙың итен, һөтөн, тиреһен файҙаланабыҙ һәм хатта уның тиҙәге менән ерҙе ашлайбыҙ. Ҡайһы саҡта тик кешенең генә билдәле бурыстары юҡ һымаҡ күренергә мөмкин.

Ысынлап та, кеше донъяла айырым урын биләп

тора, сөнки тәбиғәттә булған бөтә нәмә уға хеҙмәт итергә тәғәйенләнгән. Кеше фәндә, сәнғәттә һәм техникала яңылыҡ тыуҙырырға һәләтле. Әммә уларҙың барыһы ла йәнһеҙ. Мәҫәлән, ҙур талантҡа эйә булған рәссам бик матур картина яҙа. Тик был картинаның һәм рәссамдың Барлыҡҡа килтереүсеһе бирәү – Аллаһ.

Бөтә булған нәмәләр кеше өсөн барлыҡҡа килтерелгән, кеше үҙе Аллаһ Тәғәләне танып белеү өсөн яратылған.

Үҙеңдең ҡулдарыңа ҡара

–Үҙеңдең ҡулдарыңа,
Бәләкәй йомшаҡ ҡулдарыңа
Ҡара…
– Һоҡланғыс һәм матур –
Кем тыуҙырған һинең ҡулдарыңды
Матур һәм нәфис?
– Эй, уҡытыусым минең,
мин бер тапҡыр ғына ҡараманым,
Әсәйем уларҙы барлыҡҡа килтермәгән,
Атайым да уларҙы яһамаған,
Бер кем дә ярата алмай
Кемдеңдер ҡулдарын.
Минең ҡулдарымды Аллаһ Тәғәлә яратҡан.

Аллаһ кешене нимә өсөн яратҡан?

Уны белһендәр, Унын биргән ниғмәттәре өсөн уны маҡтаһындар өсөн һәм Унын Йомартлығы өсөн рәхмәт әйтеп ғибәҙәт ҡылһындар өсөн.

“Мин бит ендәрҙе һәм кешеләрҙе Миңә ғибәҙәт

ҡылһындар өсөн генә яраттым”

Ҡөрьән “Әҙ-Ҙәрийәт, 56”

Кеше ерҙә һынау үтә. Аллаһ кешене сикһеҙ ниғмәттәр менән бүләкләгән. Ә бына беҙҙең көндәрҙә мосолман Аллаһ нисек ҡушһа, шулай йәшәйме? Үтәйме ул бөтә бурыстарын да?

Хикәйәт:

Муса бәйғәмбәр ғәләйһи-ссәләмдең һорауы: “Эй, Раббым, кешеләрҙе нимәгә барлыҡҡа килтерәһең, һуңынан уларҙы үлтергәс? “

Бер ваҡыт Муса бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) үлем тураһында уйланып, мөрәжәғәт иткән:

“Эй, Раббым! Һин кешеләрҙе үлтерәһең, ул сағында нишләп һин уларҙы барлыҡҡа килтерәһең?”

Аллаһ Тәғәлә яуап итеп Мусаға (ғәләйһи-ссәләмгә) бойҙай сәсергә ҡушҡан. Муса бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) бойҙайҙы сәскән, ҡарап үҫтергән, һыу һипкән. Ваҡыты еткәс, уңыш өлгөргән.

Муса бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) бойҙайҙы сапҡан һәм уны һуға башлаған.

Аллаһ Тәғәлә уға өндәшкән:

– Эй, Муса! Нимә менән шөғөлләнәһең?

– Эй, Раббым! Мин бойҙайҙы саптым һәм хәҙер орлоғон һаламдан айырам, – тип яуап биргән Муса.

– Бына ошо һинең һорауыңа яуап, Муса. Үлем ураҡҡа тиң. Уңышты йыйғанда нисек орлоҡ һаламдан айырылһа, үлем дә яҡшы кешеләрҙе гонаһлыларынан айыра, – Аллаһ

Тәғәләнең һүҙҙәре ошо булған.

Аллаһ Тәғәлә "Әл-Мүлк" сүрәһенең икенсе аятында әйтә:

"Аллаһ үлем менән тормошто барлыҡҡа килтерҙе, һеҙҙең кемегеҙ үҙенең эштәре менән яҡшыраҡ икәнен һынау өсөн".

Беренсе кеше нимәнән барлыҡҡа килтерелгән?

Аллаһ Тәғәлә беренсе кешене, Әҙәм бәйғәмбәрҙе (ғәләйһи-ссәләмде) балсыҡтан яһаған. Һуңынан уға йән кереткән. Уны нәмә бар шуларҙың бөтәһенең дә исемдәренә өйрәткән. Фәрештәләргә Әҙәмгә (ғәләйһи-ссәләмгә) сәждә ҡылырға ҡушҡан. Шайтан үҙенең тәкәбберлеге арҡаһында Аллаһ Тәғәләнең ҡушыуын эшләүҙән баш тартҡан һәм шунлыҡтан Аллаһ Тәғәлә тарафынан Ожмахтан ҡыуылған. Шайтан бәйғәмбәр Әҙәм (ғәләйһи-ссәләм) менән уның изге ҡатыны Һауа (ғәләйһә-ссәләм) араһына тыйылған ағастың емешен ашап ҡарауға үәсүәсә һалған. Улар ҡушҡанды тыңламағандары өсөн Ожмахтан ергә һөрөлгәндәр. Аллаһ Тәғәлә бөтә кешеләрҙе лә бер атай һәм әсәйҙән барлыҡҡа килтергән.

Аллаһтың ниғмәттәре ниндәй?

Аллаһтың ниғмәттәре сикһеҙ. Аллаһ Тәғәлә беҙҙең өсөн бөтә был донъяны, күкте, тауҙарҙы, яландарҙы, йылғаларҙы, үҫемлек һәм хайуандарҙы барлыҡҡа килтергән. Беҙгә аҙыҡ һәм һауаны биргән.

"Һәм Ул (Аллаһ) һеҙгә күктәрҙә һәм Ерҙә булған нәмәләрҙе буйһондорҙо"

Ҡөрьән "Әл-Джәҫиә, 13"

Ул беҙҙе кешеләр итеп яратҡан. Кеше – Аллаһ

мәхлүктәренең иң яҡшыһы. Һәм ул кешегә бөтә кәрәкле нәмәләрҙе лә биргән. Фекер йөрөтөү өсөн аҡыл биргән; күреү өсөн күҙ биргән; ишетеү өсөн ишетеү һәләте биргән; аралашыу өсөн телмәр биргән. Кешегә тағы ла бик күп нәмәләр биргән.

Үҙеңдең тәнеңә ҡара, ул ҡатмарлы механизм кеүек эшләй. Әгәр ҙә беҙҙең күреү һәләтебеҙ булмаһа, ул сағында нимә булыр ине.

Аллаһ биргән нәмәләрҙең иң ҡиммәтлеһе – ул тура юлды күрһәтеүсе Изге Ҡөрьән һәм Ислам дине. Аллаһ беҙгә иман биргән.

Аллаһ иманлы кешене нимә менән бүләкләй?

Кеше файҙаһына күп төрлө ниғмәттәр биргән Аллаһ Тәғәләгә ышаныу кешегә сикһеҙ бәхет килтерә. Аллаһҡа хеҙмәт итеү кешегә күңел рәхәтлеге һәм йән тыныслығы бирә.

Кеше ҡайһы саҡта өмөтһөҙлөккә бирелә. Ҡайһы ваҡытта ауырлыҡтар, ҡайғы-хәсрәт, юғалтыуҙар баҫа. Тик Аллаһҡа ышаныусы ғына бер ваҡытта ла ышанысын юғалтмай. Ауыр саҡтарҙа ул Аллаһтан яҡлау эҙләй һәм Унан ярҙам һорай, сөнки Аллаһ өлөшһөҙҙәрҙең, яфа сигеүселәрҙең һәм бәхетһеҙлек кисереүселәрҙең яҡын Дуҫы.

“Кем Аллаһтан ҡурҡа, Ул уға юлын күрһәтә, һәм Ул уйламағанда ерҙән ризыҡ бирә. Кем Аллаһҡа ышана, уның өсөн Ул еткән”

Ҡөрьән “Ат-Талаҡ, 2–3”

Дингә ышаныусы кеше ауырлыҡтарҙы һәм нужа кисереүҙе еңеп сыға, сөнки ул көс һәм тәүәккәллек ала.

Ҡайһы бер саҡта кешеләр гонаһ эшләй. Кеше быны аңлап һәм тәүбәгә килеп: “Эй, Раббым! Мин быларҙы эшләмәгән булһам икән!” – тиһә, Аллаһ Тәғәлә тәүбәһен ҡабул ҡыла һәм уның гонаһын ғәфү итә. Һәм Аллаһ Тәғәләнең Мәрхәмәтенә бөтә йөрәге менән инанған кеше, бер ваҡытта ла өмөтөн өҙмәй. Һәм был ышаныс уға именлек һәм уңыштар яуларға ярҙам итәсәк.

Аллаһҡа уның биргән ниғмәттәре өсөн рәхмәт әйтергә кәрәклеге тураһында хикәйәт:

Шаҙра, пеләш һәм һуҡыр

Мөхәммәд бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләренең береһе Әбү Һөрайра (радыйаллаһу ғәнһү) Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хикәйәтен һөйләгән.

Өс йәһүд йәшәгән: шаҙра, пеләш һәм һуҡыр. Аллаһ уларҙы һынап ҡарарға булған һәм уларға фәрештәне ебәргән. Фәрештә шаҙраға килгән дә унан һораған:

– Һинең иң ныҡ теләгән нәмәң нимә?

– Таҙа тире, матур тән. Кешеләр ауырым арҡаһында минән ситләшәләр.

Фәрештә шаҙраның тиреһен һыйпаған, һәм таптар юҡҡа сыҡҡан. Ауырыуҙың тәне матурланып, ә тиреһе таҙарып киткән. Унан һуң фәрештә тағы һораған:

– Ҡайһы хайуан һиңә бик ныҡ оҡшай?

– Дөйә, – тип яуап бирә сәләмәтләнгән кеше.

Һәм уға унынсы айҙағы быуаҙ дөйә бүләк ителгән.

Хушлашҡанда: “Аллаһтың был ниғмәттәре һиңә фатихалы булһын”, – тип фәрештә юҡ булған.

Һуңынан фәрештә пеләш башлы кеше эргәһенә килгән һәм унан да һораған:

– Иң кәрәкле нәмәң нимә?

– Бынау пеләш юҡҡа сыҡһын, һәм кешеләр минән көлмәһендәр ине.

Фәрештә уның башынан һыйпаған һәм унда ҡуйы сәстәр барлыҡҡа килгән. Яңынан фәрештә йәнә һораған:

– Ҡайһы хайуан һиңә нығыраҡ кәрәк?

– Һыйыр, – тип яуап биргән пеләш.

Һәм Аллаһ уға быуаҙ һыйыр биргән. Хушлашҡанда уға: “Был һыйыр һиңә ҡотло булһын”, – тип әйткән дә фәрештә һуҡырға барып, унан да һораған:

– Һиңә иң ныҡ кәрәк нәмә нимә?

– Аллаһ миңә күреү һәләтен кире ҡайтарһын ине, мин кешеләрҙе күрә алһам икән.

Фәрештә уның күҙҙәрен һыпырған һәм күреү һәләте кире ҡайтҡан. Һәм унан фәрештә һораған:

– Бөтәһенән дә нығыраҡ һиңә ниндәй хайуан кәрәк ине?

– Һарыҡ, – тип яуаплаған һуҡыр.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәндән һуң шаҙра менән пеләшкә бүләк ителгән дөйә менән һыйыр быҙаулаған. Һуҡырҙың һарығы бәрәсләгән. Һуңынан шаҙраның бер көтөү дөйәһе, пеләштең бер көтөү һыйыры, һуҡырҙың бер көтөү һарығы булған. Һәм фәрештә уларҙың һәр

береһендә лә булып, уларҙы һынарға уйлаған. Башта ул шаҙраға килгән һәм әйткән:

– Мин фәҡир һәм бәхетһеҙ сит ил кешеһе. Юлда мин бөтә аҡсамды тотоноп бөттөм һәм тыуған илемә ҡайта алмайым. Аллаһтан һорайым, Ул миңә өйгә ҡайтып етергә ярҙам итһен ине. Аллаһ Тәғәлә хаҡы өсөн, ул һине матур төҫ һәм буй-һын менән, шундай байлыҡ менән бүләкләгән, шуның хаҡына һинән бер дөйә һорайым.

Элекке шаҙра ҡысҡырып ебәргән:

– Бында байлыҡ теләүсе фәҡирҙәр күп булыр ул. Һәр бер һораусыға мин берәр дөйә бирә алмайым да инде.

– Мин һине иҫемә төшөрҙөм шикелле. Кешеләр ҡасҡан һин түгел инеңме? Ярлы булған һин түгел инеңме һәм һиңә Аллаһ байлыҡ бирҙе? – тип фәрештә уның иҫенә төшөргән.

– Юҡ, был байлыҡтар миңә ата-олатайҙарымдан нәҫелгә ҡалды, – тип алдашҡан шаҙра.

– Әгәр ҙә һин алдаһаң, Аллаһ Тәғәлә һине элекке хәлеңә ҡайтарһын! – тигән фәрештә.

Ошонан һуң фәрештә элекке пеләш алдына килеп баҫҡан һәм уны ла шаҙра кеүек һынай башлаған. Теге лә фәрештәнең үтенесенән баш тартҡан. Фәрештә хушлашҡанда уға былай тигән:

– Әгәр ҙә һин алдаһаң, Аллаһ һине элекке хәлеңә кире ҡайтарһын!

Иң һуңынан фәрештә ҡасандыр уның күҙҙәренә ҡағылып күҙле иткән һуҡырға килгән һәм әйткән:

– Мин фәҡир һәм тыуған иленән алыҫта ил гиҙеп

йөрөүсе бер бәхетһеҙ меҫкен кеше. Мин ил гиҙеп йөрөгәнемдә аҡсам бөттө, өйөмә ҡайта алмайым. Мине тик Аллаһ ҡына ҡайтарыр, һәм һин миңә ярҙам итерһең тип ышанам. Һинең күҙеңде ҡайтарған Аллаһ Тәғәлә хаҡына миңә бер һарығыңды бирсе, миңә тыуған илемә ҡайтырға юлға түләү өсөн.

Элекке һуҡыр яуап ҡайтарған:

– Ысынлап та, мин һуҡыр инем. Аллаһ минең күҙҙәремә нур бирҙе. Мин ярлы инем. Аллаһ мине бай яһаны. Һиңә һарыҡ кәрәкме – ал күпме кәрәк, шул тиклем. Аллаһ Тәғәлә риза булһын өсөн мин һиңә бер нәмәлә лә баш тарта алмайым.

– Һинең байлығың үҙеңә булһын. Аллаһ һеҙҙең өсөгөҙҙө лә һынап ҡарарға иткәйне. Һәм Ул һинең менән риза. Ә теге икәү – шаҙра һәм пеләш үҙҙәренең язаһын үҙҙәре тапты, – тигән дә фәрештә юҡ булған.

Был хикәйәттең фәһеме:

• **Аллаһҡа рәхмәтле булыу уның ниғмәттәрен арттыра.** Рәхмәтле була белмәү ярлылыҡ сәбәптәренең береһе булып тора. Рәхмәтле булыу – ул Аллаһ Тәғәләнән беҙҙең бөтәһен дә алыуыбыҙҙы аңлау һәм Уға шулар өсөн рәхмәт белдереү.

• **Ике төрлө эш кешене һәләк итергә мөмкин:** сикһеҙ байлыҡҡа ынтылыу һәм артыҡ һүҙсәнлек.

• **Кешенең яҙмышы уның теле менән туранан-тура бәйле:** кеше үҙенең теле арҡаһында Ожмах менән бүләкләнергә һәм Тамуҡ менән дә язаланырға мөмкин.

Ғибәҙәт ҡылыу нимәне аңлата?

Аллаһ Тәғәләнең ҡушҡандарын үтәүҙе һәм Ул тыйғандарҙан тыйылыуҙы.

Ғибәҙәт ҡылыу беҙгә нимә вәғәҙә итә?

Был донъяла Аллаһ Тәғәләнең ризалығына лайыҡлы булған тыныс, яҡты, бәхетле һәм сәләмәт тормошто һәм мәңгелек донъяла Ожмахты вәғәҙә итә.

Нимә өсөн беҙ ғибәҙәт ҡылабыҙ?

Беҙҙе барлыҡҡа килтергән һәм юҡтан бөтә нәмәне бар иткән Аллаһ Тәғәлә бер нәмәгә лә мохтаж түгел. Ул беҙҙең Уға ғибәҙәт ҡылыуыбыҙға ла мохтажлыҡ кисермәй. Беҙ Уға уны яратып һәм хөрмәт итеп ғибәҙәт ҡылабыҙ. Аллаһҡа үҙебеҙҙең инаныуыбыҙҙы ғибәҙәт менән раҫлайбыҙ. Кеше күп нәмәгә мохтаж: яратырға һәм яратылырға, яҡланырға һ.б. Ул Аллаһ Тәғәлә тарафынан яратылырға һәм яҡланырға теләй. Шуның өсөн дә ул Аллаһҡа ғибәҙәт ҡыла.

Шулай уҡ беҙ Аллаһ Тәғәләгә Уның беҙгә биргән сикһеҙ ниғмәттәре һәм Уның беҙҙе барлыҡҡа килтергәне өсөн рәхмәт әйтеп ғибәҙәт ҡылабыҙ.

Беҙҙең ғибәҙәт ҡылыуыбыҙҙың маҡсаты нимәлә?

Аллаһ Тәғәләнең яратыуына һәм ризалығына өлгәшеү өсөн. Ғибәҙәт ҡылғанда беҙҙең донъяуи тормошобоҙ тулыраҡ була, беҙ үҫешәбеҙ, беҙҙең әхлағыбыҙ камиллаша.

Башҡа яратылғандар Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылалармы?

Эйе, һәр бер мәхлүк үҙенең телендә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡыла.

Аллаһ Тәғәлә беҙҙән нимә теләй?

Беҙҙең Уға инаныуыбыҙҙы һәм Уны яратыуыбыҙҙы һәм Уға ғибәҙәт ҡылыуыбыҙҙы һәм Мөхәммәд бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нимә ҡушһа, шуны үтәргә, йәғни иманлы кешеләр һәм лайыҡлы мосолмандар булыуыбыҙҙы теләй.

Әгәр ҙә беҙ әҙләп Изге Ҡөрьәнде һәм уның тәфсирен уҡыһаҡ, ул сағында Аллаһтың беҙҙән нимә теләгәнен белә алабыҙ.

Мин әсәйҙәргә мөрәжәғәт итәм

Балаңа әйткән беренсе һүҙең
Булһын "Аллаһ".
Беренсе таныштырған кешең
Булһын Бәйғәмбәр.
Балаңа уҡыған иң беренсе
Китабың булһын "Ҡөрьән".
Балаңа өйрәткән беренсе зекер
Булһын "Әл-хәмдү-лилләһ".
Балаңа һин биргән
Тәүге йотом һөт булһын "Хәләл".

ФӘРЕШТӘЛӘРГӘ ЫШАНЫУ

Кемдәр улар фәрештәләр?

Фәрештәләр – улар енесһеҙ, ашау һәм эсеүҙә мохтажлыҡ кисермәүсе, Аллаһтың бойороҡтарын һүҙһеҙ үтәүсе һәм гонаһ эшләмәүсе заттар. Улар Раббының нурынан яратылғандар.

Беҙ фәрештәләрҙе күрә алабыҙмы?

Беҙ фәрештәләрҙе күрә алмайбыҙ. Аллаһ беҙҙең күҙҙәребеҙҙе шулай итеп яратҡан, фәрештәләр беҙгә күренмәйҙәр.

Был донъяла күренмәгән нәмәләр тағы ла бармы?

Әлбиттә, бар. Беҙ ниндәйҙер күренеш тураһында тоя алабыҙ йәки уның хаҡында ғилемгә эйәбеҙ. Беҙ өйҙәребеҙҙе яҡтыртыусы электрҙы күрмәйбеҙ. Беҙ елде лә күрмәйбеҙ, әммә уның көсөн тоябыҙ, уның нисек ағастарҙы һелкетеүен күрәбеҙ. Шулай уҡ бөтә Йыһанды һәм беҙҙе барлыҡҡа килтергән Аллаһтың барлығын беләбеҙ, ләкин беҙ Уны күрмәйбеҙ. Беҙ шатланабыҙ, бошонабыҙ, ә ысынында шатлыҡ, ҡайғыны күрә алмайбыҙ.

Фәрештәләрҙең ҡиәфәте нисек, уларҙың ҡанаттары бармы?

Фәрештәләр юғары дәрәжәлә көслө һәм матур заттар.

Фәрештәләрҙең ҡанаттары булыуы тураһында беҙ Изге Ҡөрьәндән беләбеҙ. Әммә был ҡанаттар ниндәй беҙ белмәйбеҙ. Раббы Нурынан яһалған һәм яҡтылыҡ кеүек етеҙ, улар ғәҙәттәге ҡош ҡанаттарына мохтаж түгел. Фәрештәләрҙе ғәҙәттәге ҡиәфәттә тик бәйғәмбәрҙәр генә күргән.

Фәрештәләрҙең бурыстары ниндәй?

Фәрештәләр Аллаһтың Ҡөҙрәтен сағылдыралар. Улар Аллаһ Тәғәлә урынлаштырған донъяуи тәртипте башҡарыусылар һәм күҙәтеүселәр. Һәр бер фәрештәнең үҙенең бурысы бар. Уларҙың исемдәре башҡарған вазифаларына ҡарап бирелгән.

“Фәрештә кеүек матур” тип ҡыҙҙы фәрештә менән сағыштыралар. Фәрештәләр беҙгә оҡшағанмы ни?

Фәрештәләр кешеләргә оҡшамаған. Улар енесһеҙ, улар өйләнмәйҙәр, кейәүгә сыҡмайҙар. Улар ниндәй ҡиәфәткә инергә теләһәләр, шуға күсә алалар. Улар ашамайҙар ҙа, эсмәйҙәр ҙә. Улар Ҡиәмәт көнөнә тиклем йәшәйәсәктәр. Улар Аллаһ Тәғәләнең ҡушҡандарын аныҡ һәм һүҙһеҙ үтәйҙәр. Раббының Нурынан барлыҡҡа килтерелгәнгә улар беҙгә күренмәй.

Фәрештәләр үләләрме?

Аллаһ Ҡиәмәт Көнө башланыу менән фәрештәләрҙең йәнен ала. Һуңынан уларҙы Мәхшәр көнөндә терелтә.

Фәрештәләр киләсәк тураһында беләләрме?

Фәрештәләр Аллаһ Тәғәлә рөхсәт иткән нәмәләрҙе генә беләләр.

Фәрештәләргә нимә оҡшай?

Фәрештәләр гонаһһыҙ заттар. Уларға бөтә матур

һәм рөхсәт ителгән нәмәләр, мәсәлән, хуш еҫтәр, мәрхәмәтлелек, Аллаһты йыш иҫкә алыу, Изге Ҡөрьәнде уҡыу, кешене яратыу, ата-әсәне хөрмәт итеү, сабыйҙар тураһында хәстәрлек күреү, йәштәргә хөрмәт менән ҡарау һ.б. оҡшай.

Ә нимә быларҙың бөтәһенә лә ҡапма-ҡаршы – уларҙы шатландырмай. Был тик шайтанды ҡыуандыра.

Ҡайһылары иң ҙур фәрештәләр?

Бына “Иң ҙур” тип йөрөтөлгән фәрештәләрҙең исемдәре:

1. Ябраил (ғәләйһи-ссәләм) вәхи һәм Изге Яҙыуҙарҙы бәйғәмбәрҙәргә тапшыра.

2. Микаил (ғәләйһи-ссәләм) ямғыр, ел һ.б. тәбиғәт күренештәре менән идара итә.

3. Исрафил (ғәләйһи-ссәләм) Сурға (борғо кеүек нәмә) өрөп Ахырызаман еткәнен белгертә. Бөтә тереклек был тауышты ишетеп үлә. Һәм Мәхшәр көнө ошо фәрештә ҡысҡыртҡан Сур тауышын ишеткәс башлана.

4. Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) кешеләрҙең йәндәрен алып, үлем килтерә.

Ошо дүртәү – Аллаһҡа иң яҡын фәрештәләр. Аллаһ Тәғәлә үҙенең бойороҡтарын улар аша башҡа фәрештәләргә еткерә.

5. Мөнкир һәм Нәкир (ғәләйһүмә-ссәләм) – ҡәберҙә һорау алыусылар.

6. Кираман – Кәтибин (ғәләйһүмә-ссәләм) һәр кемдең уң яғынан һәм һул яғынан тороусы фәрештәләр.

7. Һаҡлаусы фәрештәләр – беҙҙе һаҡлаусы фәрештәләр.

Ябраил фәрештәнең бурыстары ниндәй?

Ябраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештә Аллаһ Тәғәләгә иң яҡын фәрештәләрҙең береһе. Уның бурысы – Аллаһ Тәғәләнең әмерен (һүҙен) бәйғәмбәрҙәргә еткереү. Ҡайһы бер бәйғәмбәрҙәргә ул Изге Яҙыуҙы еткергән, беҙҙең Мөхәммәд Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Изге Ҡөрьәнде тапшырған.

Ябраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештә беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән ниндәй ҡиәфәттә осрашҡан?

Аллаһ Тәғәләнең был яратҡан фәрештәһе ҡайһы ваҡытта Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) кеше ҡиәфәтендә лә килгән, уның янына ултырып алған һәм һөйләшкән.

Кешеләр был һөйләшеүҙе күргәндәрме?

Ҡайһы саҡта күргәндәр. Әммә улар быны Ябраил фәрештә икәнен белмәгәндәр.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ябраилды (ғәләйһи-ссәләм) фәрештә ҡиәфәтендә күргәне булғанмы?

– Эйе, ике тапҡыр.

Бер ваҡыт беҙҙең хөрмәтле Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Хира тауындағы мәмерйәлә булған сағында, уйланып ултырған ваҡытта уның алдына Ябраил фәрештә (ғәләйһи-ссәләм) килеп баҫҡан.

Ябраил фәрештә (ғәләйһи-ссәләм) Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә) яҡынлашҡан һәм әйткән: “Уҡы!”

– Мин бит уҡый белмәйем, – тип яуап биргән Бәйғәмбәр

(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм).

Ябраил фәрештә (ғәләйһи-ссәләм) Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә) төшөрөлгән аяттарҙы өйрәтеү йөҙөнән, уны нык итеп ҡосаҡлаған һәм яңынан әмер биргән:

– Уҡы!

– Мин уҡый белмәйем, – тип яуап биргән яңынан Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм).

Ябраил фәрештә (ғәләйһи-ссәләм) яңынан Бәйғәмбәрҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде) тағы ла нығыраҡ итеп ҡосаҡлаған һәм йәнә ҡабатлаған:

– Уҡы!

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) саҡ тын алып, уҡый белмәүе тураһында ҡабатларға кәрәкмәгәнен аңлай. Ул:

– Нимәне уҡырға? – тип һораған.

Һәм шул саҡта Ябраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештә бик матур, ғәжәп, яғымлы тауыш менән Изге Ҡөрьәндең беренсе индерелгән аяттарын әйткән:

– “Әй, Мөхәммәд!

Уҡы! Кешене ҡан ҡуйырығынан яратҡан Раббың хаҡына.

Уҡы! Һәм һинең Раббың йомарттарҙың йомарты,

Ул ҡәләм менән яҙырға өйрәтте,

Кешене ул белмәгән нәмәгә өйрәтте”.

Ишетелгән аяттар, әйтерһең, беҙҙең Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең) йөрәгенә яҙылғандар.

Һуңынан ул өйөнә ҡайтырға булған. Ҡуҙғалып мәмерйәнән сыҡҡан һәм тауҙан төшкән.

Бындай хәл уның менән беренсе тапҡыр булған һәм шуның өсөн дә ул бик тулҡынланған һәм тәьҫирләнгән.

Ябраил (ғәләйһи-ссәләм) уның хәлен белеп

торғанлыҡтан һәм Бәйғәмбәрҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде) тынысландырырға теләп, уға яңынан үҙенең яғымлы тауышы менән һөйләй башлаған.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) башын күтәреп ҡараһа, офоҡта Ябраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештәне күрә. Ул кеше ҡиәфәтендә була һәм офоҡто тотош ҡаплаған була.

– Эй, Мөхәммәд! Һин – Аллаһтың Рәсүле. Ә мин – Ябраил, – тигән фәрештә.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уң яҡҡа, һуңынан һул яҡҡа ҡараған. Ҡайҙа ғына ҡараһа ла бөтә ерҙә Ябраилды (ғәләйһи-ссәләмде) күргән. Ә Ябраил (ғәләйһи-ссәләм) яңынан ҡабатлаған:

– Эй, Мөхәммәд! Һин – Аллаһтың Рәсүле. Ә мин – Ябраил.

Фәрештәнең яғымлы һәм ышаныслы тауышы беҙҙең Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йөрәген тынысландырған һәм шатландырған.

Микаил (ғәләйһи-ссәләмдең) бурыстары ниндәй?

Ул тәбиғәт күренештәре һәм бөтә барлыҡҡа килтерелгәндәрҙең тукланыуы өсөн яуап бирә. Бөтә күренештәр: ямғыр, ҡар, ел һ.б. бер үк сәбәпкә эйә. Был сәбәпте Аллаһ Тәғәлә барлыҡҡа килтергән. Беҙ тәбиғәт күренештәре тип йөрөткән күренештәрҙе Аллаһ Тәғәлә барлыҡҡа килтергән, ә уларҙы Микаил (ғәләйһи-ссәләм) тормошҡа ашыра.

Ғазраилдың (ғәләйһи-ссәләмдең) бурыстары ниндәй?

Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештә бөтә яратылған тере йәндәрҙең йәндәрен ала.

Ғазраилдан (ғәләйһи-ссәләмдән) ҡурҡырға кәрәкме?

Йәндәрҙе алған өсөн Ғазраилдан (ғәләйһи-ссәләмдән) ҡурҡырға ярамай. Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) үҙенең теләге буйынса йәндәрҙе алмай, ә ул тик Аллаһ Тәғәлә нимә ҡуша, шуны үтәй.

Күптәр йәндәрҙе алыусы Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештәнән ҡурҡалар. Унан шул тиклем ҡурҡырға кәрәкме икән? Юҡ. Беҙ үҙебеҙҙең иң ҡиммәтле әйберебеҙҙе ышаныслы урында һаҡлайбыҙ. Шулай уҡ Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) да йәндәр һаҡсыһы булараҡ беҙҙең йәндәрҙе юғалыуҙан һаҡлай. Шуның өсөн дә уға асыуланырға ярамай, ә уны яратырға кәрәк.

Бер үк ваҡытта бик күп кешеләр һәм тере йәндәр үлә. Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештә бер үҙе уларҙың йәнен алып өлгөрә аламы?

Һәр бер билдәле фәрештәнең ҡул аҫтында бик күп башҡа фәрештәләр бар. Шулай уҡ йән алыусы Ғазраилға (ғәләйһи-ссәләм) буйһонған йән алыусы бик күп фәрештәләр бар.

Берәйһе Ғазраилдан (ғәләйһи-ссәләмдән) үҙенең үлемен кисектереп тороуҙы үтенә аламы?

Юҡ, быға Ғазраилдың (ғәләйһи-ссәләмдең) бер ниндәй ҙә хоҡуғы юҡ. Был ваҡиғаны бер кем дә тиҙләтә лә, йә һуңыраҡ ваҡытҡа күсерә лә алмай. Һәр кемдең үлем ваҡыты Аллаһ Тәғәлә тарафынан билдәләнгән. Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) үҙенең бурысын Аллаһ ҡушҡан теүәллек менән башҡара.

Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештә нисек бер юлы меңәрләгән кешенең йәнен ала ала?

Әйҙәгеҙ, беҙҙең йәндәрҙе янып тороусы электр лампочкалары хәлендә күҙ алдына килтерәйек, ә үлем – уны һүндереү кеүек, ти. Беҙҙең өйҙәрҙәге бөтә сымдар бер электр станцияһында йыйылған. Ә хәҙер күҙ алдына килтерегеҙ, әгәр ҙә унда эшләүсе инженер үҙенең эшсеһенә ҡаланың бер районында электрҙы һүндерергә ҡушһа нимә килеп сығыр ине? Эшсе был команданы үтәгәс, шунда уҡ күҙ асып йомғансы меңәрләгән өйҙәрҙә меңәрләгән лампочкалар һүнәсәк.

Шулай уҡ беҙҙең йәндәребеҙ ҙә күҙгә күренмәгән сымдар менән Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештә ҡарамағындағы төймә менән килеп тоташҡан. Һәм уның бер бармағының хәрәкәте менән генә лә шунда уҡ меңәрләгән йәндәр үҙҙәренең тәндәрен ҡалдырып китә.

Шуға өҫтәп, беҙҙең белеүебеҙсә, Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) ҡарамағында миллионлаған башҡа фәрештәләр бар. Һәм Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештәнең әмере буйынса уларға бер үк ваҡытта йөҙәр мең тере заттың йәнен алыу ҡыйын түгел.

Исрафилдың (ғәләйһи-ссәләмдең) бурыстары ниндәй?

Исрафилдың (ғәләйһи-ссәләмдең) төп бурысы – бөтәһенә лә Ҡиәмәт көнөнөң башланыуы тураһында хәбәр итеү.

Нимә ул Ҡиәмәт?

Ҡиәмәт был донъяның тамамланыуы – Ахырызаманды аңлата.

Ахырызаман нимә була?

Был донъяның һуңғы көнө еткәс, Аллаһ Тәғәлә был

турала Исрафил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештәгә әйтә. Шул саҡта Исрафил (ғәләйһи-ссәләм) Сурға өрә.

Нимә ул Сур?

Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аңлатыуынса Сур – мөгөҙгә оҡшаш борғо. Исрафил (ғәләйһи-ссәләм) был борғоға өргәс, бөтә Йыһанды көслө һәм ҡурҡыныс тауыш ҡаплаясаҡ. Бөтә тере заттар был тауышты ишетеп үләсәктәр. Ер һәм күк йөҙө бергә буталасаҡ, ҡояш һәм йондоҙҙар селпәрәмә килеп, осоп йөрөрҙәр.

Ахырызамандың ваҡыты билдәлеме?

Юҡ, билдәле түгел. Уны хатта Исрафил да (ғәләйһи-ссәләм дә) белмәй. Уны тик Аллаһ Тәғәлә генә belә.

Ахырызаманды ғибәҙәт ҡылыусылар күрерме?

Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәре буйынса Аллаһ Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыусылар Ахырызаманды күрмәйәсәктәр. Аллаһ Тәғәлә уларҙың йәнен был көндән алдараҡ ала. Ахырызаман яҡынлашҡан һайын ер йөҙөндә иманһыҙҙар һәм бик насар кешеләр генә ҡаласаҡ.

Ахырызамандан һуң нимә буласаҡ?

Исрафил (ғәләйһи-ссәләм) Сурға беренсе тапҡыр өргәс, Аллаһтан башҡа бер ниндәй ҙә тереклек ҡалмаясаҡ. Был хәл Аллаһ Тәғәлә Исрафилға икенсе мәртәбә Сурға өрөргә ҡушҡанға тиклем дауам итәсәк. Борғоноң йомшаҡ тауышын ишетеп, йоҡонан уянған кеүек итеп кешеләр яңынан терелерҙәр. Һәм фани донъяла ҡылған эштәре өсөн яуап бирергә Аллаһ Тәғәлә ҡаршыһына баҫырҙар.

Яңынан терелгәндән һуң үлем буламы?

Юҡ, яңынан терелгәндән һуң, кешеләр башҡаса үлмәйҙәр.

Мөнкир һәм Нәкир тигән фәрештәләрҙең бурыстары ниндәй?

Мөнкир һәм Нәкир (ғәләйһүмә-ссәләм) ҡәберҙә һорау алыусы фәрештәләр. Һәр үлгән кешегә һорау бирелә: “Һинең Раббың кем? Һинең Бәйғәмбәрең кем? Китабың ҡайһы? Намаҙға ҡайһы яҡҡа йүнәлдең? һ.б.” Фани донъяла мосолман булып йәшәгәндәрҙең һорауҙары еңел буласаҡ.

Кирамән-Кәтибин (ғәләйһүмә-ссәләм) фәрештәләрҙең бурыстары ниндәй?

Кирамән-Кәтибин “хөрмәтле яҙыусылар” тигәнде аңлата. Кирамән-Кәтибин (ғәләйһүмә-ссәләм) фәрештәләрҙең бурыстары булып һәр бер кешенең яҡшы һәм яман ғәмәлдәрен яҙып барыу тора. Фәрештәләр һәр кемдең уң яғынан һәм һул яғынан тора. Уң яҡтан торған фәрештә яҡшы эштәрҙе, ә һулдан торғаны гонаһтарҙы яҙа. Ҡиәмәт көнөндә был яҙыуҙар “ғәмәл дәфтәре” рәүешендә бирелә. Фани донъяла яҡшы ғәмәлдәр башҡарған кешегә уның дәфтәрен уң яҡтан, кемдең гонаһы еңеп тора, уға – һул яҡтан. Аллаһ Тәғәлә был дәфтәргә яҙылған ғәмәлдәргә ҡарап кемделер бүләкләйәсәк, кемделер язалаясаҡ.

Кирамән-Кәтибин (ғәләйһүмә-ссәләм) фәрештәләр кешене ҡалдырып китәләрме?

Был фәрештәләр кешене бер ваҡытта ла үҙен генә ҡалдырып китмәйҙәр. Улар һәр ваҡытта ла уның һүҙҙәрен һәм эштәрен яҙып баралар. Яҡшы ғәмәлдәрҙе яҙып барыусы һәйбәт эш эшләнгәс тә шунда уҡ яҙып ҡуя, ә икенсеһе әгәр

ҙә беҙ хаталар һәм гонаһтар эшләһәк, беҙҙең тәүбәгә килеү-килмәгәнде бер ни тиклем көтә. Әгәр ҙә тәүбәгә килмәһәк – яҙып ҡуя. Әгәр ҙә беҙ тыйылған нәмәләрҙе эшләргә теләһәк, беҙ үҙебеҙҙең һөйләгән һүҙҙәребеҙ һәм эшләгән эштәребеҙ яҙылып барылғанын иҫтә тоторға тейешбеҙ.

Фәрештәләр кешеләргә ярҙам итәләрме?

Эйе, фәрештәләр кешегә ярҙам итәләр. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) түбәндәгеләрҙе һөйләгән: “Кем яҡшы ғәмәлгә саҡырыусы эске тауышты ишетһә, белеп торһон: был – фәрештәнең тауышы. Һәм быны өсөн Аллаһ Тәғәләгә рәхмәт әйтһен. Яуызлыҡҡа саҡырған тауыш ишетһә, белһен, был – шайтан тауышы. Унан һаҡ булығыҙ, унан ҡасып Аллаһ Тәғәләгә һыйынығыҙ”.

Фәрештәләр кешеләр өсөн мәрхәмәтлек һәм изгелек һорайҙармы?

Эйе, һорайҙар. Изге Ҡөрьәндә яҙылғанса, улар Аллаһ Тәғәләгә ышанған кешеләр өсөн:

“Беҙҙең Раббыбыҙ, Һин Үҙеңдең мәрхәмәтең һәм идара итеүең менән бөтәһен дә белеп тороусы. Кемдәр тәүбәгә килгән һәм Һинең тура юлыңдан киткән, һин уларҙы тамуҡ утынан һаҡла.

Раббыбыҙ беҙҙең, уларҙы вәғәҙә ителгән ожмах баҡсаларына индер, һәм дә аталары, йәмәғәттәре һәм уларҙың нәҫелдәре тура юлда булғандарҙы һәм уларҙы тамуҡ язаһынан һаҡла. Һин бит Шөһрәтле, Аҡыллы!

Уларҙы яуызлыктан һаҡла, Һин кемде ул көндө һаҡлаһаң, шуны Һин ярлыҡаған булаһың. Ә был – бөйөк уңыш!”

Ҡөрьән “Әл-Мөьмин, 7-9”

Һаҡлаусы фәрештәләрҙең бурыстары нindәй?

Дини кешеләр менән һәр ваҡыт бергә мәрхәмәт фәрештәләре бар. Был фәрештәләр тура юлдағы кешеләргә һәр ваҡыт ярҙам итәләр. Миҫал өсөн, һуғыш ваҡытында мосолмандар Аллаһ Тәғәләнән ярҙам һорағандар, Аллаһ Тәғәлә уларға ярҙамға кеше ҡиәфәтендәге фәрештәләрҙе ебәргән.

Кеше фәрештә кимәленә күтәрелә аламы?

Эйе, күтәрелә ала.

Иманлы һәм ғибәҙәт ҡылыусы кеше фәрештәләр менән тиңләшергә мөмкин. Иманды инҡар итеүсе гонаһлылар хайуан кимәленән дә түбән төшөргә мөмкин.

Беҙҙең һөйөклө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Мiғраж кисәһендә ете ҡат күккә күтәрелеп, Аллаһ ҡаршыһында торған. Ә Ябраил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) уны һуңғы ҡатында көткән.

Хикәйәт:

Йөҙ кешене һәләк иткән кеше үлтереүсенең тәүбәһе:

Беҙҙең һөйөклө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йөҙ кешене һәләк иткән үлтереүсенең тәүбәһе тураһында һөйләгән:

“Һеҙгә тиклем йәшәгәндәр араһынан туҡһан туғыҙ кешене үлтергән берәү булған. Ваҡыт үтеү менән ул эшләнгән енәйәттәре тураһында тәүбәгә килә, төҙәлергә һәм иманға килергә уйлаған. Ул былай тип уйлаған: “Мине ҡотҡарыу юлы бармы икән?” Һәм уға шуны өйрәтеүсене эҙләй башлаған. Ундай кеше уны аңлаясаҡ һәм был юлды

табырға ярҙам итер, тип уйлаған ул. Уға христиандарҙың руханийына мөрәжәғәт итергә кәңәш иткәндәр. Кеше үлтереүсе уға килгән һәм һорау менән мөрәжәғәт иткән: “Изге рухани! Мин туҡһан туғыҙ кешене үлтерҙем. Хәҙер мин ҡылынған эшемә тәүбә итәм, Аллаһ мине ғәфү итерме икән, Ул минең тәүбәмде ҡабул кылырмы?”

– Һин бик ҙур гонаһ эшләгәнһең. Аллаһ һине ғәфү итмәç һәм һинең тәүбәңде ҡабул ҡылмаç, – тип яуап биргән уға рухани.

Кеше үлтереүсе ҡотолоуға бөтә өмөтөн өҙөп, ныҡ асыуланған һәм өмөтһөҙлөк менән руханиҙы үлтергән. Һәм уның ҙур гонаһтары йөҙгә тулған.

Был кеше донъяла иң аҡыллы кешене эҙләүен дауам иткән. Уға бер ғалимға мөрәжәғәт итергә ҡушҡандар. Һәм ул ғалимды табып, нисек итеп йөҙ кешене үлтергәнен, ҡайһылай тәүбәгә килеүен һәм уның тәүбәһе ҡабул буламы юкмы икәнен белергә теләүен яңынан һөйләп биргән.

Ғалим уны тыңлап бөткәс, былай тигән: “Әлбиттә, Аллаһ Һине ғәфү итер, әгәр ҙә һин үҙ гонаһтарыңа ысын тәүбә итһәң. Һәм Аллаһҡа киләсәктә башҡаса гонаһ эшләмәйәсәгең тураһында һүҙ бир”. Шунан дауам иткән: “Иманлы булыуҙың беренсе шарты булып иманлылар араһында йәшәгән тормош тора. Һин йәшәгән урын гонаһлы. Хәҙер үк икенсе илгә кит. Унда Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыусылар йәшәй, уларҙың эргәһендә йәшә, Аллаһҡа ғибәҙәт ҡыл һәм ваҡыты еткәнгә тиклем Тыуған илеңә кире ҡайтма”.

Гонаһлы кеше уның һүҙҙәрен тыңлаған һәм юлға сыҡҡан. Әммә юлда ул үлеп ҡалған.

Һәр бер үлгән кешенең йәнен фәрештәләр ала. Тура юлдағы иманлы кешеләрҙең йәнен мәрхәмәт фәрештәләре

ала, ә донъяла яуызлыҡ эшләгәндәрҙекен яза фәрештәләре ала.

Был кеше үлтереүсе үлгәс, уның янына йәнен алыу өсөн мәрхәмәт һәм яза фәрештәләре төшкән.

– Был кеше бөтә эшләгән гонаһтарынан тәүбәгә килде һәм тәүбә итте. Шуның өсөн дә уның йәнен беҙ алырға тейешбеҙ, – тигән мәрхәмәт фәрештәләре.

– Был кеше донъяла йәшәгәндә бер генә лә изге эш эшләмәгән. Уның йәнен беҙ алабыҙ, – тип ҡаршы төшкәндәр яза фәрештәләре.

Дөрөҫ ҡарар сығарыу өсөн Аллаһ кеше ҡиәфәтендәге фәрештәне ебәргән. Фәрештә ике яҡты ла тыңлап, шулай ҡарар иткән: "Уның үткән юлын да, ҡалған үтәсәк юлын да үлсәгеҙ. Ҡайһы юл оҙонораҡ, шуның менән ослағыҙ үҙегеҙҙең эшегеҙҙе". Фәрештәләр юлдарҙы үлсәгәндәр. Үтелгән юл бер ҡарышҡа оҙонораҡ булып килеп сыҡҡан. Мәрхәмәт фәрештәләре шатланғандар һәм үлгән кешенең йәнен алғандар".

Был хикәйәттең фәһеме:

- Ислам ғалимдарының һығымтаһы буйынса кеше һәр ваҡыт ҡотолоуға өмөт менән яза алыуҙан ҡурҡыу араһында булырға тейеш. "Нимә генә булмаһын, Аллаһ мине ғәфү итер әле!" йәки "Аллаһ мине һис ғәфү итмәҫ!" – тип фекер йөрөтөү бик ҙур гонаһ булып тора.
- Тәүбәләрегеҙҙе һәм изге ғәмәлдәрегеҙҙе һуңға ҡалдырмағыҙ. Беҙ бит үлемебеҙҙең ҡасан килерен белмәйбеҙ. Ә әгәр ҙә тәүбәгә килгән кеше үлтереүсе тәүбә итеү ваҡыты менән һуңлаһа?

* * *

Хазин һәм Мәлик (ғәләйһүмә-ссәләм) фәрештәләрҙең бурыстары нindәй?

Хазин (ғәләйһи-ссәләм) – Ожмах ҡапҡаһын һаҡлаусы.

Мәлик (ғәләйһи-ссәләм) – Тамуҡ ҡапҡаһын һаҡлаусы.

Тағы ла башҡа фәрештәләр бармы?

Бик күп фәрештәләр бар, беҙ уларҙың асыҡ ҡына һанын белмәйбеҙ. Һәр бер тере сәскәнең үтенесен Аллаһ Тәғәләгә еткереүсе фәрештәләр, һәр ямғыр тамсыһының, һәр бер ҡар бөртөгөнөң фәрештәһе һәм тағы ла бик күп һанда фәрештәләр бар. Һәр бер йондоҙҙоң да фәрештәләре бар.

Ен һәм шайтандар фәрештәләр була аламы?

Юҡ, ен һәм шайтандар уттан барлыҡҡа килгән, ә фәрештәләр Раббының нурынан яратылған. Фәрештәләр, ендәр һәм шайтандар матди түгелдәр һәм беҙгә күренмәйҙәр.

Ендәр кешеләргә оҡшаған. Ендәр араһында яҡшылары ла, насарҙары ла бар. Улар ҙа беҙҙең кеүек был донъяла һынау үтәләр.

Аллаһ әйтә:

“Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе Үҙемә ғибәҙәт ҡылһындар өсөн генә барлыҡҡа килтерҙем”

Ҡөрьән “Әҙ-ҙәрийәт, 56”

Ендәр беҙгә зыян килтерә аламы?

Изге Ҡөрьән аяттарында ендәрҙең уттан әле кеше яратылғанға тиклем үк барлыҡҡа килтерелеүе һәм уларҙың төрлө ҡиәфәткә инә алыуы тураһында әйтелә. Сәбәпһеҙ улар кешеләргә зыян килтерә алмай.

Ендәр Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтеүен тыңлайҙармы?

Ендәрҙең бер өлөшө Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһ Тәғәләнең Рәсүле булыуына ышаналар. Быға ышанмағандары шайтандың ярҙамсылары булып тора.

Шайтан енгә оҡшағанмы?

Шайтан ендәрҙең тәүаталары булып тора тип иҫәпләнә. Ул кеше яратылғанға тиклем барлыҡҡа килтерелгән. Ул ҙур ғилемгә эйә булған, Ожмахта фәрештәләрҙең уҡытыусыһы булған, ә һуңынан Ожмахтан ҡыуылған.

Шайтан башта Ожмахта булған, нишләп ул беҙҙең дошманыбыҙ булып киткән һәм ул ни өсөн Аллаһтың мәрхәмәтенән мәхрүм ителгән?

Аллаһ беренсе кешене балсыҡтан яратҡан. Һуңынан Ул фәрештәләргә һәм шайтанға: “Әҙәмгә сәждә ҡылығыҙ!” – тип ҡушҡан. Бөтә фәрештәләр сәждә ҡылған, тик шайтан ғына үҙенең тәкәбберлеге арҡаһында сәждә ҡылыуҙан баш тартҡан.

– Нишләп сәждә ҡылманың? – тип һораған унан Аллаһ.

– Мин бит уттан барлыҡҡа килгәнмен, ә Әҙәм – балсыҡтан. Ут балсыҡтан яҡшыраҡ, – тип яуап биргән шайтан.

Аллаһ Тәғәлә буйһонмаған һәм тәкәббер шайтанға асыуланған һәм уны Ожмахтан ҡыуған. Ошо ваҡыттан алып шайтан Аллаһтың мәрхәмәтенән мәхрүм ҡалған.

Ергә ҡыуылған шайтан Әҙәм бәйғәмбәрҙең (ғәләйһиссәләм) дошманы булып ҡалған.

– Кеше минең Ожмахтан ҡыуылыуымдың сәбәпсеһе булды. Шуның өсөн мин уны тура юлдан яҙҙырасаҡмын. Мин уға уң яҡтан, һул яҡтан, алдынан һәм артынан бәйләнеп йөҙәтәсәкмен. Мин уны гонаһ эшләргә һәм Аллаһҡа ҡаршылашырға мәжбүр итәсәкмен. Әйҙә Аллаһ уға асыуланһын һәм минең кеүек уны ла Ожмахтан мәхрүм итһен, – тип ҡарар иткән.

Аллаһ уға быны Ҡиәмәт көнөнә тиклем эшләргә рөхсәт иткән.

Шул көндән башлап Әҙәм балаларын яуызлыҡ эшләргә, тура юлдан ситләшергә һәр ваҡыт ҡотортоп тора. Әммә ул аҫтыртын рәүештә ҡоторта ғына ала. Кеше үҙенең эшен үҙе башҡара.

Шайтан беҙҙән нимә теләй?

Шайтан даими рәүештә беҙҙе яуызлыҡ эшләргә этәрә. Беҙ яҡшылыҡ эшләгәндә, дөрөҫтө һөйләгәндә, әсәйебеҙ һәм атайыбыҙҙы хөрмәт иткәндә, ул асыулана.

Ул беҙҙең гонаһ эшләү, ләстит һатыу, бер-беребеҙ менән әрләшеү, хәмер эсеү, ҡомарлы уйындар уйнауҙы һ.б. теләй. Ә инде тәртибебеҙ арҡаһында бәхетһеҙлеккә тарыһаҡ, ул беҙҙән көләсәк. Һәм Ҡиәмәт Көнөндә беҙҙең аҡланып: “Быны беҙ шайтан үәсүәсәһе менән эшләнек”, – тиеүебеҙгә ҡарата, шайтан: “Быны улар үҙҙәре эшләне, мин уларҙы ҡоторттом ғына”, – тип ҡаршы киләсәк.

Шайтандан нисек һаҡланырға мөмкин?

Үҙеңде шайтандан һәм аҙашҡан кешеләрҙән һаҡлау өсөн, Аллаһтың беҙгә нимә ҡушыуы тураһында ғилем алырға кәрәк. Һәм бөтә был ҡағиҙәләрҙе үтәп, Аллаһ Тәғәләгә мөрәжәғәт итергә һәм тик унан ғына яҡлау эҙләргә.

Хикәйәт:

Уғрылыҡта тотолған шайтан

Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәһе Әбү Һөрәйрә (радыйаллаһу ғәнһү) шулай бер саҡ һөйләгән:

– Бәйғәмбәр миңә рамаҙан айында йыйылған зәкәтте, ғөшөрҙө һаҡларға ҡушты. Бер ваҡыт мин ҡара тәнле ирҙең шул иғәнәнән услап ашлыҡ алғанын күреп ҡалдым. Мин уны тотоп алдым да, тегегә әйттем:

– Хәҙер мин һине Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә) алып барам.

– Мин ярлы һәм бәхетһеҙ кеше. Минең балаларым бар, уларҙы мин ашатырға тейеш, – тип яуап бирҙе.

Мин уны йәлләнем һәм ебәрҙем. Иртәгәһенә Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) минән һорай ҡуйҙы:

– Эй, Әбү Һөрәйрә! Һин кисә тотҡан уғрыны нимә эшләттең?

– Эй, Аллаһтың Рәсүле! Мин уны фәҡир булғаны өсөн һәм балалары өсөн йәлләнем. Ә Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мине иҫкәртте:

– Ул һиңә төптө ялғанды әйткән. Белеп тор, ул яңынан киләсәк.

Мин уның һүҙҙәренән уғрының ҡабаттан килерен аңлап, көтә башланым. Һәм тиҙҙән уғры яңынан килде һәм бойҙайҙы ала ғына башлағайны, мин уны тотоп алдым да тегеңә былай тинем:

– Шулай ҙа мин һине Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә) алып барам.

Һәм ул яңынан ялбара башланы:

– Ебәр мине, мин иң фәҡире, минең балаларым ас, мин башҡаса урлашмаясаҡмын.

Мин яңынан йәлләнем һәм уны йәнә ебәрҙем.

Иртәнсәк Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) минән һораны:

– Йә, Әбү Һөрәйрә, кисә төндә уғры менән нимә эшләнең?

– Эй, Аллаһтың Рәсүле! Мин уның үтенесен кире ҡаға алманым, балаларын йәлләнем.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мине тағы ла иҫкәртте:

– Ул һине йәнә алдаған һәм бөгөн тағы киләсәк.

Өсөнсө төн көттөм мин уны. Бына ул килде һәм яңынан бойҙайҙы тултыра башланы. Мин уны тотоп алып:

– Бынылһында инде мин һине Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмгә) алып барам. Һин инде өсөнсө тапҡыр килдең, үткәнендә башҡаса бында килмәҫкә тәүбә итһәң дә, - тинем. Уғры йәнә ялына башланы:

– Зинһар мине ебәр. Уның өсөн мин һиңә бер доға өйрәтәм, уны уҡыған өсөн Аллаһ һине бүләкләйәсәк.

Мин унан:

– Әйт, ниндәй доға ул, - тип һораным.

– Йоҡларға ятҡанда башынан аҙағына тиклем “Аятел Көрси”ҙе уҡы. Һин уны уҡығас, Аллаһ һиңә бер фәрештәне ебәрер, ул һинең йоҡоңдо иртәнгә тиклем һаҡлаясаҡ, һәм шайтан һиңә яҡын килә алмаясаҡ.

Мин тағы йәлләнем һәм уны ебәрҙем.

Иртәгәһенә иртәнсәк Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) миңә:

– Һин нимә эшләнең теге уғры менән? - ти.

– Эй, Аллаһтың Рәсүле! Ул миңә бер доға өйрәтте, уның өсөн Аллаһ миңә ярҙам итәсәк, шуға йәлләп, мин уны ебәрҙем.

– Ниндәй доға ул?

– Йоҡларға ятҡас башынан аҙағына тиклем “Аятел Көрси”ҙе уҡырға ҡушты. Уҡыған кешегә Аллаһ Тәғәлә уны иртәнгә тиклем һаҡлау өсөн фәрештә ебәрә, һәм уға шайтан яҡын килә алмай икән, – тип яуап бирҙем мин.

Минең яуабымды ишетеп Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аптыраны:

– Ҡара әле һин уны, нисек кенә ул алдаҡсы булмаһын, ул һине тура юлға өйрәткән. Эй, Әбү Һөрәйрә! Һин беләһеңме, һин тоташ өс төн кем менән осраштың?

– Юҡ, белә алмайым.

– Был шайтан ине.

Был хикәйәттең фәһеме:

• “Аятел-Көрси” Изге Ҡөрьән аяттарының иң әһәмиәтлеһе булып тора. Шуның өҫтәүенә, кем “Аятел-Көрси”ҙе уҡый, Аллаһ Тәғәлә уға һаҡсы фәрештәне ебәрә. Ул уны бөтә бәлә-ҡазанан һәм бәхетһеҙлектәрҙән һаҡлаясаҡ.

Ендәр беҙгә ниндәй булһа ла зыян эшләй алалармы?

Аллаһ ихтыярынан тыш бер кемгә лә зыян килтерелә алмаҫ. Күренмәгән заттарҙан үҙеңде “Әғүзү билләһи минәшшайтани-рраджим, бисмилләһи-ррахмәни-ррахим” тигән доғаны уҡып һаҡларға мөмкин, һәм һаҡлауҙы Аллаһ Тәғәләнән генә һорарға кәрәк. Мосолман һәр изге эште ошо доғанан башларға тейеш.

ИЗГЕ ЯҘЫУҘАРҒА ҺӘМ БӘЙҒӘМБӘРҘӘРГӘ ЫШАНЫУ

Кемдәр ул бәйғәмбәрҙәр?

Бәйғәмбәрҙәр – улар һайланып алынған кешеләр; улар Аллаһ Тәғәләнән килгән ғилемде бөтә кешеләргә таратыусылар.

Теләк менән бәйғәмбәр булып буламы?

Юҡ, бәйғәмбәрлеккә баш баҫып эшләү йәки тырышып ғибәҙәт ҡылыу менән ирешеп булмай. Аллаһ Тәғәлә үҙе кешеләр араһынан бәйғәмбәрлектең ауыр миссияһын һәйбәт итеп башҡара алған кешене үҙе һайлай.

Бәйғәмбәрлек атаһынан улына биреләме?

Ҡәрҙәшлек бәйғәмбәрлек бирелеүҙе билдәләй алмай. Әммә шундай осраҡтар булған: атаһы ла, улы ла икеһе лә бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһүмә-ссәләм) булғандар.

Бәйғәмбәрҙәрҙең балалары бөтә осраҡта ла аталары кеүек изге булалармы?

Юҡ, һәр ваҡытта ла түгел. Мәҫәлән, Нух бәйғәмбәрҙең (ғәләйһи-ссәләмдең) улдарының береһе атаһы һүҙен тыңламай һәм туфан һыуы ваҡытында иманһыҙҙар менән бергә һәләк булған.

Бәйғәмбәрҙәр араһында бай һәм билдәле кешеләр булғанмы?

Сөләймән бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) бик бай булған һәм дәүләт менән идара иткән. Беҙҙең һөйөклө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) данлыҡлы ырыуҙан булған, әммә ул бай булмаған.

Аллаһ Бәйғәмбәрҙәрҙе ниндәй маҡсат менән ебәргән?

Беҙ үҙебеҙҙең аҡылыбыҙ менән генә Аллаһты аңлап бөтә алмайбыҙ. Шуның өсөн дә беҙ китап һәм уҡытыусы ярҙамына мохтажбыҙ.

Кешеләрҙе хаҡ юлға төшөрөү өсөн Аллаһ бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) ебәргән.

Изге Ҡөрьән китабы беҙгә был юлды күрһәтә. Бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) кешеләрҙе өйрәткәндәр һәм үҙҙәре тормошта бөтәһе өсөн дә ысын үрнәк булғандар. Изге Ҡөрьән иманлы кешеләргә намаҙ уҡырға ҡуша, ә нисек уҡырға беҙ Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өйрәнәбеҙ.

Кем кешеләргә яҡшы үрнәк булып тора?

Кешеләргә яҡшы үрнәк булып бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) тора.

Бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) ғәҙәттән тыш кешеләрме?

Юҡ, улар беҙҙең кеүек кешеләр. Ашайҙар, эсәләр, йоҡлайҙар, арыйҙар, өйләнәләр. Әммә уларға бик ҙур бурыстар ҡуйылған.

Изге Ҡөрьәндә бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) нисек аталған?

Төрки телле халыҡтар фарсы һүҙе “бәйғәмбәр”ҙе ҡуллана, ул “хәбәр килтергән кеше” тигәнде аңлата. Изге Ҡөрьәндә бәйғәмбәрҙәр “рәсүл”, “нәби” һүҙе менән аталған.

Тәүге бәйғәмбәр кем?

Тәүге бәйғәмбәр һәм тәүге кеше Әҙәм (ғәләйһи-ссәләм) булған.

Кем һуңғы бәйғәмбәр?

Һуңғы бәйғәмбәр – беҙҙең һөйөклө Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) булған.

Бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) бөтәһе нисәү булған?

Изге Ҡөрьәндә һәр бер халыҡҡа бәйғәмбәр ебәрелгән тиелгән. Уларҙың аныҡ ҡына һаны билдәле түгел. Уларҙың һаны 124 меңдән артыҡ булған тигән мәғлүмәт бар.

Һеҙ Изге Ҡөрьәндә исемдәре иҫкә алынған бәйғәмбәрҙәрҙең (ғәләйһимү-ссәләм) исемдәрен һанай алаһығыҙмы?

Бына Изге Ҡөрьәндә исемдәре телгә алынған 25 бәйғәмбәрҙең (ғәләйһимү-ссәләм) исемдәре:

1) Әҙәм, 2) Иҙрис, 3) Нух,

4) Һут, 5) Сәлих, 6) Лут,

7) Ибраһим, 8) Исмәғил, 9) Исхак,

10) Якуп, 11) Йософ ,12) Шоғайып,

13) Муса, 14) Һарун, 15) Дауыт,

16) Сөләймән, 17) Әйүп, 18) Зөлҡәфил,

19) Йуныс, 20) Ильяс, 21) Әлйасағ,

22) Зәкәрийә, 23) Яхья, 24) Ғайса,

25) Бәйғәмбәр Мөхәммәд Мостафа (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)

Изге Ҡөрьән шулай уҡ Лоҡман, Ғөзәйер һәм Зөлҡәрнәй исемдәрен дә иҫкә ала, әммә улар бәйғәмбәр булғандармы, аныҡ ҡына билдәле түгел.

Бөтә халыҡтарға ла бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) ебәрелгәнме?

Эйе, һәр бер халыҡҡа бәйғәмбәрҙәр ебәрелгән.

Бәйғәмбәрҙәрҙең (ғәләйһимү-ссәләм) бурыстарыниндәй?

1. Бер Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылырға саҡырыу.

2. Кешеләргә Аллаһтың ҡушҡандарын һәм тыйыуҙарын еткереү.

3. Хаҡ юлды күрһәтеү.

4. Үҙ тормошо менән үрнәк күрһәтеү.

5. Киләсәктәге үлем һәм Ҡиәмәт Көнө тураһында иҫкә төшөрөү.

6. Ерҙәге тормоштоң фанилығын һәм әхирәттең мәңгелек икәнен иҫкә төшөрөү.

7. Кешеләр Ҡиәмәт Көнөндә уларҙы хаҡ юлға бер кем дә саҡырманы тимәһендәр өсөн.

Бәйғәмбәрҙәрҙең (ғәләйһимү-ссәләм) айырылып торған үҙенсәлектәре ниндәй?

Һәр бер бәйғәмбәр билдәле бер мөғжизәгә эйә булған. Мөғжизә уларға кешеләр алдында үҙҙәренең бәйғәмбәрлек миссияһын иҫбатлау өсөн кәрәк булған.

Шуның менән бергә бәйғәмбәрҙәргә (ғәләйһимүссәләм) мотлаҡ түбәндәге сифаттар хас булған:

1 – Сыдыҡ: бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) юғары дәрәжәлә ғәҙел һәм намыҫлы кешеләр.

2 – Аманат: бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) бөтә яҡлап та ышаныслылар.

3 – Тәблиғ: бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) тулы итеп кешеләргә Аллаһ Тәғәлә тарафынан ебәрелгән ҡушыуҙарҙы һәм ҡанундарҙы еткерәләр.

4 – Фәтәнәт: бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) юғары аң һәм үҫешкән аҡылға эйәләр.

5 – Исмәт: бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) гонаһ эшләмәйҙәр.

Нимә ул мөғжизә? Һәр бер кеше лә мөғжизә күрһәтә аламы?

Мөғжизә – ғәҙәттән тыш күренеш. Улар бәйғәмбәрҙәргә Аллаһ Тәғәләнең ихтыяры һәм ярҙамы менән уларҙың бәйғәмбәрлеген иҫбатлау өсөн бирелгәндәр. Ғәҙәттәге кешеләр ундай һәләткә эйә түгелдәр.

Бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) ниндәй маҡсат менән мөғжизә күрһәтәләр?

1. Үҙҙәренең миссияһын иҫбатлау өсөн.

2. Киләһе быуындарға ғилми асыштар булыуын хәбәр итеү өсөн.

Ниндәй осраҡтарҙа мөғжизә эшләнелә? Бәйғәмбәрҙәр (ғәләйһимү-ссәләм) тормошонан бер нисә миҫал килтерегеҙ.

Бәйғәмбәрҙәргә (ғәләйһимү-ссәләм) мөғжизә һәләтлеге һуңғы сиктә кәрәк булған осраҡтарҙа ғына бирелгән. Аллаһ Тәғәлә бәйғәмбәрҙәргә (ғәләйһимү-ссәләм) мөғжизәләрҙе улар дәүеренең белем кимәле һәм йәмғиәт үҫешенә ярашлы рәүештә биргән.

Муса бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) ваҡытында сихырсылыҡ айырыуса уңыш ҡаҙанған. Һәм Муса бәйғәмбәргә (ғәләйһи-ссәләм) шундай мөғжизә (таяҡ йыланға әйләнгән) бирелгән, ул инде теләһә ниндәй сихырсылыҡтан өҫтөн торған.

Ғайса бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) йәшәгән ваҡытта им-том менән дауалау үҫешкән була. Һәм уға шул дәүер өсөн ауырыуҙарҙы шәбәйтеү буйынса сикһеҙ дәрәжәләге һәләтлелек, шул иҫәптән һуҡырҙарға күреү һәләтлеген ҡайтарыу һәм хатта үлектәрҙе терелтеү мөмкинлеге бирелгән.

Беҙҙең һөйөклө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ваҡытында айырыуса поэзия һәм әҙәбиәт баһаланған. Һәм уға бирелгән иң ҙур мөғжизә булып Изге Ҡөрьән булған. Кешеләр араһында бер кем дә быңдай Китапты яҙа алмаясаҡ.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөғжизәләренән миҫал килтерегеҙ.

Беҙҙең бәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бик күп мөғжизәләр бирелгән булған. Уларҙың иң бөйөгө булып Изге Ҡөрьән тора. Әммә башҡа төрлөләре лә билдәле.

- Унының ҡул хәрәкәте менән генә Айҙың уртаға ярылыуы.
- Миғражға олғашыуы.
- Бармаҡ остарынан шишмәнән сыҡҡан кеүек һыу ағыуы.
- Ауырыуҙарҙы сәләмәтләндереүе.
- Әҙ генә ризыҡ менән әллә күпме кешене туҡландырыуы.
- Буласаҡ ваҡиғаларҙы һәм уларҙың үтәлешен алдан әйтеүе.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) башҡа бәйғәмбәрҙәрҙән айырыламы?

– Эйе. Ул һуңғы һәм иң камил Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм).

– Ул бер генә ҡәүем һәм халыҡҡа ебәрелмәгән, ә бөтә ваҡыттағы һәммә кешегә ебәрелгән.

– Ул кешеләрҙең генә Бәйғәмбәре түгел, ә ендәрҙең һәм фәрештәләрҙең дә Бәйғәмбәре.

Бәйғәмбәрҙәрҙең (ғәләйһимү-ссәләм) ҡайһыһына Яҙыуҙар ебәрелгән?

Бер нисә биттән генә торған ҡыҫҡа Изге Рисәләләр (Яҙыуҙар) – сухуфтар тип атала. Улар түбәндәге бәйғәмбәрҙәргә ебәрелгән:

Әҙәм бәйғәмбәргә (ғәләйһи-ссәләм) – 10 сухуф,

Шис бәйғәмбәргә (ғәләйһи-ссәләм) – 50 сухуф,

Иҙрис бәйғәмбәргә (ғәләйһи-ссәләм) – 30 сухуф,

Ибраһим бәйғәмбәргә (ғәләйһи-ссәләм) – 10 сухуф.

Был Рисәләләрҙең береһе лә һаҡланмаған.

Бөйөк Изге Рисәләләр дүртәү:

1 – Әт-Тәүрат: Муса бәйғәмбәргә (ғәләйһи-ссәләм) ебәрелгән. Һуңынан уның тексы кешеләр тарафынан үҙгәртелгән.

2 – Әз-Зәбүр: Дауыт бәйғәмбәргә (ғәләйһи-ссәләм) ебәрелгән. Уның тексы һуңынан кешеләр тарафынан үҙгәртелгән.

3 – Әл-Инжил: Ғайса бәйғәмбәргә (ғәләйһи-ссәләм) ебәрелгән. Уның тексы һуңынан кешеләр тарафынан үҙгәртелгән.

4 – Изге Ҡөрьән: Аллаһ Тәғәлә тарафынан Ябраил фәрештә (ғәләйһи-ссәләм) арҡылы Мөхәммәд Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ебәрелгән. Был Аллаһ Тәғәлә тарафынан ебәрелгән Рисәләләрҙән үҙгәртелмәй һаҡланған берҙән-бер Китап.

Беҙҙең көндәрҙә наҙанлыҡта торған мосолмандарҙың бер өлөшө Изге Ҡөрьәнде ҡәберлектәргә барғанда һәм мәхрүмдәргә аяттар уҡығанда ғына кәрәкле тип иҫәпләй. Һәм шулай уҡ уның тулы мәғәнәһен аңламаған ауырыуҙар өсөн тип тә аңлайҙар.

Изге Ҡөрьән Аллаһ Тәғәлә тарафынан мосолмандарға тыуғандан үлгәнгә тиклем кәрәкле булған ҡанун һәм ҡағиҙәләрҙе эсенә ала. Мосолман үҙ ғүмере буйына йәшәү эшмәкәрлегенең һәр өлкәһендә Изге Ҡөрьән талаптарына эйәрергә тейеш.

Изге Ҡөрьән үҙ эсенә нимәләрҙе ала?

Кеше тормошо ике өлөштән тора. Берәүһе – был донъяла ваҡытлыса булыу, икенсеһе – ҡабат терелгәндән

һуң мәңгелек йәшәү.

Аллаһ Тәғәлә кешеләрҙең ике донъяла ла бәхетле йәшәүҙәрен теләй. Улар бәхеткә илткән юлды белһендәр һәм ошо юл менән барһындар өсөн уларға Изге Ҡөрьән ебәрелгән.

Әгәр ҙә мосолмандар Изге Ҡөрьән буйынса йәшәһәләр һәм унын ҡушҡандарын үтәһәләр, улар еңеүселәр хәлендә булырҙар ине. Үкенескә ҡаршы, улар унын өйрәтеүҙәренән тайпылғандар, үҙҙәренең бурыстарын үтәмәйҙәр. Улай ҙа ҡайһы саҡта улар уны матур көй кеүек тыңлайҙар, доға уҡыйҙар, бәхетһеҙлектән һаҡлауҙы һорайҙар, ә көндәлек тормошта улар йыш ҡына унын әмерҙәрен һәм тыйыуҙарын үтәмәйҙәр.

Изге Ҡөрьән 23 йыл буйына индерелгән.

Изге Ҡөрьәндә 114 сүрә, 6666 аят. Сүрә – Ҡөрьәндең “бисмилләһи-ррахмәни-ррахим” тип башланған айырым бүлеге. Аят – сүрәгә ингән айырым һөйләм.

Изге Ҡөрьән ғәрәп телендә индерелгән. Унын тексын ғәрәп телендә уҡыйҙар һәм яҙалар. Унын мәғәнәһен башҡа телдәрҙә лә уҡырға мөмкин.

Хикәйәт:

Изге Ҡөрьән дауалай

Бер ваҡыт Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Әбү Зәйд Худри (радыйаллаһу ғәнһү) етәкселеге аҫтында утыҙ кешенән торған һуғышсылар төркөмөн һуғышҡа ебәргән. Шулай төндә был төркөм ғәрәп ауылына барып еткән һәм ҡунып китергә рөхсәт һораған, әммә ауыл

халҡы баш тартҡан һәм хатта юлсыларға ашарға ризыҡ та бирмәгән.

Бер ни тиклем ваҡыттан һуң был ауылдың ырыу башлығын йылан саҡҡан. Бөтә ауыл кешеһе зыян күреүсегә ярҙам итергә тырышып ҡараған, әммә бушҡа ғына. Уларға ярҙам һорап, үҙҙәре ҡыуып ебәргән сит ил кешеләренә мөрәжәғәт итеүҙән башҡа нәмә ҡалмаған.

Бәйғәмбәрҙең сәхәбәһе Әбү Зәйд (радыйаллаһу ғәнһү) һуңынан шулай һөйләгән: Беҙ Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡушыуы буйынса һуғышҡа барған төркөм менән төнгөлөккә ҡунырға туҡтағайныҡ. Беҙҙең төркөмгә хеҙмәтсе ҡыҙ килде һәм һөйләй башланы:

– Беҙҙең ырыу башлығы Сәлимде ағыулы йылан саҡты. Беҙҙең ауылда уға ярҙам итерлек кеше юҡ. Һеҙҙең арағыҙҙан йылан саҡҡан кешегә ярҙам итерлек кеше юҡмы? Бәйғәмбәрҙең сәхәбәләре (радыйаллаһу ғәнһүм) уларға ҡунып китергә рөхсәт бирмәгәнгә үпкәләп ауылға бармаҫҡа иткәндәр. Әммә уларға ярҙам иткән өсөн утыҙ һарыҡ түләнеүе хаҡында әйткәс, улар шулай ҙа риза булғандар.

Төркөмдән берәү ауылға барып, йылан саҡҡан кешегә “Әл-Фәтиха” сүрәһен өс тапҡыр уҡып, уны һауыҡтырған.

“Әл-Фәтиха” уҡыған кеше әжеренә утыҙ һарыҡ алған. Ул беҙҙең бөтәбеҙҙе лә һарыҡ һөтө менән һыйланы, ә беҙ унан:

– Һин дауалай беләһеңме ни? – тип һораныҡ.

Ул:

– Юҡ, мин тик “Әл-Фәтиха” сүрәһен уҡыным, – тип яуап бирҙе.

Беҙ уға:

– Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һорамайынса тороп, был бүләк менән файҙаланма, – тип кәңәш бирҙек.

Мәҙинәгә ҡайтҡас, был турала беҙ Бәйғәмбәргә һөйләнек. Ул:

– Был һарыҡтарҙы үҙ-ара бүлешегеҙ, бер өлөшөн миңә лә ҡалдырығыҙ! – тине.

Был хикәйәттең фәһеме:

- Изге Ҡөрьән дауалай. Әммә шәбәйеү уны кем уҡыуҙан тора. Гонаһлы кешенең дауһы килешмәй. Дауалауҙы туғры һәм тәҡүәле кеше үткәрергә тейеш.
- Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ағыулы хайуан-йәнлектәр тешләгәндән һуң шәбәйеү өсөн Изге Ҡөрьәнде уҡырға кәңәш иткән. Һәм шуның менән бергә ул ауырыуҙарға табипҡа ла күренергә ҡушҡан.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) алдында беҙҙең бурыстарыбыҙ ниндәй?

1 – Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһ Тәғәлә тарафынан ебәрелгән һуңғы бәйғәмбәр икәнлегенә геүаһлыҡ бирергә.

2 – Уның Аллаһ Тәғәлә тарафынан бөтә кешеләр өсөн үрнәк итеп ебәрелгәненә ышанырға.

3 – Һәр ваҡыт уны үрнәк итеп алырға һәм үҙеңдең етәксең итеп күрергә.

4 – Уны Аллаһ Тәғәләнән һуң үҙең, атайың, әсәйеңә ҡарағанда ла нығыраҡ яратырға.

5 – Уны хөрмәтләргә. Һәр ваҡытта, уның исемен ишетеү

менән салауат уҡырға.

6 –Уның ҡушҡандарын үтәргә, тыйғандарынан тыйылырға.

7 – Уның ғилемен башҡаларға таратырға.

Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) буйһонорға тигән әмер ҡайҙа бар?

Изге Ҡөрьән түбәндәгеләрҙе һөйләй:

“Кем Рәсүлгә буйһона, ул Аллаһҡа ла буйһона. Ә кем ситкә боролһа,.. ул сағында Беҙ һине уларға һаҡсы итеп ебәрмәнек”

Ҡөрьән “Ән-Ниса, 80”

Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) салауат уҡыу нимәне аңлата?

Ул Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм уның ғаиләһенә доға уҡыуҙы, Аллаһтан улар өсөн яҡшылыҡты һорауҙы аңлата. Бына Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә ссәләм) өсөн уҡыла торған салауаттың ҡайһы берҙәре:

“Саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм – Аллаһ уны фәтиха ҡылһын һәм сәләмләһен”;

“Аллаһүммә салли ғәлә сәйиҙинә Мөхәммәдин – Эй, Аллаһ, Беҙҙең хужабыҙ Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәдте (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) фәтиха ҡыл”;

“Ғәләйһи ссәләм – уны Аллаһ сәләмләй”.

Был салауаттарҙы һәр ваҡыт, Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) исемен ишеткәндә уҡыу, – был бик матур эш.

Бәйғәмбәрҙәр үҙҙәренең эштәренән ниндәй ҙә булһа файҙа алалармы?

Бөтә бәйғәмбәрҙәр ҙә кеше араһында динде таратып, уларға шулай тигәндәр: “Бының өсөн беҙ һеҙҙән бер ни ҙә һорамайбыҙ. Беҙгә бүләк тик Аллаһ Тәғәләлә”.

БЕҘҘЕҢ БӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ ТУРАҺЫНДАҒЫ БАШЛАНҒЫС ҒИЛЕМ ҺОРАУ ҺӘМ ЯУАПТАРҘА

Беҙҙең һөйөклө Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) исеме нисек?

Бәйғәмбәр Мөхәммәд Мостафа (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм).

Һин ниндәй ҡәүемдән?

Мин Мөхәммәд Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡәүеменән.

Уның атаһы һәм әсәһенең исемдәре нисек?

Атаһының исеме – Ғабдуллаһ, әсәһенең исеме – Әминә.

Уның һөт анаһының һәм имсәктәш һеңлеһенең исеме нисек?

Һөт анаһы – Хәлимә, ә имсәктәш һеңлеһен Шейма тип атайҙар.

Уның олатаһының исеме нисек?

Олатаһы Ғабдул-Мотталиб исемле.

Уның атаһының энеһен нисек атайҙар?

Уның атаһының энеһен Әбү Талип тип атайҙар.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡасан һәм ҡайҙа тыуған?

Ул Мәккә әл-Мөкәррәмәлә 20 апрелдә 571 йылда тыуған. Мосолман йыл иҫәбе буйынса дүшәмбе төндө рабиғүл-әүүәл айының 12-се көнөндә.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ата-әсәһе ҡасан үлгән?

Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) атаһы Ғабдуллаһ ул тыуыуға ике ай ҡала үлгән. Уға алты йәш булғанда әсәһе үлгән.

Нисә йәштә һәм кемгә беренсе тапҡыр өйләнгән Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)?

Беренсе тапҡыр Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға 25 йәш булғанда күркәм Хәҙисәгә (радыйаллаһу ғәнһә) өйләнә, уға 40 йәш булған була.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нисә балаһы булған?

Уның ете балаһы булған: 4 ҡыҙы һәм 3 малайы. Ибраһим – мысыр Мариянан (радыйаллаһу ғәнһә), ҡалғандары – Хәҙисәнән (радыйаллаһу ғәнһә).

Ҡыҙҙарының исемдәре нисек булған?

Ҡыҙҙары: Зәйнәб, Орҡоя, Өммөгөлсөм, Фатима (радыйаллаһу ғәнһүннә).

Улдарының исемдәре нисек булған?

Улдары: Ҡасим, Ғабдуллаһ, Ибраһим (радыйаллаһу ғәнһүм). Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Фатиманан башҡа бөтә балалары ла ул йәшәгәндә үк үлгән булғандар.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә ссәлләм) күркәм Хәҙисәнән (радыйаллаһу ғәнһә) башҡа кешегә өйләнгәнме?

Хәҙисә менән йәшәгән саҡта уның башҡа ҡатындары булмаған. Хәҙисә үлгәндән һуң, уға 54 йәш булғанда, ул бер нисә тапҡыр өйләнгән.

Хәҙисәнән (радыйаллаһу ғәнһә) һуң уның бер нисә тапҡыр өйләнеүенең сәбәбе һәм мәғәнәһе нимәлә булған?

Уның мәғәнәһе һәм үрнәге шунда, ул өйләнеп ҡатындары аша исламды тараҡкан, ҡатындарын һәм ғаиләһен дингә өйрәткән.

Уға бәйғәмбәрлек нисә йәшендә бирелгән?

Уға Бәйғәмбәрлек 40 йәшендә, 610 йылда бирелгән. Ул үҙенең вазифаһын 23 йыл буйына дауам иткән.

Ул нисәнсе йылда һижрә ҡылған?

Ул 622 йылда Мәккәнән Мәҙинәгә һижрә ҡылған, йәғни күсенгән.

Кемдәрҙе сәхәбәләр тип атайҙар?

Сәхәбә – ул шул кеше, кем бер генә тапҡыр булһа ла Бәйғәмбәрҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күргән һәм уның менән мәжлестә булған.

Ике төркөм сәхәбә бар:

1. Мүхәджирҙар – Мәккәнән Мәҙинәгә күсенгән Мәккә мосолмандары;

2. Ансарҙар – Мәккәнән күсенгән мосолмандарға ярҙам күрһәткән Мәҙинә мосолмандары.

Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә ссәлләм) иң яҡын дуҫтары кемдәр?

Изге Әбү Бәкр, Ғүмәр, Ғусман, Ғәли (радыйаллаһу ғәнһүм).

Ғәли Бәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) кем булған?

Ғәли Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) кейәүе һәм ике туған ағаһы Әбү Талиптың улы.

Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нисә ейән, ейәнсәре булған?

Ике ейәне – Хәсән һәм Хөсәйен һәм ике ейәнсәре – Зәйнәп һәм Сөкәйнә (радыйаллаһу ғәнһүм).

Улар кемдең балалары булған?

Изге Ғәли һәм Фатиманың балалары булған.

Әһле-бәйет нимәне аңлата?

Ул Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғаилә ағзаларын аңлата: уның ҡатындары, балалары, Ғәли

кейәүе һәм ейән-ейәнсәрҙәре (радыйаллаһу ғәнһүм).

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға бәйғәмбәрлек бирелгәс, Мәккәлә нисә йыл йәшәгән?

Унан һуң Ул Мәккәлә 13 йыл йәшәгән.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Мәҙинәлә нисә йыл йәшәгән?

Ул Мәҙинәлә 10 йыл йәшәгән.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡатнашҡан бер нисә һуғышты һанай алаһығыҙмы?

Бәҙер эргәһендәге һуғыш, Уһуд тауы эргәһендәге һуғыш, Ҳәндәк һуғышы.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡәбере ҡайҙа?

Мәҙинә әл-Мәнәүәрә ҡалаһында.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ерләнгән урын нисек атала?

Рауда Мутаххара – "иң таҙа урын".

Сөннәт нимәне аңлата?

Сөннәт – ул беҙҙең Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәре һәм тәртибе.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәре нисек атала?

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәре хәҙис-шәриф тип атала.

Бер нисә хәҙисте миҫал итеп килтерә алаһығыҙмы?

1 – Аллаһ алдындағы эштәрҙә, хатта бәләкәй генәләрендә лә тоғролоҡ мөһим.

2 – Аллаһ алдында ваҡытында үтәлгән намаҙ һәм ата-әсәне хөрмәтләү әһәмиәтле.

3 – Башҡаларға үҙеңә теләгәнде телә, үҙеңә телмәгәнде башҡаларға ла теләмә.

4 – Аллаһ Изге Ҡөрьән ҡушыуы буйынса йәшәгән ҡәүемде күтәрер, уны ҡабул итмәгәнде түбән төшөрөр.

5 – Әгәр ҙә ҡояш сыҡҡандан байығанға тиклем һинең йөрәгеңдә берәйһенә яуызлыҡ булмаһа, ул сағында Ҡиәмәт көнөндә һинең хисабың еңел булыр.

6 – Йышыраҡ Аллаһҡа доға менән мөрәжәғәт итегеҙ, сөнки доға яуызлыҡтан һаҡлай.

7 – Кемдең көндәре бер-береһенә оҡшаған – ул зыянда.

8 – Таҙалыҡ – ярты иман.

9 – Көнөнә биш тапҡыр ваҡытында намаҙ уҡығыҙ. Шикле нәмәләрҙән баш тартығыҙ. Шик тыуҙырмаған нәмәләрҙе генә һайлағыҙ. Хаҡлыҡ кеше күңеленә шатлыҡ килтерә. Ялған һәм шик уны яндыра.

10 – Бәхетле сағыңда Аллаһты ярат, һәм Ул һине һинең бәхетһеҙ сағыңда иҫеңә төшөрөр һәм яратыр. Аллаһтың ҡушыуын һәм тыйыуҙарын иҫеңдә тот, һәм Ул һине иҫендә тотор һәм һине һаҡлар.

11 – Кем Аллаһҡа һәм уның Ҡиәмәт Көнөнә ышана, күршеләренә зыян килтермәһен, улар менән алсаҡ булһын,

уларға яҡшы һүҙ әйтһен йәки исмаһам өндәшмәһен.

12 – Мосолман – кемдең ҡулдары һәм телдәре кешегә зыян килтермәй, шул кеше ысын мосолман була.

13 – Көрәштә еңгән көслө түгел, ә кем үҙенең асыуын йүгәнләй, шул кеше көслө.

14 – Әгәр һеҙ өсәү икән, өсөнсөнө ҡалдырып икәүләп бышырлашмағыҙ. Һеҙҙең бышырлашыуығыҙ уны рәнйетә.

15 – Аллаһ һеҙҙе тышҡы ҡиәфәтегеҙ һәм байлығығыҙ менән баһаламай, Ул һеҙҙең йөрәгегеҙгә һәм эштәрегеҙгә ҡарап баһалай.

16 – Хаталар бөтә кешеләргә лә хас һәм уларҙың бөтәһе лә гонаһ эшләй. Әммә уларҙың иң яҡшылары – тәүбәгә килгәндәре һәм гонаһ эшләүҙән тартылғандары.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) балаларға нисек ҡараған?

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) балаларға бик мәрхәмәтле һәм яғымлы мөғәмәләлә булған. Ул һәр ваҡытта ла кем балаларға насар ҡараған, шуларға былай тип әйткән: “Кем шәфҡәтле түгел, уларға ла шәфҡәт булмаясаҡ”.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер ваҡытта ла балаларҙан ситләшмәгән һәм уларҙы ҡурҡыта торған нәмәләрҙе эшләмәгән. Ун йыл буйы бәләкәй Әнәс (радыйаллаһу ғәнһү) Уға ярҙам иткәндә, ул бер генә тапҡыр ҙа уға тауышын күтәреп өндәшмәгән һәм уны әрләмәгән.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) балалар менән шаярған, улар менән уйнаған.

Ул уларҙы матур исемдәр менән атаған һәм уларға яҡшы доғалар уҡыған.

Ул осрашҡан ваҡытта уларға сәләм биргән һәм уларҙан кәйефтәре һәм эштәре тураһында һорашҡан, улар менән яғымлы булған.

Берәйһе ауырып китһә, ул уның хәлен белешкән.

Әгәр ҙә кемдер уға ҡунаҡҡа килергә теләһә, ул рөхсәт иткән.

Уларға ололарға ҡараған кеүек ҡараған, уға уларҙың балаларса эскерһеҙлеге оҡшаған.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ниндәй кеше булған?

Ул бөтә кешеләр өсөн шәфҡәт итеп ебәрелгән, һәм улар өсөн үрнәк булып торған. Ул беҙгә бөтә нәмәлә үрнәк булып тора. Ул – һәйбәт кеше, ул – һәйбәт ир, ул – иң яҡшы атай, ул – яҡшы хәрби башлыҡ, ул – һәйбәт етәксе, ул – һәйбәт дуҫ. Ул Ислам өсөн йәшәгән һәм Ислам өсөн үлгән. Уның һәр бер ҡушыуы – Ислам. Ул Исламға өйрәткән һәм Ислам буйынса нисек йәшәргә күрһәткән.



ҠИӘМӘТ КӨНӨНӘ ЫШАНЫУ

Теге донъя нимәне аңлата?

Ул был донъя бөткәндән һуң башланыусы мәңгелек донъя.

Ҡиәмәт көнө нимәне аңлата?

Исрафил (ғәләйһи-ссәләм) фәрештә Сурға өргәндән һуң бөтә йәндәр ҙә үлә. Ошо ваҡыттан алып кешеләр терелгәнгә тиклем һәм артабан Ожмахҡа инеүселәрҙең Ожмахҡа һәм Тамуҡҡа инеүселәрҙең Тамуҡҡа инеүенә тиклемге ваҡыт Ҡиәмәт Көнө тип атала.

Икенсе төрлө әйткәндә, кешеләрҙең ерҙәге тормошо эштәренә хисап өсөн ҡубарылыуҙан алып булған ваҡыт һәм уларҙың артабанғы мәңгелек тормошо Ҡиәмәт көнө тип атала.

Ҡиәмәт көнөнә ышаныу иман шартының береһе булып тора. Изге Ҡөрьәндә был турала таныҡлыҡ биреүсе йөҙәрләгән аят бар. Кем Ҡиәмәт Көнөн инҡар итә, ул мосолман була алмай.

Үлем йәшәү юҡлығын аңлатамы?

Үлем йәшәүҙең юҡлығын аңлатмай, ә теге донъялағы тормоштоң тыуыуы һәм яңы тормоштоң башланыуын аңлата.

Үлем ҡурҡынысмы?

Кем Аллаһтың Берлегенә ышанған һәм изге ғәмәлдәр ҡылған, уға үлем ваҡыты етеү менән фәрештәләр килә. Улар уға Аллаһ Тәғәләнән сәләм килтерә. Уның өсөн Ожмахта әҙерләнгән урынды күрһәтәләр. Уны Аллаһтың нисек яратыуы һәм уның өсөн ниндәй яҡшы ниғмәттәр әҙерләгәнен һөйләйҙәр. Улар әйтә: “Әйҙә, йыйын, киттек!”

Һәм был бәхетле кеше фани донъяны ташлап китергә һәм үҙенең Барлыҡҡа килтереүсеһенә кире ҡайтырға теләй. Аллаһ Тәғәлә үҙенең ҡолон ҡабул итергә шат буласаҡ.

Әммә иманһыҙҙарға быларҙың бөтәһе лә улай булмаясаҡ. Уларға үлем килгәндә, уларҙы ниндәй яза көтөүе тураһында һөйләйәсәктәр. Улар был турала белгәс, йөҙҙәре йәмһеҙләнәсәк, үлемгә ҡаршылашасаҡтар һәм Аллаһ Тәғәлә менән осрашыуҙан баш тартасаҡтар. Һәм Аллаһ Тәғәлә улар менән осрашырға теләмәйәсәк.

Кем иманлы булған, улар өсөн үлем ҡурҡыныс түгел. Аллаһ Тәғәләгә маҡтау булһын, Ул беҙҙе мосолмандар иткән. Һәм шуның өсөн дә беҙ үлемдән ҡурҡмайбыҙ. Унан иманһыҙҙар ҡурҡһын.

Нимә ул үлем?

Бөтә барлыҡҡа килгән тере нәмәләр тыуалар, йәшәйҙәр һәм үләләр. Тик барлыҡҡа килтерелгәндәрҙең иң юғары заты – кеше, ул яңы тормош башлау өсөн үлә.

“Үлеү өсөн тыу, үлемһеҙ булып тыуыу өсөн үл” (Нәжип Фазыл Кысакйөрәк).

“Үлем һәйбәт, беҙҙең өсөн мәңгелектең япмаһын аса. Ул шулай матур булмаһа, беҙҙең Пәйғәмәбребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үлер инеме ни?” (Нәжип Фазыл Кысакйөрәк).

Хикәйәт:

Йәшелгә кейенгән кешенең һуңғы сәйәхәте

Мин үҙемдең танышымды осратҡанда мәсеттә аҙан тауышы яңғыраны.

– Әйҙә мин һине мәсеткә алып барам. Бөгөн йома, – тип тәҡдим яһаным мин уға.

– Һин бит беләһең, мин мәсеткә йөрөмәйем.

– Беләм, әммә сәбәбен белә алмайым, – тип мин дауам иттем.

– Нисектер килеп сыҡмай. Бәлки әйләнә-тирәләгеләр миңә шулай тәьҫир итәләрҙер. Һәм йәнә йә салбарым бөтәрләнер, – тип аңлатты.

Был миңә көлкө булып китте һәм мин уға:

– Эй, һин шаяраһың да инде. Шуның өсөн генә мәсеткә йөрөмәҫкә мөмкинме? - тинем.

– Ә мин ысын. Һин беләһеңме, мин бик матур ыҫпай кейенергә яратам, етмәһә йәшел төҫтө ныҡ яратам, - тине.

Төш ваҡыты ине. Минең танышым бик матур йәшел костюм кейгәйне, бөтә кейеме йәшел төҫтө һаҡлап эшләнгән һәм бик ентекле үтекләнгән.

– Яҡшы. Һәм бөтә ғүмерең буйына һин бер тапҡыр ҙа мәсеттә булманыңмы?

– Бала саҡта олатайым менән барғайным. Башҡаса ҡасан да булһа барырмын тип уйламайым.

Ишеткәндәрем мине ныҡ хафаға һалды, һәм мин һүҙ ҡуҙғатҡанға үкендем. Ҡул бирешеп, беҙ хушлаштыҡ.

Был һөйләшеүгә бер-ике айҙан һуң, мин уны мәсеттә

тип ишеттем һәм шунда киттем. Ул йәшел япма менән ябылған көйө бөтә намаҙ уҡыусыларҙың алдында ине.

Мин әкрен генә уның янына килдем һәм бышылдап ҡына һораным:

– Һин бит мәсеткә килергә йыйынмағайның бит?

Әммә ул яуап бирмәне. Ул бит йәшел япма менән ябылған табутта ята ине.

Нимә ул ҡәбер?

Үлгән кешенең Ҡиәмәт көнөнә тиклем булған урыны ҡәбер тип атала.

Нимә ул ҡәберҙәге донъя һәм ҡәберҙәге һорау?

Кешенең үлеменән алып уның яңынан терелеүенә тиклем булған ваҡыт ҡәберҙәге донъя тип атала. Кешене ерләгәндән һуң уға ике фәрештә килә һәм уға һорауҙар бирәләр: “Һинең Раббың кем? Кем һинең Бәйғәмбәрең? Һин ҡайһы диндән? һ.б.” Һәм Был ҡәберҙә һорау алыу тип атала. Бындай һорауҙарға һәр бер үлгән кеше дусар, хатта кеше янып бер ус көлгә ҡалһа ла.

Ҡәберҙәге донъя Ҡиәмәт көнөнөң бер өлөшө булып тора. Кемгә Ожмах әҙерләнгән, ул ҡәберҙә Ожмах алдындағы кеүек йәшәр; кемгә Тамуҡ әҙерләнгән, ул инде ҡәберҙә ғазап сигә башлай.

Ҡәберҙәге донъяны ерҙәге донъя менән сағыштырырға ярамай.

Теге донъя менән сағыштырырлыҡ миҫал килтерә алаһығыҙмы?

Беҙҙең йоҡобоҙ көндәлек бәләкәй үлем кеүек булып тора. Төшөбөҙҙә беҙ шатланабыҙ һәм ғазап сигәбеҙ. Был

ғазап һәм шатлыҡтарҙы беҙ тән менән түгел, ә йән менән кисерәбеҙ. Беҙҙең төшөбөҙ һәм беҙҙең төш күреүебеҙ теге донъяның булыуына миҫал булып тора.

Бала саҡта үлгән кешеләрҙән ҡәберҙә һорау алынасаҡмы?

Юҡ, балалар һәм аҡылы зәғиф кешеләрҙән һорау алынмайсаҡ, сөнки балалар йә аҡылдары зәғиф кешеләр үҙ ҡылыҡтары өсөн яуап бирмәйҙәр. Шулай уҡ бәйғәмбәрҙәрҙән (ғәләйһимү-ссәләм) һорау алынмаясаҡ.

Кеше ҡәберҙә оҙаҡ буламы?

Ҡиәмәт Көнөнә тиклем буласаҡ.

Ахырызаман ҡасан була?

Уны Аллаһ Тәғәләнән башҡа бер кем дә белмәй. Беҙҙең өсөн иң мөһиме – фани донъяла йәшәгән ваҡытта яҡшы һәм изге эштәр башҡарыу. Үлем шул уҡ ваҡытта бәләкәй Ҡиәмәт Көнө ул.

Хикәйәт:

Инжир ағасы

Лондон эргәһендәге Уотфорд тигән ерҙә бер ҡәбер бар. Риүәйәт буйынса 1800-се йылда үлгән диңгеҙсе үҙен ҡулына инжир орлоғо һалып ерләргә ҡушҡан.

Был диңгеҙсе теге донъяның булыуына ышанмаған һәм дуҫтарына васыят әйткән: "Әгәр ҙә был орлоҡтан инжир үҫеп сыҡһа, ул сағында белегеҙ, мин теге донъя тураһында яңылышҡанмын. Әгәр ҙә үҫеп сыҡмаһа, мин хаҡлы булған булырмын".

Унын үлеменән һуң бер нисә йыл үткәс, ҡәбер йөҙлөгөн тишеп, ҙур инжир ағасы үҫеп сыҡҡан.

Сереп бөткән һөйәктәр тереләләрме?

Кем дә булһа нимәнелер беренсе тапҡыр эшләй алһа, шуны уҡ икенсе тапҡыр күпкә яҡшыраҡ эшләй. Нимәнелер беренсе тапҡыр эшләүе ауыр.

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) кешеләрҙе Ҡиәмәт Көнөнә ышанырға саҡырғанда, уларҙың ҡайһы берҙәре әйткәндәр:

– Беҙ донъяға киләбеҙ, йәшәйбеҙ, үләбеҙ һәм башҡа донъя юҡ.

Башҡалары сереп бөткән һөйәктәрҙе ҡулдарына алып тәүгеләрен йөпләгәндәр:

– Көлгә әйләнгән был һөйәктәрҙе кем дә булһа тергеҙә

аламы һәм беҙ тереләбеҙме ни?

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уларға Изге Ҡөрьән аяттары менән яуап биргән:

“Һәм улар: “Әллә беҙ һөйәктәр булып таралып бөткәс, яңынан барлыҡҡа килтерелеп, ҡәберҙән ҡубарыласаҡбыҙмы?” – тинеләр.

Әйт: “Таш йәки тимер булығыҙ йәки һеҙҙең күкрәктәрегеҙҙә ҙурая торған мәхлүк булығыҙ!..” Һәм улар әйтерҙәр: “Кем һуң кире ҡайтарыр беҙҙе?” Әйт: “Һеҙҙе тәү тапҡыр барлыҡҡа килтереүсе”. Һәм улар һиңә ҡарап баштарын сайҡарҙар һәм әйтерҙәр: “Был ҡасан була?”– тиерҙәр. Әйт: “Ихтимал, был тиҙҙән булыр”.

Шул көндө Ул һеҙҙе саҡырғас, Уға Уны маҡтап яуап бирерһегеҙ һәм бик аҙ торғанбыҙ тип уйларһығыҙ”

Ҡөрьән “Әл-Исра, 49–52”

“Ул үҙенең нимәнән барлыҡҡа килтерелгәнен онотоп, Беҙгә мәҫәл килтерә. Ул: “Сереп таралған һөйәктәрҙе кем терелтһен инде”, – ти.

Әйт: “Уларҙы тәү тапҡыр кем яратҡан булһа, шул терелтер, һәм Ул барлыҡҡа килтерелгән һәр нәмәне белә, –

Ул һеҙгә йәшел ағастан ут яһаны, һәм һеҙ шунан тоҡандыраһығыҙ”.

Күктәрҙе һәм Ерҙе барлыҡҡа килтереүсенең тағы шуның кеүектәрҙе яратырға көсө етмәҫме ни? Эйе, Ул – Бар ҡылыусы, Ғилемле!

Теләгән нәмәһенә Уның әмере: “Бул!” – тип әйтеү генә һәм ул нәмә барлыҡҡа килә”

Ҡөрьән “Йа Син, 78–82”

Хикәйәт:

Дүрт терелгән ҡош

Ибраһим Бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) бөтәһенә лә әйтә торған булған: "Минең Раббым үлтерә лә, терелтә лә" һәм быға күңеле менән ышанған. Әммә бер ваҡыт ул ялбарып һораған:

– Эй, минең Раббым! Миңә күрһәт әле, Һин нисек үлектәрҙе терелтәһең?

Раббыһы уға әйткән:

– Эй, Ибраһим! Һин ышанмағайның мы ни Минең үлектәрҙе терелтеүемә?

– Әлбиттә, ышандым, минең Раббым! Ләкин мин уны үҙ күҙҙәрем менән күрһәм, минең күңелем тынысланыр ине!

Һәм Аллаһ Тәғәлә Ибраһим бәйғәмбәргә (ғәләйһи-ссәләм) шулай ҡушҡан:

– Дүрт ҡошто тот һәм уларҙы һинең саҡырыуыңа килерлек итеп өйрәт. Һуңынан уларҙы үлтер. Уларҙың кәүҙәләрен тураҡла һәм бер-береһе менән бута. Итте дүрт өлөшкә бүл һәм һәр өлөштө дүрт тауҙың башына алып барып һал. Уларҙы үҙеңә саҡыр һәм уларҙың нисек итеп һиңә ынтылғанын күрерһең. Быны күреп, үҙеңдең ышанысыңды нығыт һәм бел Аллаһтың Ҡөҙрәтенең сиге юҡ һәм бөтә Ул барлыҡҡа килтергән нәмә Бөйөк Ғилем менән һуғарылған.

Ибраһим Бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) шатланған. Күгәрсен, әтәс, ҡарға һәм тауисты тотоп ҡулға эйәләштергән.

Ул ҡайҙа ғына булһа ла, ҡоштар уның саҡырыуына шунда уҡ осоп килгәндәр.

Һәм бына бер көндө Аллаһ Тәғәләнең ҡушыуы буйынса, ул ҡоштарҙы үлтергән. Уларҙың кәүҙәләрен тураҡлап, бөтәһен бергә бутап, дүрт өлөшкә бүлгән һәм дүрт тау башына алып барып һалған. Һуңынан бер ышыҡ урынға йәшеренеп, уларҙы саҡыра башлаған. Һәм шунда уҡ терелгән ҡоштар уға осоп килгәндәр.

Быны күреп, Ибраһим Бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) үҙенең Раббыһы алдында тубыҡланған һәм Уға рәхмәт белдергән. Һәм ул үҙенең иманын нығытҡан.

Теге донъяла бүләкләү һәм язаға тарттырыу бармы?

Ҡиәмәт Көнө – ул шундай көн, һәр бер изге эш бүләкләнәсәк һәм һәр бер гонаһлы эш язаһын аласаҡ. Хоҡуҡтары булғандар зыян күреүселәрҙән айырыласаҡ, бер генә яҡшы эш тә бүләкһеҙ, һәм бер генә намыҫһыҙлыҡ та язаһыҙ ҡалмаясаҡ.

Һәр бер изге эш өсөн ун бүләк биреләсәк, ә һәр бер насар эш өсөн – бер яза.

Ожмах (йәннәт): был мосолмандарға әҙерләнгән бүләк. Ҡөрьәндең бер аятында Аллаһ Тәғәлә әйтә: “Унда һеҙҙең өсөн йәнегеҙ нимә теләй, шул әҙерләнгән”.

Тамуҡ (йәһәннәм): Кем Уны тыңламаған, шулар өсөн Аллаһ Тәғәлә тарафынан әҙерләнгән яза. Унда динһеҙҙәр һәм ике йөҙлөләр, һәм шулай уҡ гонаһтары изге эштәренән уҙып киткән мосолмандар һәм яҡлау тапмағандар буласаҡ. Гонаһлы мосолмандар тейешле язаһын алып Тамуҡтан сығасаҡ, ә иманһыҙҙар, ике йөҙлөләр һәм мәжүсиҙәр унда мәңге буласаҡтар.

Хикәйәт:

Ҡабыҙғыс

Минең менән купела йәнәш ултырған бер ир ҡаршыла ултырған егеткә мөрәжәғәт итте:

– Сигарет менән ваҡыт тиҙерәк үтә, тартыр инең.

Егет ир кешенең тәҡдименән баш тартып, уға былай яуап бирҙе:

– Рәхмәт, мин тартмайым.

– Ярар инде. Һин әсәйең белеп ҡуйыр тип ҡурҡаһың бит, эйеме? – тип нығышты ир.

Был һүҙҙәр ҡалған юлсыларҙың көлкөһөн, ә минең асыуымды килтерҙе. Бынан алда мин бер аҙ ойоп алырға теләгәйнем, хәҙер инде күҙҙәремде астым һәм егетте ентекләп ҡараным. Уға яҡынса 20–22 йәш ине, уның аҡ һәм асыҡ сырайлы йөҙө уңайһыҙланыуҙан бер аҙ ҡыҙарҙы.

Ир һаман дауам итте:

– Һин, моғайын, һыра ла эсмәйһеңдер? Ысын бит, эсмәйһең?

Егет яуап бирҙе:

– Бөтә спиртлы эсемлектәр – хәрәм, тыйылғандар. Үҙенән-үҙе аңлашыла, мин уларҙы ҡулланмайым.

Уларҙың һөйләшеүе бөтә юлсыларҙы ла ҡыҙыҡһындырҙы. Уларҙың һәр ҡайһыһы һөйләшеүҙе иғтибар менән тыңланы.

Ир һораны:

– Йә, ул сағында һин “Рус лотоһы” тураһында ни әйтерһең? Бит уны телевизорҙан даими рекламалайҙар.

– Бөтәһе лә шул уҡ бер нәмә. Быныһы ла һәм бөтә ҡалған отошло уйындар – хәрәм.

– Эй, һин бигерәк әҙәп ҡағиҙәләренә буйһоноп йәшәгән кеше икән, дуҫҡай. Тегеһе лә – хәрәм, быныһы ла – хәрәм.

Был юлы егет өндәшмәне, уға был ирҙең ялҡытҡаны күренеп тора ине. Ир кеше үҙенең һорауҙары менән егетте аптыраашта ҡалдырҙым тип уйланы һәм сигарет төтөнөн уның яғына өрөп, еңеүсе ҡиәфәте менән әйтте:

– Тамуҡ утынан ҡурҡып һеҙ үҙегеҙҙе был донъяның бөтә ләззәттәренән мәхрүм итәһегеҙ? Һеҙҙеңсә, был тормошмо?

Мин иргә ҡараным һәм ул минең ҡарашымды тойоп алды:

– Дуҫҡай, нимә әйтерһең быға? Был шулай түгелме ни? Беҙ бөтәбеҙ ҙә Тамуҡта янмайбыҙмы ни? Мин беҙҙең бөтәбеҙгә бергә ул тиклем ҡурҡыныс булмаҫ, тип уйлайым.

Бының менән ул мине бөтөнләй сығырҙан сығарҙы. Тотанаҡлы булырға тырышып, мин уға яуап бирҙем:

– Ҡарап торам да, һеҙ бик ҡыйыу кеше. Һеҙ уттан да ҡурҡмайһығыҙ икән?

– Ҡурҡмайым тип әйтә алмайым. Ә нимә ҡамасаулай һуң беҙгә был тормошҡа шатланырға?

Шулай тип әйткәндән һуң, ул бер аҙ ғына уйланып торҙо һәм тәҙрә янында ятҡан сигаретҡа йәнә үрелде. Мин унан алда уның ҡабыҙғысын тоҡандырып уға яҡын килтерҙем:

– Рәхим итегеҙ, тоҡандырығыҙ.

Ул ҡабаланмай ғына ҡаптан сигарет алып, тоҡандырырға уйланы:

– Юҡ, сигаретты түгел, ә һеҙҙең бармаҡты, рәхим итегеҙ, – тинем мин уға.

– Аңламаным. Нишләп мин үҙемдең бармағымды ҡуйырға тейеш?

– Һеҙ Тамуҡта яныуҙан ҡурҡмағас, һеҙгә бер генә бармаҡты утҡа ҡуйыу ҡыйынмы ни?

Бөтәһе лә уның нимә әйтеүен көттөләр.

Ир кеше нимә тип яуап бирергә лә белмәне, һәм ул бөтә ике сәғәт буйына ахмаҡ һүҙ һөйләгәнен аңланы. Бер аҙ ваҡыт өндәшмәй торғандан һуң, ул ҡапыл:

– Бына минең туҡталыш, – тип һикереп торҙо ла, поездан сығып, вокзал алдындағы ығы-зығыла күҙҙән юғалды.

Мин һуңынан ғына иҫемә килдем, уның ҡабыҙғысы минең ҡулда тороп ҡалғайны.

Ҡаршыла ултырған егет быны күреп йылмайҙы.

Мин уға ҡабыҙғысты һондом һәм былай тинем:

– Һин тартмаһаң да, ул һиндә ҡалһын. Хәҙер һин беләһең инде, уның менән нисек файҙаланырға.

Ҡиәмәт Көнөн алдан белгертеүсе билдәләр буламы? Ниндәй улар?

Даббатул Ард. Ул тере зат, ерҙән сығасаҡ һәм кешеләр менән һөйләшәсәк. Уның сығыуы менән Аллаһ Тәғәләгә ышаныусылар ышанмаусыларҙан ныҡ айырылып торасаҡ.

Ҡиәмәт көнөн белдереүсе билгеләрҙең бәләкәйҙәре һәм ҙурҙары була. Ҙур билгеләрҙе ҡарап китәйек.

Томан. Ҡиәмәт көнө алдынан бөтә ерҙе томан ҡаплаясаҡ. Унан мосолмандарҙа тымау барлыҡҡа килә, ә иманһыҙҙар иҫерек кеүек булырҙар.

Дәжжәл. Аллаһ Тәғәлә тарафынан һөрөлгән Дәжжәл сығасаҡ – ул бер күҙле, бәләкәй кәүҙәле, тарбайып торған аяҡлы. Ул үҙен Илаһ тип белдерәсәк. Ул бөтә донъяны ҡулына төшөрәсәк, тик Мәккә менән Мәҙинәне генә ала алмаясаҡ.

Ҡояштың сығыуы көнбайыштан. Ҡояш көнбайыштан сығасаҡ, төшлөккә етәсәк һәм йәнә көнбайышҡа байыясаҡ.

Йәджүдж һәм Мәджүдж. Йәджүдж һәм Мәджүдж исемле халыҡ барлыҡҡа киләсәк, улар ергә бәхетһеҙлек килтерәсәк.

Мәсих (Мессия). Ғайса бәйғәмбәр (ғәләйһи-ссәләм) ергә төшәсәк.

Ут. Йемен районында ут тоҡанасаҡ һәм бөтә кешелекте юҡҡа сығарасаҡ.

Бөтә был ваҡиғалар булып үткәндән һуң Аллаһ Тәғәлә әмер көтөүсе Исрафил фәрештәгә (ғәләйһи-ссәләм) Сурға өрөргә ҡушасаҡ. Һәм Исрафил (ғәләйһи-ссәләм) Сурға өргәндән һуң, был тауыштан бөтә тере зат һәләк буласаҡ.

Ҡәберҙәге һорауҙан һуң тағы ла һорау буласаҡмы?

Әлбиттә, Мәхшәр көнөндә һәр бер кеше үҙенең эшләгән эше өсөн Яуап бирәсәк.

Нимә ул Мәхшәр көнө?

Исрафил фәрештә (ғәләйһи-ссәләм) беренсе тапҡыр Сурға өргәндән һуң бөтә йәндәр үләсәк. Аллаһ Тәғәләнән

башҡа бер ниндәй ҙә тере йән эйәһе ҡалмаясаҡ. Был билдәле ваҡытҡа тиклем дауам итәсәк. Шунан һуң Аллаһ Тәғәлә Исрафил фәрештәне (ғәләйһи-ссәләм) терелтәсәк. Исрафил фәрештә (ғәләйһи-ссәләм) икенсе тапҡыр Сурға өргәс, бөтә кешеләр терелеп, Яуап өсөн Мәхшәр майҙанына йыйыласаҡ.

Мәхшәр – ул шундай урын, унда ҡасандыр йәшәгән һәм беҙҙән һуң ерҙә йәшәйәсәк кешеләр яңынан терелгәндән һуң бергә йыйыласаҡ.

Бөтә кешелек бер майҙанға йыйыласаҡ: әсәй һәм атайҙар, ағай һәм энеләр, апай һәм һеңлеләр, ир һәм ҡатындар, таныштар; бөтәһе лә бер-береһен күрәсәктәр, тик һәр ҡайһыһы үҙе тураһында ғына уйлаясаҡ, бер кем дә бер кемгә лә ярҙам итә алмаясаҡ. Бөтәһе лә түбән торған ҡояш эҫеһенән хәлһеҙләнеп, ҡурҡыу ҡатыш борсолоуҙа буласаҡ.

Бөтәһе лә тирләп үҙҙәренең тиренә батып торасаҡ. Нимәгәлер хаҡтары булғандар шуны талап итәсәк. Тормошта хоҡуҡтары кәметелгәндәр, кемдәр был хоҡуҡтан мәхрүм иткән, уны шунан һораясаҡтар.

Кемдәрҙе Мәхшәр ғазабы урап үтәсәк?

Беҙҙең һөйөклө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһ Тәғәлә ҡурсалауында булыусылар Мәхшәр ғазабынан ҡотолор тип аңлатҡан:

“Мәхшәр Көнөндә бер ниндәй ҙә күләгә булмағанда, Аллаһ Тәғәлә ете төркөм кешене ышыҡлап һаҡлар:

1 – Ғәҙел идар итеүселәрҙе;

2 – Аллаһ Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыусы йәштәрҙе;

3 – Ҡәлебе мәсеткә бәйле кешеләрҙе;

4 – Аллаһ хаҡы өсөн бер-береһен яратып, осрашып күрешеүселәрҙе һәм айырылышыусыларҙы;

5 – Матур ҡатындарҙың әүрәтеүенән “Аллаһтың язаһынан ҡурҡам”, тип баш тартҡандарҙы;

6 – Фәҡирҙәргә йәшертен рәүештә ярҙам иткән, йәғни уң ҡулы биргән хәйерҙе һул ҡулы белмәгәндәрҙе;

7 – Аллаһ Тәғәләне иҫенә төшөрөп, йәшертен күҙ йәше түккәндәрҙе“.

Нимә ул ғәмәл дәфтәре?

Фәрештәләр Мәхшәр майҙанында кешеләргә уларҙың фани донъялағы ғәмәлдәре яҙылған дәфтәрҙәрҙе тапшырырҙар. Ожмахҡа инеүселәргә дәфтәр уң ҡулға, ә Тамуҡҡа һөрөлөүселәргә һул яҡтан биреләсәк. Эй, Бөйөк Әмер биреүсе! Был дәфтәрҙә нимәләр генә яҙылмаған!

Йәшәгән ваҡыттағы бөтә ҡылған эштәр яҙылған, изгеләре лә, гонаһтары ла, береһе лә яҙыуҙан йәшерелмәгән. Дәфтәрҙә “Мин быны эшләмәнем!” тип әйтерлек бер нәмә лә яһап яҙылмаған.

Дәфтәрҙе уң ҡулына алған кеше шатланып әйтер: “Килегеҙ! Уҡығыҙ минең дәфтәремдә нимә бар! Мин электән белә инем Хисап Көнөнөң килеүен!”

Ул бик бәхетле рәүештә Ожмахта буласаҡ һәм Ожмах емештәрен ашаясаҡ. Ожмахта булыусыларға әйтерҙәр:

“Ашағыҙ һәм эсегеҙ. Был һеҙгә фани донъяла эшләгән изге эштәрегеҙ өсөн бүләк!”

Ә дәфтәрҙе һул ҡулына алыусылар әйтерҙәр:

“Эй! Был дәфтәрҙе бирмәһәләр икән. Әгәр мин белгән булһам, минең яуабымдың нисек булырын! Эй! Нишләп бөтәһе лә минең үлемем менән бөтмәне икән? Миңә минең

байлығым ярҙам итмәҫме икән ни? Ҡайҙа минең көсөм, минең ҡөҙрәтем?”

Аллаһ Тәғәлә фәрештәләргә фарман бирер:

“Тотоғоҙ уны һәм бығау һалығыҙ! Ташлағыҙ уны утҡа!”

Нимә ул Яуап-Хисап?

Аллаһ Тәғәлә бөтәһенән дә бер үк ваҡытта фани донъя – ерҙәге тормош өсөн хисаплама талап итәсәк. Һәм һәр кем тик үҙенең ҡылығы-эше өсөн генә яуап тотасаҡ. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән, түбәндәге һорауҙарға яуап бирмәйенсә бер кем дә яуап урынынан китмәйәсәк:

1 – Үҙеңдең ғүмереңде һин нимәгә бағышланың?

2 – Һиңә бирелгән ғилемде һин нимәгә сарыфланың?

3 – Һин нисек итеп үҙең аҙыҡ һәм мөлкәт таптың һәм һин улар менән нисек файҙаландың? Улар хәләл инеме, әллә хәрәмме?

4 – Һиңә бирелгән тәнде һин ниндәй юлда файҙаландың: Аллаһҡа яҡынайыу юлындамы әллә хәрәм юлдамы?

Һәм был һорауҙарға һәр кемдән тулы яуап алынасаҡ.

Нимә ул Мизан Үлсәүе?

Уларҙа кешенең изге һәм гонаһлы ғәмәлдәре үлсәнәсәк.

Мәхшәр Көнөндә бер кемгә лә уның ғәмәлдәрен үлсәгәндә ғәҙелһеҙлек күрһәтелмәйәсәк. Һәр бер эш-ҡылыҡ үлсәнәсәк: яҡшыһы һәм насары. Һуңынан һәр бер изге ғәмәл унауға, ә һәр бер гонаһ – берәүгә иҫәпләнәсәк.

Нимә ул Сират Күпере?

Ул - ғәмәлдәр үлсәнгәндән һуң һәр бер кеше үтә торған Юл (Күпер). Ул Күпер Тамуҡ өҫтөнән үтә. Мосолмандар был Күпер аша үтеп Ожмахҡа эләгәсәк, ә динһеҙҙәр, ике йөҙлөләр һәм мәжүсиҙәр унан Тамуҡҡа ҡолап төшәсәк. Күперҙе үтеүҙең ауырлығы фани донъяла, ерҙәге тормошта Аллаһ Тәғәләгә хеҙмәт итеү дәрәжәһенә тап киләсәк.

Сират Күпере ҡаҙыҡтар һәм ырғаҡтар менән ҡаплап алынған. Һәм Күперҙән уларға эләкмәйенсә һәм йығылмайынса үтеүе бик ҡыйын буласаҡ. Күперҙән йығылыу – бик ҙур бәхетһеҙлек, ул инде Тамуҡҡа төшөүҙе аңлата. Әммә кемдең Хисабы еңел, улар Сират Күперен үтә аласаҡ.

Изге кешеләр күперҙе бик тиҙ үтерҙәр: кем күҙ асып йомғансы, кем йәшен кеүек, кем ел һымаҡ, ә кем ҡош тиҙлеге менән. Һәр кем үҙенең ерҙәге эштәренә тап килгән тиҙлек менән үтәсәк. Ләкин кем нисек кенә булһа ла, күперҙе үтһә, ул Ожмахта була.

Хисап биреүҙә һәм Күперҙә ҡыйынлыҡ кисереүсе гонаһлы мосолмандар өсөн беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһ Тәғәләнең рөхсәте менән Унан уларҙың гонаһтарын ғәфү итеүҙе һораясаҡ. Ғәрәпсә "шәфәғәт" "ҡурсалау"ҙы аңлата.

Нимә ул Хауыз-Шишмә?

Һәр бер бәйғәмбәрҙең (ғәләйһи-ссәләм) Ожмахта үҙенең Шишмәһе – Хауызы бар. Был шишмәнән бәйғәмбәрҙәр тәмле һәм саф эсемлек менән үҙенең артынан лайыҡлы эйәреүселәрҙе һыйлаясаҡ.

Шишмәнән эсеүсе бер ваҡытта ла һыуһау кисермәйәсәк. Ожмахта эсемлектәр күп буласаҡ, ләкин

улар һыуһынды ҡандырыу өсөн түгел, ә хушланыу өсөн.

“Ғәйепте таныу өсөн килдек, хисап өсөн баҫасаҡбыҙ.

Ерҙәге тормош юлсылары, ҡабаттан терелеү өсөн үләсәкбеҙ”.

Нисек итеп Ожмахҡа инергә һәм унда булыу оҙаҡмы?

Ожмахтың асҡысы булып иман, ғибәҙәт һәм әхлаҡ тора. Ожмахта булыу мәңге.

Динһеҙ кеше Ожмахҡа инәме?

Юҡ, инмәй. Аллаһ Тәғәлә Ожмахты ерҙәге һынауҙы үтеүселәргә генә бирә.

Гонаһлы мосолман Ожмахҡа эләгәме?

Изге ғәмәлдәренә ҡарағанда гонаһтары күберәк мосолмандар, гонаһтарына ҡарап, Тамуҡта таҙарынғандан һуң Ожмахҡа инеүҙәре мөмкин.

Аллаһ Тәғәлә Ожмахтағы кешеләргә нисек ҡараясаҡ?

Аллаһ Тәғәлә кешеләргә ғәҙел. Ул уларға тик мәрхәмәт кенә күрһәтә. Аллаһ Тәғәлә кешеләргә йөҙ төрлө шәфҡәт булдырған, һәм уларҙың тик береһен генә ерҙәге тормошта биргән. Йөҙ мәрхәмәттең ошо береһе арҡаһында ер йөҙөндәге тере заттар бер-береһе менән татыулыҡ һәм дуҫлыҡта йәшәй. Ҡалған туҡһан туғыҙ мәрхәмәт кешене Ожмахта көтә.

Аллаһ Тәғәлә нимәне ғәфү итмәй?

Аллаһ бер ваҡытта ла ғәфү итмәй:

1 – Уға тиңдәш, ярҙамсы биргәнде (ширек);

2 – Кешеләрҙең бер-береһенең хоҡуҡтарын сикләүҙе.

Ожмахта иң бөйөк бүләк ниндәй?

Аллаһ Тәғәләне күреү. Был иң юғары бүләк.

Кешеләр Ожмахта Аллаһ Тәғәләне күрәләрме?

Аллаһ Тәғәләне Ожмахта тик мосолмандар ғына күрә.

Тамуҡ һәм Ожмахта үлем бармы?

Юҡ, үлем тик бер генә тапҡыр килә. Тамуҡ һәм Ожмахта кешеләр үлемһеҙ.

Нимә ул Ожмах?

Ул Аллаһ Тәғәләнең Уның тарафынан кем Уға ышанған һәм тормошта тик изге ғәмәлдәр генә башҡарған, шулар өсөн әҙерләнгән бүләге. Изге Ҡөрьәндә Ожмах күп йылғалар ағып һәм меңәрләгән күренмәгән емештәр үҫкән урын тип һүрәтләнә. Унда йәнең нимә теләй, бөтәһе лә бар.

Нимә ул Тамуҡ?

Тамуҡ – ул Аллаһ Тәғәләгә ышанмаған һәм гонаһтары булғандарҙың яза алыу урыны. Кемдәр был донъяла насар эштәр эшләгән мәңгелек донъяла язаны тулыһынса аласаҡтар.

Гонаһлы мосолмандар Тамуҡта үҙҙәренең гонаһтары өсөн яза алғандан һуң Ожмахҡа инәсәктәр.

Тамуҡҡа инмәҫ өсөн нимә эшләргә кәрәк?

Аллаһ Тәғәлә кешеләрҙең Тамуҡҡа инеүен теләмәй. Аллаһ эшләгән гонаһтарына үкенгән һәм Унан ярлыҡау һораған ҡолдарын ғәфү итә. Тамуҡҡа инмәҫ өсөн гонаһ эшләүҙән ҡасырға, ә инде хаталар һәм гонаһтар эшләһәң, уларға тәүбә итергә һәм киләсәктә эшләмәҫкә тырышырға кәрәк.

Ҡиәмәт көнөнә ышаныу был донъялағы тормошҡа нисек йоғонто яһай?

Ҡиәмәт Көнөнә ышаныусы кеше Аллаһ Тәғәләнең һәр ваҡыт һәм һәр ерҙә уны күреүенә ышана. Ул үҙенең бөтә эштәренә: изге һәм гонаһлыларына уға яуап бирергә тура киләсәк икәнен белә. Ул гонаһ эшләүҙән тыйыласаҡ.

Ҡиәмәт Көнөнә ышаныусы үлемдән артыҡ ҡурҡмаясаҡ. Ул белә, уның яратҡан яҡындары мәңгелек доъялала ла бергә буласаҡтар.

Ҡиәмәт Көнөнә ышаныусы был донъяла мәхрүм ителгән хоҡуҡтарҙың мәңгелек донъяла ҡайтарылыуына ышана. Быға өмөт уны шатландырасаҡ һәм тынысландырасаҡ.

Ҡиәмәт Көнөнә ышаныусы әйләнә-тирәләгеләр менән мөнәсәбәткә айырым иғтибар итәсәк. Улар өсөн ул әҙәплелек, кеше йәнле булыу һәм үҙ-ара ярҙамлашыу өлгөһө буласаҡ.

Ҡиәмәт Көнөнә ышаныусы ваҡыттың ҡәҙерен беләсәк. Был донъя ғибәҙәт ҡылыу һәм изге эштәр өсөн бирелгән. Был донъяла беҙҙең ғүмеребеҙҙең күпме икәнлеге беҙгә билдәһеҙ. Теге донъяла үтәлмәгән рухи кисерештәр һәм яҡшы эштәрҙе кире ҡайтарыу мөмкинселеге юҡ.

Ҡиәмәт Көнөнә ышаныусы үҙенең был донъяға килеү сәбәбен аңлай, шуға ла ул яңылыш юл эҙләмәйәсәк. Ошо ғилем менән уның йәне тыныслыҡта буласаҡ.

Хикәйәт:

Дүрт кәңәш

Ҡасандыр бер ваҡыт гонаһлы кеше йәшәгән. Ул үҙенә нисек кенә гонаһ эшләмәҫкә һүҙ бирһә лә, уның яман ғәҙәттәре һис нисек уны ташлап китмәгән. Һәм бына ул юғары белемле һәм Исламға ҡәтғи эйәреүсе кешене табырға ҡарар итә. Уға Ибраһим бин Әтһәмгә мөрәжәғәт итергә кәңәш биргәндәр. Гонаһлы кеше Ибраһим бин Әтһәмгә килеп, былай тип үтенгән:

– Мин үҙемдең насар ғәҙәттәремдән бер нисек тә арына алмайым. Миңә башҡаса гонаһ эшләмәҫкә кәңәш бирсе.

– Мин һиңә дүрт кәңәш бирәм. Әгәр ҙә һәр ваҡыт улар тураһында иҫеңдә тотһаң, ул сағында Аллаһ Тәғәлә һиңә насар ҡылыҡтан ҡотолорға ярҙам итер, – тип яуаплаған Ибраһим бин Әтһәм.

Был кеше бик шатланған һәм иғтибар менән тыңлай башлаған:

– Һиңә беренсе кәңәшемде бирәм, – тип башлаған Ибраһим бин Әтһәм. – Һин ҡайҙа ғына булһаң да, нимә генә эшләһәң дә Аллаһ Тәғәлә һине күреп тора.

– Минең икенсе кәңәшем: әгәр һин ниндәйҙер гонаһ эшләйһең икән, һин Аллаһ биргән аҙыҡты ашама. Шулай булмай бит инде. Уға ышанаһың, Ул биргән ризыҡтан туҡланаһың, һәм шул уҡ ваҡытта Уның ихтыярына ҡаршы бараһың? – тип дауам иткән ул.

Һәр бер кәңәштән һуң Ибраһим бин Әтһәм бер ни тиклем ваҡыт кәңәштәрҙең гонаһлының йөрәгенә барып етеүен көтөп торған.

– Ә өсөнсө кәңәш ниндәй? – тип һораған кеше.

Ибраһим бин Әтһәм тыныс тауыш менән һүҙ артынан һүҙ әйткән:

– Минең өсөнсө кәңәшем шул: һинең тағы ла гонаһ эшләгең килһә, һин иҫеңә төшөр, бөтә донъя һәм унда булған бөтә нәмә Аллаһ Тәғәләнеке. Әгәр ҙә инде һин йәнә лә яңынан гонаһ эшләһәң, ул сағында һис нисек тә Аллаһ биләмәләрендә ҡалма, шунда уҡ үҙеңә икенсе урын эҙлә.

Был кеше дини кеше булған була, шуға ла ишеткән кәңәштәрҙән тотлоға башлай:

– Нисек инде, ҡайҙан башҡа урынға китәйем, бит бөтәһе лә Аллаһтыҡы.

Ибраһим бин Әтһәм уның күҙенә ҡарап ҡысҡырып ебәргән:

– Ҡайһылай ҙа рәхмәтле була белмәү! Мәрхәмәтһеҙлек! Һин уның биләмәләрендә йәшәйһең, һәм һин үк Уға ҡаршы барырға теләйһең.

Әйтелгән һүҙҙәр был кешене ныҡ тулҡынландырған, һәм ул дүртенсе кәңәште һораған.

– Үлем сәғәте еткәс Ғазраил фәрештә һинең йәнеңде алырға киләсәк. Һин шул ваҡытта уға әйт: “Эй, Ғазраил! Һин ваҡытһыҙ килдең. Һин, мин гонаһтарыма тәүбә итеп бөткәс, кил. Әлегә миңә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылырға һәм Уның ғәфү итеүен һорарға кәрәк”, – тип яуап биргән Ибраһим бин Әтһәм.

– Улай булмай инде! Мин нисек Ғазраилдан быны һорай алам? Ул миңә килгәндән һуң, мин инде бер ни ҙә

эшләй алмаясаҡмын.

Ибраһим бин Әтһәм үҙенең нәсихәтен тамамлап, былай тигән:

– Эй, кеше! Беләһең бит, Аллаһ Тәғәлә һине күрә. Ул биргән нәмә менән туҡланаһың. Уның биләмәләрендә йәшәйһең. Үлем фәрештәһе килгәндә унан көтөп тороуҙы һорай алмаясаҡһың. Шуға ла әле Ғазраил (ғәләйһи-ссәләм) килмәҫ борон тәүбә ит. Ҡолға нимә ҡушылған, шуны эшлә. Аллаһ Тәғәләгә яҡынайырға, яҡшы әҙәпле һәм ғибәҙәт ҡылыусыларҙан булырға тырыш.

Ишеткән дүрт кәңәш гонаһ ҡылыусыны тулҡынландырған һәм ул ҡысҡырып илаған. Үҙенең гонаһтарына тәүбә итә башлаған һәм шул көндән башлап гонаһ эшләүҙән туҡтаған. Бөтә йәне һәм йыйылған мөлкәте менән Ислам хаҡына хеҙмәт итә башлаған. Ул үҙенең элекке таныштарын ташлаған, Ибраһим бин Әтһәмдең уҡыусыһы булып киткән һәм үҙенең белемен үҫтергән. Элекке гонаһлы булған мөхитте алыштырып, тиҙҙән изге эштәр башҡара башлаған.

ТӘҠДИР ҺӘМ ЯҘМЫШҠА ЫШАНЫУ

Нимә ул Тәҡдир – Ҡадар?

Тәҡдир ул булып ятҡан хәлдең урынын, ваҡытын һәм шарттарын Аллаһ Тәғәлә тарафынан алдан билдәләп һәм яҙып ҡуйыуҙы аңлата.

Нимә ул яҙмыш – Ҡада?

Яҙмыш – ул Аллаһ Тәғәләнең Ихтыяры буйынса алдан билдәләнеп ҡуйылған нәмәнең билдәле бер ваҡытта үтәлеүе. Тәҡдир – ул үҙ сиратында план, ә яҙмыш – ошо пландың Аллаһ Тәғәлә тарафынан үтәлеүе. Һәр төрлө ваҡиға уның үтәлгәненә тиклем тәҡдир булып тора. Ә уның үтәлеше – ул яҙмыш.

Нимә ул тәҡдир икәнен аңлата алаһығыҙмы?

Календарҙың биттәрен әйләндереп ҡарап, беҙ билдәле бер көн һәм сәғәттә ҡояш тотолоу буласағын белә алабыҙ. Был көн һәм сәғәт килә, һәм ҡояш тотола. Беҙ беләбеҙ, календарь был көндән күпкә алдараҡ баҫылған. Әйҙәгеҙ, уйлап ҡарайыҡ: "Ҡояш тотолоу календарҙа планлаштырғанға булғанмы?" Яуап: "Әлбиттә, юҡ". Ҡояш тотоласағы тураһында күпмелер айҙар элек астрономдар

тарафынан иҫәпләп сығарылған, һәм һуңынан был турала календарҙа баҫтырып сығарғандар.

Шулай итеп, Аллаһ Тәғәлә беҙҙең тәҡдирҙе яҙған. Ул яҙылған, һәм беҙҙең киләсәк тәртип-ҡылыҡтарыбыҙ ҙа билдәле.

Хикәйәт:

Хәлиф Ғүмәрҙең (радыйаллаһу ғәнһү) яуабы

Изге Ғүмәр хәлиф (радыйаллаһу ғәнһү) Сирияла урынлашҡан ғәскәрҙәрҙе тикшереү өсөн юлға сыҡҡан. Уның төркөмө бер ауылға барып еткән. Тирә-яҡта йәшәгән халыҡ уны ауылда чума ҡотороноуы хаҡында иҫкәртә. Изге Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) ауылға инмәҫкә ҡарар итә. Сәрғәскәрҙәрҙең береһе һораған:

– Эй, Ғүмәр! Һин Аллаһ Тәғәләнең тәҡдиренән ҡасаһыңмы әллә?

Изге Ғүмәр хәлиф (радыйаллаһу ғәнһү) яуап биргән:

– Эйе, мин Аллаһтың минең өсөн алдан билдәләп ҡуйылғанынан ҡасып, Уның миңә алдан билдәләгәненә барам. Әйҙә, күҙ алдына килтерәйек әле, бына һинең бер көтөү дөйәләрең бар, һәм ул йылғаға килде. Тик йылғаның бер генә яры һутлы үлән менән ҡапланған, ә икенсеһе – яланғас таштар менән. Һин ҡайһыһына туҡтарға хәл итер инең? Дөйәләрҙе ташлыһына түгел, ә үләнле ярҙа көтөргә ҡарар итеүең Аллаһ Тәғәләнең тәҡдирен үтәү түгелме ни?

Быны менән Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) үҙенең сәрғәскәренә, кешенең уға нимә яҙылғанын белмәүе, шуның өсөн дә хәүеф-хәтәрҙән ҡасырға тейеш икәнен аңлатҡан.

Исламда белә тороп үҙеңде артыҡ ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыу тыйылған.

“Аллаһ миңә бөтәһен дә яҙып ҡуйған, минең гонаһтарымда минең ғәйебем юҡ”, - тип раҫларға мөмкинме?

Юҡ, улай итергә ярамай! Аллаһ Тәғәлә кешегә ихтыяр көсө биргән, уны һайлап алыу ирке тип тә атайҙар. Шуның өсөн дә кеше нимәне эшләргә, нимәнән тыйылырға икәнен һайлай ала! Ә Ҡиәмәт көнөндә бөтә кешеләр ҙә үҙ ихтыяры менән эшләнгән эштәре өсөн яуап бирәсәктәр.

Кеше тормошонда уның ихтыярынан тыш булған ваҡиғалар буламы?

Эйе, була. Беҙҙең тыуыуыбыҙ, беҙҙең енесебеҙ, буйыбыҙ, беҙҙең ата-әсәбеҙ кемдәр, ерҙәге тормоштан китеү ваҡыты... Был ваҡиғаларҙа беҙҙең ихтыярыбыҙҙың ҡатнашы юҡ, һәм улар өсөн беҙ яуап бирмәйбеҙ.

Кеше ихтыяры менән башҡарылған эш-ҡылыҡтарға миҫал килтерегеҙ.

Аллаһ Тәғәлә беҙгә һайлап алыу хоҡуғы биргән. Әгәр ҙә беҙҙең һайлап алыу хоҡуғыбыҙ булмаһа, Аллаһ гонаһтар өсөн яза биреп, ә изге эштәрҙе бүләкләй алмаҫ ине. Яза һәм бүләк беҙгә беҙ яуап биргән эштәр өсөн генә бирелә.

Мәҫәлән, автобусты йөрөтөүсе водитель машинаны уңға ла, һулға ла бора һәм тураға ла китә ала. Ә инде теләгәндә тормозды файҙаланып, автобусты туҡтатыуы ла мөмкин. Әгәр ҙә авария була ҡалһа, водителдән двигателдең нисек эшләүе хаҡында һоралмаясаҡ. Уға тик нишләп ул бик шәп

барған, нишләп уңға, һулға боролған, ни өсөн ваҡытында туҡтамағаны өсөн яуап бирергә тура киләсәк.

Аллаһ Тәғәлә беҙҙең киләсәктәге ҡылыҡ-тәртибебеҙҙе, башҡарасаҡ эшебеҙҙе белә. Ул сағында нишләп Ул яуыҙлыҡ эшләргә рөхсәт итә?

Аллаһ беҙҙе кешеләр итеп яратҡан, ә фәрештәләр итеп түгел. Беҙгә изге һәм гонаһлы эштәрҙе һайлап башҡарыу мөмкинселеге бирелгән. Һәм ике юл бирелгән. Беренсе юлдан барһаҡ, беҙ фәрештәләрҙе үтеп китергә, ә икенсеһенән барғанда хайуандарҙан да түбәнерәк төшөүебеҙ бар. Кешегә дөрөҫ юлды һайлау өсөн аҡыл һәм ихтыяр бирелгән. Аллаһ беҙҙе иҫкәртә: "Һеҙ һынау үтәһегеҙ, шуны үткәндән һуң изгеләр гонаһлыларҙан айырып алынасаҡ".

Хәҙер беҙ һынау үтәбеҙ. Түҙемлегебеҙ етерме уны үтергә, әллә һәләк булырбыҙмы. Былар беҙҙең эш, ҡылыҡ-тәртибебеҙҙән тора.

Ни өсөн Аллаһ Тәғәлә беҙгә нимә һайлап алыуыбыҙҙы белә тороп беҙҙең эштәребеҙҙе яҙып барыусы ике фәрештәне ҡушҡан?

Мәғәнә һалынмайынса Аллаһ тарафынан бер нәмә лә барлыҡҡа килтерелмәгән. Был ике фәрештә беҙҙең эштәребеҙҙе Ҡиәмәт көнөндә кешеләр башҡарылған эштәренән баш тартмаһын өсөн яҙып баралар.

Әгәр ҙә Аллаһтың теләге булһа, бөтә кешеләр ҙә мосолман булырҙар инеме?

Һүҙһеҙ, әгәр ҙә Аллаһтың ихтыяры булһа. Тик быны

Аллаһ Тәғәлә теләмәй. Ул ике юл булдырған. Беҙгә ҡайһыныһы хаҡ икәнен күрһәтеү өсөн Ул Изге Рисәләләр (Яҙыуҙар) һәм бәйғәмбәрҙәр ебәргән. Ул беҙгә хаҡ һәм ялған юлды табыуҙа хоҡуҡ биргән. Һәр бер кеше үҙ тормошо менән, хаҡ йәки ялған юлды һайлап алып, үҙе теләгәнсә идара итә ала.

Әммә Ҡиәмәт көнөндә Ул үҙенең һайлағанына үҙе яуап бирә.

Ризыҡ (кеше эйә булған ниғмәттәр) нимә менән бәйле: Аллаһ Тәғәләнең ихтыяры менәнме әллә кешенең хеҙмәте һәм тырышлығы менәнме?

Ризыҡ Аллаһ Тәғәләнең ихтыяры менән дә һәм кешенең хеҙмәт яратыуы менән дә бәйле. Әммә ул сарыф ителгән хеҙмәт күләменән генә торһа, беҙҙең заманда әҙ эшләп, ҙур килем алған кешеләр булмаҫ ине.

Ә инде әгәр ҙә аҡыл һәм белем менән бәйле булһа, ул ваҡытта ахмаҡтар ярлы булыр ине. Был улай түгел.

Әгәр ҙә ризыҡ тәрбиәнән торһа, ул саҡта тупаҫтар бай булмаҫ ине. Һәм әгәр ҙә ул иманға ҡараһа, унда инде бөтә башҡа дин тотоусылар ярлы булырҙар ине. Әммә беҙҙе уратып алған донъяла бөтәһе лә улай түгел.

Кешеләрҙе ризыҡландырып, Аллаһ Тәғәлә уларҙы һынай. Ул үҙ Ихтыяры менән ризыҡты кәметә йәки арттыра. Хеҙмәт ризыҡтың сығанағы булып тора, әммә тулыһынса шарты булып тормай.

Иң Мөһиме – Аллаһ Тәғәләнең һүҙҙәрендә: “Мин мохтаждарға бирәм”.

* * *

Хикәйәт:

Әрәмтамаҡтар

Көндәрҙән бер көндө изге Ғүмәр хәлиф (радыйаллаһу ғәнһү) мәсеткә килеп ингәс, нимәлер тураһында һөйләшкән ирҙәрҙе күргән.

– Һеҙ ҡайҙан, нимә менән шөғөлләнәһегеҙ, – тип һораған Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) уларҙың янына килеп.

– Беҙ Аллаһ Тәғәләгә генә ышаныусылар. Беҙ тик Аллаһ Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыу менән генә шөғөлләнәбеҙ, беҙ эшләмәйбеҙ. Аллаһ һәр бер йән эйәһенә ризыҡ биргән.

Бындай яуап Ғүмәрҙең (радыйаллаһу ғәнһүҙең) ныҡ асыуын килтергән, ул яуап биргән:

– Һеҙ Аллаһҡа ышаныусыларҙан түгел, ә әрәмтамаҡтар. Һеҙ сит кешенең ризығын ашап, башҡаларҙың елкәһендә ултырыусылар. Орлоҡто сәсеп, ерҙе эшкәрткән, ә һуңынан Аллаһтан үҙ ризығын алырға ышанған кеше генә Аллаһҡа иҫәп тотоусыларҙан һанала. Ошо һүҙҙәр менән Ул был кешеләрҙе йәмғиәттән ҡыуған.

Тәүәккүл – өмөт итеү: теләгән нәмәләргә өлгәшеү өсөн кәрәкле бөтә матди һәм рухи шарттарҙың үтәлеүен белдерә. Һуңынан, тик Аллаһ Тәғәләгә генә ышанып, был эштең аҙағын Уның хәл итеүенә генә ҡайтарып ҡалдырыу. Миҫал өсөн: крәҫтиән бөтә көсөн һалып, ерҙе һөрә, һәм һуңынан ғына Аллаһ Тәғәләгә өмөт итеп уңыш көтә. Бөтә кәрәкле шарттарҙы үтәмәй тороп, тәүәккүлде башҡарырға

ярамай. Һәм тәүәккүл була алмай, әгәр кем дә булһа йөҙә белмәйенсә Аллаһҡа ғына өмөт итеп диңгеҙгә ташланһа.

Беҙҙең һөйөклө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең ун сәхәбәһенә үҙҙәре йәшәгәндә үк әле уларҙың ожмахҡа эләгеүҙәре хаҡында хәбәр иткән. Шуға ҡарамаҫтан, был сәхәбәләр бөтә ғүмерҙәре буйынса тырышып хеҙмәт иткәндәр һәм ғибәҙәт ҡылғандар.

Ризыҡ: һәр йән эйәһенә йәшәү өсөн кәрәкле булған бөтә нәмә (ризыҡ) Аллаһ Тәғәлә тарафынан алдан билдәләп ҡуйылған. Һәр кешенең бурысы булып ризыҡ табыу тора. Һәм һәр кемдең үҙенең ихтыярында ул хәләл юл менәнме, әллә хәрәм юл менәнме ашарға табасаҡ.

Әжәл: кешенең ер йөҙөндә йәшәүенең туҡтау ваҡыты. Бер кем дә үҙенең үлем ваҡытын белмәй. Йәш сағындамы, әллә ҡартайғасмы, сәләмәт сағындамы, әллә ауырығандамы – әжәл Аллаһ Тәғәләнең Алдан Билдәләүе буйынса килә. Изге Ҡөрьән аяты иҫкәртә: “Әжәл килеүен бер сәғәткә алғараҡ күсереп тә, бер сәғәткә кисектереп тә булмай“.

Хикәйәт:

Еңел ризыҡ көткән кеше

Бер төндө оло ғына кеше асыҡ яланда ҡалған. Ул ҡырағай йәнлектәрҙән ҡурҡып ағас башында ҡунырға ҡарар иткән. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, ағас аҫтына яраланған төлкө шыуышып килгән. Кеше уйлап ҡуя: “Төлкө нисек итеп ризыҡланыр, нисек итеп һыуһынын ҡандырыр?”– икән.

Бер ни тиклем ваҡыттан һуң алыҫта арыҫлан күренгән. Арыҫлан болан һөйрәп алып килә икән. Йыртҡыс

табышын ағасҡа тиклем һөйрәп килтереп еткергән. Уны ботарлаған, туйғанса ашаған һәм түшкәнең ҡалғанын ағас аҫтында ҡалдырып, күҙҙән юғалған. Төлкө көскә түшкәгә шыуышып килеп ошо емтектәр менән туйынған. Ағас башында ултырған ҡарт уйға ҡалған:

– Бына! Тимәк Аллаһ яралы төлкөнө ас ҡалдырманы. Ул уға ризыҡты уның нәҡ аяҡ аҫтына килтереп ҡуйҙы. Һәм ни өсөн мин шул тиклем йылдар – үҙемдең эшемдә этләнгәнмен. Хәҙер мин дә үҙемә берәй торор урын табам һәм унда үҙемә ризыҡ көтәсәкмен... Шулайтып уйлап, ул юлға сыҡҡан, торлаҡ тапҡан һәм көтә башлаған. Бер көн көткән, ике көн, өсөнсө көн көткән. Бер ниндәй ҙә аҙыҡ юҡ. Ахырҙа аслыҡтан уны йоҡо баҫҡан. Һәм төшөндә уға мөрәжәғәт иткән тауыш ишетә:

– Эй, аҡылһыҙ кеше! Нимә бында ятаһың, тор! Нишләп һин сәләмәт булған көйө туңып ятаһың? Һин нимә, үҙеңде имгәнгән төлкө итеп күрҙеңме әллә? Бар эшлә, арыҫлан кеүек бул, әйҙә, һинән башҡаларға ла файҙа булһын!

Хеҙмәт ғибәҙәт ҡылыу булып торамы?

Көндәлек тормоштағы хеҙмәт шулай уҡ ғибәҙәт булып тора.

Тәҡдир һәм яҙмышҡа һылтанып, бер нимә лә эшләмәй ятырға мөмкинме?

Аллаһ Тәғәлә нимә булырын бөтәһен дә белә: беҙ ҡасан тыуасаҡбыҙ, ниндәй эштәр эшләйәсәкбеҙ, ҡасан үләсәкбеҙ һәм ҡайҙа эләгәсәкбеҙ: Ожмахҡамы йәки Тамуҡҡамы? Кеше шулай уйларға мөмкин: “Мин нимә генә эшләһәм дә – был яҙмыш”, “миңә нимә яҙылған, шул булыр”, тип иҫәпләп, ғәмһеҙлек ҡылыу – хата.

Аллаһ Тәғәлә кем хеҙмәт итә, шуны ярата.

Бер саҡ беҙҙең һөйөклө Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер нимә лә эшләмәй тик ултырған кешене осратҡан. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға сәләм бирмәгән, ә инде кире үткәндә көтмәгәндә һаулашҡан. Кеше аптырап, урынынан торған һәм һораған.

– Эй, Аллаһтың Рәсүле! Һин әле генә минең менән һаулашмай үткәйнең, әле һаулаштың. Сәбәбе ниҙә?

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға яуап биргән:

– Мин һинең эргәңдән тәү тапҡыр үтеп киткәндә һин тик кенә ултыра инең. Ә инде кире үткәндә, һин ҡулыңа сыбыҡ алып ергә нимәлер төшөрәһең. Нимә тураһындалыр уйлайһың, тимәк. Уйланыу – хеҙмәт ул. Шуның өсөн дә мин һинең менән һаулаштым.

Хикәйәт:

Ысын ғибәҙәт

Бер ваҡыт изге Ғүмәр хәлиф (радыйаллаһу ғәнһү) Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мәсетендә иттиҡаф (ғибәҙәт ҡылыу маҡсаты менән сыҡмайынса мәсеттә булыу) ҡылған бер кешене күрә. Был Рамаҙан айындағы иттиҡаф булмаған була. Әлеге кеше шулай итеп Аллаһҡа күберәк ғибәҙәт ҡылырға теләй. Ғүмәр хәлифкә (радыйаллаһу ғәнһү) был оҡшамаған, һәм ул һораған:

– Һине ашау-эсеү, кәрәк-яраҡ менән кем тәьмин итә?

– Минең иптәшем...

– Ә һин үҙең ни менән шөғөлләнәһең?

– Мин ғибәҙәттә...

– Тимәк, һинең иптәшең эшләй, ә һин ашайһың ғына, дөрөҫмө?

– Эйе...

– Ул сағында белеп ҡуй: һинең дуҫың һиңә ҡарағанда күберәккә өлгәшкән, һәм ул һинән күбәрәк ғибәҙәт ҡыла.

Тәҡдиргә ышаныу нисек кешенең тормошон үҙгәртә?

Кеше тәндән генә тормай, уның төп өлөшө булып йән тора. Тәҡдиргә ышаныусы кешенең йәне тыныс була.

Үтеп киткән нәмәләр үткән, йәғни үлгән була. Уны кире ҡайтарыу мөмкин түгел. Булып үткән нәмә тураһындағы ҡыҙғаныс ғазап һәм ҡайғы урынына үҙеңдең яҙмышыңа риза булырға, ебәрелгән хаталарҙан үҙеңә һабаҡ алырға кәрәк.

Изгелек эшләгәндә, уның менән маҡтанырға ярамай, был мәрхәмәт өсөн Аллаһ Тәғәләгә рәхмәт әйтергә кәрәк. Аллаһ – Ул бөтә мөмкинселектәрҙе биреүсе һәм был изге эште башҡарыусы.

Әлеге мәлдә үҙеңдең киләсәк эштәреңде уйларға һәм үҙеңдең тормошоңдо шул план буйынса ҡорорға кәрәк. Иң элек мәңгелек тормош өсөн кәрәкле эштәрегеҙҙе эшләргә тырышығыҙ.

Киләсәк беҙ планлаштырғандың хәл ителешен әйтер.

Аллаһ Тәғәлә беҙгә яуызлыҡ теләмәй. Беҙҙән үҙебеҙ эшләгән гонаһтар өсөн һораясаҡтар. Беҙ бында Аллаһ Тәғәләне ғәйепләргә тырышырға тейеш түгелбеҙ.

Күңелебеҙҙәге шикләнеүҙәр өмөттәребеҙҙе һүндермәһен. Бөтә булған нәмәләрҙән беҙ файҙаларын ғына һайлап алырға тейеш. Һәр бер ҡыйынлыҡтан сығыу юлы бар.

“Хеҙмәт – ул ғибәҙәт”, тип башҡа төр ғибәҙәттәрҙе ҡалдырырға мөмкинме?

Аллаһ Тәғәлә әйтә:

“Кешегә – ул тырышлыҡ күрһәткән нәмә генә бирелә, уның тырышлығы ҡараласаҡ, һуңынан ул башҡарған эш тулыһынса бүләкләнәсәк”

“Ән-Нәджм, 39–41”

Был инде кешенең хеҙмәте юғары баһаланасағы тураһында белдерә.

Хеҙмәт изгелеккә, хаҡлыҡҡа һәм дә рөхсәт ителгәнгә йүнәлтелгәндә генә ғибәҙәт булып тора.

“Мин ризыҡ табам”, тип отошло уйын уйнаусыларҙың, спиртлы эсемлектәр менән һатыу итеүселәрҙең хеҙмәте ғибәҙәт һаналмай. Уларҙың эштәре гонаһлы.

Кешенең хәләл ризыҡ (Аллаһ Тәғәлә рөхсәт иткән) тапҡан көндәлек хеҙмәте ғибәҙәт булып тора. Ундай кешеләрҙе Аллаһ Тәғәлә ярата.

Хеҙмәтте Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу тип иҫәпләгән изге мосолмандар араһынан фәндә, техникала, сәнғәттә һәм поэзияла иҫ китес юғары дәрәжәгә ирешкәндәр бар. Дини

фәндәр буйынса: Имам Әғзәм Әбү Хәнифә, Бохари, Имам Ғазали; тәбиғәт фәндәре буйынса: Әбү Ғәли ибн Сина, Хәрәзми, Олоғбәк, Ғәли Кошсо; сәнғәт буйынса: Мимар Синан, Хафиз Ғусман һәм башҡа күптәр.

Хикәйәт:

Һөйәлле ҡулдар

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) намаҙҙан һуң һәр ваҡытта ла сәхәбәләрен ҡул биреп күрешеп сәләмләр булған. Бер ваҡыт ул бер ир кешегә ҡулын биргән һәм уның ҡулдарының һөйәлдән ҡаты икәнен тойған. Ир кеше Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдән) ҡулдары ҡаты булғанға ғәфү үтенгән.

Аллаһтың Рәсүле (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең сәхәбәһенә һөйөү һәм мөләйемлек менән ҡараған, уның ҡулдарын үҙенең ҡулдарына алып әйткән:

– Был ҡулдар Аллаһ Тәғәлә һәм Уның Бәйғәмбәренә ҡәҙерлеләр. Талыҡҡан ҡулдар хөрмәткә лайыҡлылар. Аллаһ уларҙы һәр ваҡыт уттан һаҡлаясаҡ.

ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ЯУЫЗЛЫҠ

Нимә ул изгелек?

Кеше өсөн, ахыр сиктә нимә файҙалы, шул изгелек.

Нимә ул яуызлыҡ?

Кешегә нимә зыян килтерә, шул яуызлыҡ. Аллаһ Тәғәлә берҙән бер Барлыҡҡа килтереүсе, һәм Ул изгелек менән яуызлыҡты барлыҡҡа килтергән. Изге Ҡөрьәндә әйтелгән: “Аллаһ – бөтә нәмәне барлыҡҡа килтереүсе”. Беҙҙең диндә изге эштәр ҡылырға ҡушылған, һәм яуызлыҡ эшләргә тыйылған.

Яуызлыҡты тыуҙырыу яуызлыҡ булып тормаймы?

Мәҫәлән, шайтан кешеләрҙе хаҡ юлдан яҙҙыра, һәм ул кешеләрҙең Тамуҡҡа инеүенең сәбәпсеһе лә. Ул сағында шайтанды булдырыу үҙе яуызлыҡ булмаймы?

Яуызлыҡ булып яуызлыҡты булдырыу түгел, ә яуызлыҡты эшләү һанала.

Миҫалға утты алайыҡ. Беҙ утта ашарға бешерәбеҙ, өйҙәрҙе йылытабыҙ. Әммә әгәр ҙә беҙ был “тоғро дуҫҡа”

ҡулыбыҙ менән тейһәк, ул уны бешерә, ауыртыу һәм ғазап килтерә. Һәм беҙ ҡулыбыҙҙы бешергәндән һуң йәки өй янғандан һуң утты табыу – яуызлыҡ тип әйтә алабыҙмы? Юҡ, әлбиттә. Сөнки янғындың сәбәбе беҙ үҙебеҙ.

Шулай уҡ шайтанды булдырыу. Уны булдырыуҙа яуызлыҡ юҡ. Шайтан кешене яуызлыҡ эшләргә этәрә генә. Кеше үҙ теләге менән уның хөсөттәрен тыңлай йәки кире ҡаға. Яуызлыҡтың нигеҙе шайтанды булдырыуҙа түгел, ә уның хөсөтөнә эйәреүҙә.

Ни өсөн һуң шайтан барлыҡҡа килтерелгән? Уны барлыҡҡа килтереүҙең фәһеме низә?

Был донъяла изге һәм гонаһлы кешеләр бер-береһенә йәнәш кенә йәшәй. Немруд һәм Ибраһимдар, Фирғәүен һәм Мусалар, Әбү Йәһил һәм Әбү Бәкрҙәр бер-береһенең йәнәшендә йәшәйҙәр. Һәм уларҙы бер-береһенән айырыу анһат түгел. Әммә нисектер уларҙы айырырға кәрәк? Шуның өсөн дә шайтан булдырылған. Кем уның хөсөтөнә бирелә, улар һәләк булалар. Кемдәр уның ниндәй яуызлыҡҡа этәреүен иҫтә тотоп унан ситләшәләр, улар ерҙәге һынауҙы үтәләр.

Яуызлыҡты булдырыуҙың мәғәнәһе низә?

а) Ҡайһы саҡта беҙ яуызлыҡ тип иҫәпләгән нәмәләр беҙгә бәлки шулай тойола ғыналыр. Бөтә нәмәлә лә Аллаһ Тәғәләнең тәрән аҡыллылығы ята. Беҙгә зыянлы һәм файҙаһыҙ тойолған нәмәләр, башҡа кешеләргә кәрәкле һәм файҙалы булыуы мөмкин.

б) Яуызлыҡ изгелектең ни тиклем әһәмиәтле икәнен күрһәтә. Кеше ауырымайынса тороп сәләмәтлегенең ни тиклем ҡиммәтле икәнен баһалай алмай.

Изгелек менән яуызлыҡҡа нисек ҡарарға кәрәк?

Бөтә яҡшылыҡ өсөн беҙ Аллаһ Тәғәләгә рәхмәт әйтергә тейешбеҙ. Әгәр ҙә инде яманлыҡ менән осрашһаҡ беҙ сабырлыҡ күрһәтеп, унан һаҡланырға тырышырға тейешбеҙ.

Аллаһ изгелекте барлыҡҡа килтергән. Ул нимә өсөн яуызлыҡты булдырған?

Изгелек һәм яуызлыҡты булдырыусы – Аллаһ Тәғәлә. Беҙ үҙ ихтыярыбыҙ менән изгелек менән яуызлыҡтың икеһенең береһен һайлайбыҙ. Әммә Аллаһ беҙ изгелек һайлағанда беҙҙән ҡәнәғәт, ә инде беҙ яуызлыҡты ҡыуһаҡ, асыулана. Ауырыу, мохтажлыҡ һәм ғазаптар кешегә ул Аллаһ Тәғәләнең ниғмәттәрен баһалаһын өсөн бирелә. Был һынауҙарҙы үтеп, кеше ҙур бүләккә лайыҡ була һәм Аллаһ Тәғәлә алдында үҙенең дәрәжәһен күтәрә.

Муршида Уйсал.
Мои первые шаги по пути истины.
Перевод с турецкого на башкирский язык.
М.: ООО «Издательская группа «САД», 2-е издание, 2010 г.

ISBN 978-5-902855-68-2

ООО «Издательская группа «САД»

Офис: г. Москва, м. Петровско - Разумовская, ул. Ангарская, 21
Почтовый адрес: 125412 г. Москва, а/я 28
Тел: 8 (499) 9066717, 8 (495) 7074666, 8 (905) 7347083
www.sadpress.com / izdatelstvo-sad@yandex.ru

Отпечатано в ООО «Принт Экспресс»
105066, г.Москва, Денисовский переулок, 30
Тираж: 3.000 экземпляров

Лучший Пример - 1, 2, 3 | Тасаввуф | На пике цивилизаций | История Пророков - 1, 2, 3, 4, 5 | Последний Вздох | Мусульманский Календарь 2009

Земная жизнь и её блага | Истории из Корана | 40 Хадисов в рассказах | Мои первые шаги | Исламское Вероучение | Основы Исламских Знаний | 52 Пятничные Проповеди

Медицина Пророка | Ислам Вера Поклонение | Мухаммад Мустафа (сас) | Семейная Педагогика | Женщина в Исламе | Рассказы из уст нашего пророка | Жены Пророка

Учусь читать Коран | Дуа и Суры | Вакф Благотворительность Служение | Беседы с духовным наставником | Нравственность Мусульманина | 40 Священных Хадисов | Учусь Тахарату и Намазу

Растения из садов Священного Корана | Тасаввуф и Тарикаты | Повседневная жизнь Пророка Мухаммада (с.а.с.) | Ислам | Рамадан и Пост | Курбан | Исповедь Сатаны | Истибра

Наши книги и журнал «Золотой Родник» Вы можете приобрести, обратившись в офис, к региональным представителям, и в магазинах, продающих исламскую литературу. Вы можете заказать их наложенным платежом, позвонив по телефону, отправив заявку по почте, SMS или Интернету.

Sad Graphics

Книги и журнал Золотой Родник можно заказать:

Почтовый адрес: 125412 г. Москва, а/я 28 - Офис: г. Москва, м. Петровско-Разумовская, ул. Ангарская, 21
Тел / Факс: 8 (499) 9066717 - 8 (495) 7074666, 8 (964) 7818321 - www.sadpress.com / izdatelstvo-sad@yandex.ru

Издательская группа САД

Новинка!

Книги и журналы можно заказать:

Почтовый адрес: 125412 г. Москва, а/я 28
Офис: г. Москва, м. Петровско-Разумовская, ул. Ангарская, 21
Тел / Факс: 8 (499) 9066717 - 8 (495) 7074666, 8 (964) 7818321
www.sadpress.com - izdatelstvo-sad@yandex.ru

Вы можете заказать бесплатный каталог Издательства.

Наши книги и журнал «Золотой Родник» Вы можете приобрести, обратившись в офис, к региональным представителям, и в магазинах, продающих исламскую литературу. Вы можете заказать их наложенным платежом, позвонив по телефону, отправив заявку по почте, SMS или Интернету.

Издательская группа САД

Sad Graphics

Новая!

Книги и журналы можно заказать:

Почтовый адрес: 125412 г. Москва, а/я 28
Офис: г. Москва, м. Петровско-Разумовская, ул. Ангарская, 21
Тел / Факс: 8 (499) 9066717 - 8 (495) 7074666, 8 (964) 7818321
www.sadpress.com - izdatelstvo-sad@yandex.ru

Вы можете заказать бесплатный каталог Издательства.

Издательская группа САД

Наши книги и журнал «Золотой Родник» Вы можете приобрести, обратившись в офис, к региональным представителям, и в магазинах, продающих исламскую литературу. Вы можете заказать их наложенным платежом, позвонив по телефону, отправив заявку по почте, SMS или Интернету.

Sad Graphics